ИҒТИБАР! 1 июлдән сентябргә тиклем  2010 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда "Киске Өфө"гә яҙылыу иғлан ителде. Йәғни ошо ике ай эсендә гәзитебеҙгә элекке хаҡтар менән: 50665 индекслыһына - 294 һум 84 тингә, 50673 индекслыһына - 282 һум 66 тингә яҙылыу мөмкинлеге бар. Ә сентябрҙә хаҡтар бер аҙ ҡиммәтләнер, моғайын. Бергә ҡалайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25 - 31 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2009 ЙЫЛ

2002 йылдан башлап сыға    Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

№30 (344)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


### Анкара-Өфө дуҫлығы,


йәки төрөк ерендәге осрашыуҙар тураһында

4

### Шәриғәт ҡанунлы банкылар...


Рәсәйҙә лә кәрәк

5

### Үҙ йортонду төҙөү...

күпкә арзанға тура килә



11

### Тәмәке ҡоло...


XXI быуатта йәшәгән ҡыҙға асыҡ хат

12

### ТВ программа

14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡала мөхитендә милләтте һаҡлауы ауырыраҡ, ә йәштәр ҡалаға ынтыла. Был милләтебеҙ өсөн хәүефле түгелме?

*Ҡадир МӘҒӘФУРОВ, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор:*

- Киреһенсә, ҡалала төпләнеүсе башҡорттар күбәйә барған һайын, халҡыбыҙҙың киләсәге өсөн хәүеф кәмей барасаҡ. Мин 70-се йылдарҙа уҡ ҡорҙаштарым араһында башҡорттарҙы нисек тә булһа ҡалаға ылыҡтырыу зарурлығы хаҡында йыш һүҙ ҡуҙғата инем. Ни өсөн?

Ниндәй генә милләт булмаһын, уның үҫеше хәҙерге заманда ҡалала хәл ителә - был цивилизация ҡануны. Ҡалала йәшәүселәре аҙ булған милләт башҡа халыҡтарҙан артта ҡаласаҡ. Киләсәк тормошобоҙҙо билдәләүсе технологияларҙың да ҡала мөхитендә тыуыуын онотмайыҡ. Эйе, халҡыбыҙ ҡасандыр күпләп мал аҫрап, тәбиғәт ҡосағында көн иткән. Әммә боронғолоҡҡа кире ҡайтыу юҡ, хәҙерге заман милләттәргә бөтөнләй икенсе талаптар ҡуя. Халҡыбыҙҙың күпселеге элеккесә тик ауыл хужалығы менән генә шөғөлләнеүен дауам итһә, беҙ ҡалала йәшәүҙе хуп күргән башҡа халыҡтарҙы ашатыусы, хеҙмәтсе милләт булып ҡаласаҡбыҙ. Былай ҙа бит банк-финанс, сауҙа, сәнәғәт, энергетика өлкәһендә эшләүсе милләттәштәребеҙ бик аҙ бөгөн. Башҡорттар күпләп ҡалаға килеп, ижтимағи-иҡтисади өлкәләрҙең барыһында ла үҙ урынын алыуы фарыз. Бының өсөн йәштәрҙе ҡалала йәшәргә, төпләнергә мөмкинлек биргән барса һөнәрҙәргә лә ылыҡтырыу кәрәк. Ҡалаға күсеп килгәндәрҙән тыуған яңы быуын киләсәктә халҡыбыҙҙың ҡалаларҙағы төп терәктаянысына әйләнәсәк. Ә ҡалала башҡортлоҡ юғала, тип хәүефләнергә ерлек юҡ. Кинәйәләп әйткәндә, ҡала урамында ике башҡорт осрашһа, тыуған телендә һөйләшә башлай, ә улар өсәү булһа, яндарына килгән урыҫ та башҡортса һупалай башлаясаҡ. Ҡалала башҡорт мөхите ни тиклем киңәйһә, милли тәрбиә биреү ҙә шул тиклем еңелерәк буласаҡ.

*Шакирйән ДӘМИНЕВ, ғилми хеҙмәткәр:*

- Мин был хәлдән әллә ни хәүеф тапмайым. Йәштәрҙең ҡалаға ынтылыуы тәбиғи: бында тормош ҡайнай, мәҙәниәт үҙәктәре лә, юғары уҡыу йорттары ла ошонда, ял итеү, күңел асыу өсөн мөмкинлектәр күп. Унан һуң, был дөйөм глобалләшеү процестарының бер сағылышы бит, ә башҡорттар өсөн айырым ҡанун юҡ. Ҡалала шәхес үҫеше өсөн шарттар һәйбәт. Ә башҡортлоҡҡа зыян килеүҙән ҡурҡырға ярамай: ҡалала йәшәп тә, балаларҙы милли рухта тәрбиәләп була бит. Тик ҡалала йәштәребеҙ өсөн  милли аралашыу мөхитен киңәйтеп, мәҫәлән, милли клуб кеүек ойошмалар булдырып, уларҙың эшен әүҙем алып барыусылар ғына кәрәк. Йәнә шул: ауыл мөхитен хуп күреүселәр әле лә күп, улар киләсәктә лә бөтмәйәсәк.

*Вадим САФИН, психология фәндәре кандидаты, профессор:*

- Йәштәрҙең ҡалала төпләнеп ҡалырға ынтылыуының милләтебеҙ өсөн ыңғай яҡтары менән бер рәттән, кире йоғонтоһон да күрмәү мөмкин түгел. Бер яҡтан, ҡала мөхите йәштәрҙе заманға яраҡлашып йәшәргә өйрәтә, теләгән һөнәрен үҙләштереү мөмкинлеген бирә, рәсми мәҙәниәткә ылыҡтыра, ауыл кешеһенең кәмһенеү тойғоһон бөтөрөп, үҙ баһаһын үҫтерә. Икенсе яҡтан, йәштәр ысын, саф милли мөхиттән алыҫлаша, ғөрөф-ғәҙәттәрен онота, милли һөнәрҙәрҙән (умартасылыҡ, кейеҙ баҫыу һ.б.) ситләшә, башҡортса һөйләшкән хәлдә лә, уның нескәлеген юғалта бара. Ҡала мөхите халыҡтың тел байлығын юҡҡа сығара. Ғөмүмән, ҡала башҡорттары ваҡытында Әхмәтзәки Вәлиди иғтибарға алған башҡорт милләтен һаҡлап тороусы өс факторҙан - телдән, диндән, ерҙән ситләшә. Ҡалала этник ассимиляция көслөрәк, ҡатнаш никахтар күберәк, балаларҙың урыҫлашыуын туҡтатыуы ҡыйын. Шулай булғас, бөгөнгө ҡала милләтте һаҡлаусы функцияһын үтәй алмай, киреһенсә, уны юғалтыуҙарға дусар итә. Быға ҡаршы торор өсөн әсә телен балалар баҡсаһынан вузға тиклем уҡытыу, йәштәрҙе милли сәнғәткә ылыҡтырыу, башҡорт гәзит-журналдарын һәр ғаиләлә алдырыу, парктарҙа айына бер тапҡыр башҡорт көндәрен уҙғарыу, уҡыу йорттарында милли рухтағы йәштәр кисәләрен ойоштороу кеүек сараларҙы ғәмәлгә ашырыу мөһим.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ яҙып алды.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ТОРАТАУЫМ - РУХИ ҠӘЛҒӘМ



**Ишембай менән Стәрлетамаҡ ҡалалары араһында урынлашҡан Торатау - уникаль тәбиғәт ҡомартҡыһы. Ул беҙҙең заман ғалимдары, белгестәре тарафынан күптән инде шулай тип ҡағыҙға теркәлеп ҡуйылған: "Торатау һәм Йөрәктау -  бөтөн донъяға билдәле уникаль тәбиғәт объекттары. Улар бынан 250 миллион йылдар самаһы элек, Урал тауҙары формалашыуҙың иң башланғыс осоронда уҡ хасил булған һәм Ер йөҙөндәге иртә пермь йәшендәге берҙән-бер тау массивтары иҫәпләнә. Улар фәнни, экологик, тарихи, мәҙәни һәм эстетик йәһәттән иң ҡиммәтле тәбиғәт ҡомартҡылары". Ошо хәҡиҡәт 1965 йылдың 17 августында БАССР Министрҙар Советының 465-се һанлы ҡарарында ла теркәлә һәм Торатау республика әһәмиәтендәге тәбиғәт ҡомартҡыһы тип яҙып ҡуйыла.**


(Торатау тураһындағы материалды 6-сы биттә уҡығыҙ).

✓ *Үҙәктәгеләр, милләттәрҙе исеме менән атамай, барыһын да Рәсәй халҡы тип үҙгәртергә маташа, ә халыҡтарҙың йөҙҙәрен, тышҡы төрлөлөктә, ҡан хәтеренә һеңгән йәшәү рәүешен, рухын үҙгәртә алырҙармы икән?*



ШАҢДАУ

## ОШОНДАЙ БАҪМАҒА ҺЫУҺАҒАНБЫҘ...

**"Киске Өфө"нөң 28-се һанында баш мөхәррирҙең "Һеҙҙең менән бәхетлебеҙ" тигән мәҡәләһен уҡығас, мин дә хат яҙып һалырға булдым.**

Һуңғы өс йылда ошо гәзитте яратып уҡыйым. "Аҡыллыға ым да етә" тигәндәй, нисә йыл шундай уҡымлы гәзиткә һыуһап йәшәгәнбеҙ икән! Һәр һанын көтөп алам, хатта ҡайһы берҙә "Ниңә аҙнаһына ике тапҡыр сыҡмай икән?" тип уйлайым. Шунда уҡ тағы уйымдан кире ҡайта һалам, сөнки "Киске Өфө"нө уҡый башлаһаң, айырылып булмай. Аҙнаһына ике тапҡыр сыҡһа, бар эшебеҙ ҙә туҡтап ҡалыр ине, ә беҙ бит ауылда йәшәйбеҙ - эш бөтөрлөк түгел...

Шуны әйтергә теләйем: бик фәһемле, уҡымлы гәзит. Бер ниндәй енәйәт донъяһы ла, кеше тикшереү, ғәйбәт-фәлән дә юҡ. Бар гәзит кешеләргә яҡшылыҡ теләү, изгегә өндәү, фәһем биреү менән һуғарылған. Әҙәби әҫәрҙәр яңы авторҙарҙыҡы булыуы менән йәлеп итә. Нисек бәхетле, уңышлы кеше булырға, тигән һорауҙарға яуап табыла. Һәр хәлдә, был гәзиттән әллә күпме белем, аҡыл, фәһем алам, яңылыштарҙан һаҡланырға тырышам.

Һәм тағы. Әле һеҙҙең "Киске Өфө"-бүләгем" тигән акцияғыҙ башланмаҫ элек үк (алдан һиҙгән кеүек) бик яҡын әхирәтемә февраль айында уҡ "Киске Өфө"нө яҙҙырып бүләк иткәйнем. Уға ла гәзит бик оҡшаны, рәхмәттәр әйтеп, ҡыуанып уҡый. Үҙҙәре яҙыла алмағандарға ғына түгел, яҙыла алып та, битараф ҡалғандарға ла бүләк итергә кәрәк "Киске Өфө"нө. Иманым камил, онотолмаҫлыҡ бүләк буласаҡ ул.

Баш мөхәррирҙең борсолоуын аңлайым, хәҙер күптәр ҡулына гәзит-журнал тота һалып бармай, шуға милли баҫмаларҙың да тиражы кәмей бара. Әммә һеҙҙе аңлаусы, һеҙҙе тыңлаусы, һеҙҙе уҡыусылар бар ул, хөрмәтле "Киске Өфө"ләр.

**Әнисә ҒИБӘҘУЛЛИНА,**
**Мәләүез районы Арыҫлан ауылы.**

## БЕҘ ҘӘ БӘХЕТЛЕБЕҘ

**Баш мөхәррирҙең уҡыусыларға "Һеҙҙең менән бәхетлебеҙ" тип өндәшеүенә яуап итеп, мин дә уҡыусылар исеменән "Беҙ ҙә "Киске Өфө" менән бәхетлебеҙ" тип әйтергә теләп, ҡулыма ҡәләм алдым.**

Ысын, нисек итеп "Киске Өфө"нө уҡымай, уға яҙылмай йәшәргә була икән? Ул бит ысын мәғәнәһендә башҡорттоң рухын үҫтереүсе баҫма. Гәзиттең һәр һанын башынан аҙағына тиклем уҡыйым, йәнем ял итеп ҡала. Шул тиклем аҡыллы, рухлы йәштәребеҙ бар, улар барҙа илебеҙ - Башҡортостаныбыҙ үҫер, йәшәр, иншалла.

Ижадығыҙ бик емешле, ауырыу йәнгә дауа кеүек. Был тиклем темаларҙы, был тиклем геройҙарҙы ҡайҙан таба икән былар, тип аптырайым хатта. Хаҡ юлдағы кешеләргә Аллаһы Тәғәлә үҙе ярҙам итәлер, күрәһең. Мөхәррир һәм мөхәрриәтегеҙ уйлы, тәрән фекерле. Беҙҙең өсөн дә уйларҙар әле, тип йәшәгән дәүерҙән һаман арына алмай ыҙаланабыҙ бит, шундай саҡта гәзит фекерләргә өйрәтеп кенә ҡалмай, яңы шарттарҙа дөрөҫ юлға йүнәлтеүсе маяҡ та кеүек ул. Ауыр саҡтарҙа тормошҡа фәлсәфәүи ҡарай белеү ҙә ауырлыҡтарҙы йырып үтер көс бирә. Беҙ, өләсәйҙәр, мәғлүмәтле булмаһаҡ, өйҙә ултырып ҡына йәш быуынға дөрөҫ кәңәш бирә алмаҫ инек. Ҡалыплашҡан уй-фекерҙән ары китә алмаған саҡтар ҙа күп була бит. "Киске Өфө"ләге ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе уҡып, балаларға, ейәндәргә әйтер аҡыл алам, ҡайһы саҡта психологик яҡтан шул тиклем наҙанмын икән, тип ҡуям, әгәр гәзиттә яҙылғандарҙы элегерәк белһәм, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә хаталар китмәҫ ине, тигән уйға киләм. Гәзит кәрәкле мәғлүмәт биреп кенә ҡалмай, ә тайпылған асылыбыҙға ла йүнәлтә беҙҙе.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**

ИШАРА



# ҮҘҘӘРЕ УЛТЫРҒАН БОТАҠҠА...

## балта сабалармы?

**"Киске Өфө"нөң 27-се һанында "РФ дәүләт милли сәйәсәте нигеҙҙәре тураһында"ғы Федераль Закон концепцияһы проекты тураһында бер нисә кешенең фекере баҫылғайны. Шуны уҡығас тыуған уйҙарымды ла яҙайым әле, тинем.**

...Радио аша бик күп йылдар элек тыңлаған бер хикәйә иҫемә төштө. Уҡытыусы уҡыусынан бер дәрестә: "Һыйыр беҙгә нимә бирә?" - тип һорай. Уҡыусы йылмайып: "Һыйыр беҙгә һөт бирә", - тип яуаплай. Уҡытыусы: "Һыйыр беҙгә тағы ла нимә бирә, уйлап ҡара әле", - ти. Уҡыусы: "Һыйыр беҙгә ҡаймаҡ, май, ҡатыҡ бирә", - тип өҫтәй. Уҡытыусы: "Һыйыр беҙгә тағы ла нимә бирә?", - тип ныҡыша. Уҡыусы уйланып тора ла: "Һыйыр беҙгә быҙауын бирә", - тип әйтеп шатлана. Ә уҡытыусы һаман: "Һыйыр беҙгә тағы ла нимә бирә?" - тип һорап, баланы ҡаңғырта. Уйланып тора торғас, уҡыусы: "Һыйыр беҙгә үҙен бирә",- ти.

Оҡшаманы миңә был хикәйә, шуға ла уны ишеткәс тә онотторға тырышҡайным да, булманы. Бөгөнгө тормош хәлебеҙҙе хәтерләткәнгә күрә тағы хәтеремдә ҡалҡып сыҡты ул.

Башҡортостан үҙендә йыйылған һалымдың 70 проценттан күберәген Үҙәккә биреп, үҙенә 30 проценттан да аҙырағын ҡалдыра, тиҙәр бит. Һаман туймайҙар. Һаман беҙҙең менән булышыуҙан туҡтамай үҙәктәгеләр. Хәҙер инде милләткә, миллилеккә бәйләнеп теңкәгә тейәләр.

Рухыбыҙҙы, тарихыбыҙҙы, боронғоларҙың аманатын онотторорға тырышалар. Әлеге уҡытыусы менән уҡыусы әңгәмәһендәге кеүек, үҙебеҙҙе, телебеҙҙе, булмышыбыҙҙы бирергә, йәғни юҡҡа сығарырға ҡалдымы инде?

Тарих фәндәре докторы, профессор Нәзир Ҡолбахтиндың фекере дөрөҫ: милләттәргә бәйләнеүселәрҙең эшмәкәрлеге Рәсәй Федерацияһын юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән. Шулай булғас, милләттәргә бер туҡтауһыҙ бәйләнеүселәр милли республикаларҙың ғына түгел, ә Рәсәй Федерацияһының да дошманы. Шул дошмандарҙың "эшмәкәрлеген" ниңә РФ Хөкүмәте, Дәүләт Думаһы депутаттары күрмәй һәм уларҙы тыймай икән, тип тә аптырайым.

Ошо Федераль Закон концепцияһы проекты хаҡында уйланғанда тағы ла бер көләмәс иҫемә төштө. Мәскәү метроһы электричкаһында бер әбекәй бер Африка студентын күреп: "Негр, негр! Һин ҡытаймы?" - тип һораған. Был студент йылмайып ҡына: "Юҡ, мин ҡытай түгелмен,"- тип яуаплаған. Бер туҡталыш үткәс, әбекәй тағы шул һорауын ҡабатлаған. Студент түҙемле генә икән (оло кешегә ҡаршы ни әйтһен инде), "Юҡ, мин ҡытай түгелмен," тип яуап биргән. Тағы ла бер туҡталыш үткәндәр. Әбекәй тағы ла шул уҡ һорауын ҡабатлаған. Студенттың түҙемлеге бөтөпмө, әбекәй тынысланһын типме: "Эйе, мин ҡытай,"- тигән. Шул саҡ әбекәй: "Булмаҫ, йөҙөңә ҡарағанда негрға оҡшағанһың бит," - тип аптыраған...

Үҙәктәгеләр, милләттәрҙе исеме менән атамай, барыһын да Рәсәй халҡы тип үҙгәртергә маташа, ә халыҡтарҙың йөҙҙәрен, тышҡы төрлөлөктә, ҡан хәтеренә һеңгән йәшәү рәүешен, рухын үҙгәртә алырҙармы икән? Ай-һай, Хоҙай Тәғәлә юл ҡуймаҫ быға.

Иҫемдә, студент саҡтарҙа имтихандарҙы тапшырып бөткәс, беҙ, ҡыҙҙар, китаптарҙы ситкә ҡуйып, бүлмәбеҙҙе йыйыштырып алғас, күмәкләшеп ултырышабыҙ ҙа, ҡул эштәренә тотонабыҙ. Берәй әһәмиәтһеҙ генә шөғөл менән шөғөлләнге килә бит. Беребеҙ ойоҡбашына ямау һала, икенсебеҙ күлдәгенең һүтелгән урынын тегеп маташа. Бына закон сығарыусыларҙы ла шул саҡтағы үҙебеҙгә оҡшатып ҡуям: улар ҙа әһәмиәтле, кәрәк эштәрҙе ситкә ҡуйып, эш башҡарған һымаҡ күренергә тырышалар, төрлө юҡ-бар хәбәр йыйып, шуны Дәүләт Думаһы трибунаһынан башҡаларға еткерәләр. Сәйәси "ямау" менән булалар, ҡыҫҡаһы. Төрлө сәйер закондар уйлап сығарып, халыҡты шаҡ ҡатыралар. Әлеге Концепция проекты ла шул "ямау" һымағыраҡ килеп сыға инде...

**Журналист-аналитик Таһир Ишкинин үҙенең бер мәҡәләһендә "Һәр эшмәкәрлектең үҙ режиссеры барҙыр", тип яҙғайны. Барҙыр, тик беҙ уларҙы белеп бөтмәйбеҙ. Ә бына уларҙың үҙҙәре ултырған ботаҡҡа балта сабыуын белеп-күреп торабыҙ. Хәйер, ул ботаҡта ултырмаған режиссерҙар ҙа күмәктер. Ситтән тороп, ҙур аҡсалар түгеп идара итеүселәр ҙә күбәйеп китте бит...**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов "2010 йылда Башҡортостан Республикаһында һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереү мәсьәләләре буйынса республика советының күсмә ултырышын үткәреү тураһында"ғы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, күсмә кәңәшмә 2010 йылдың сентябрендә Өфө ҡала округында үтәсәк.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Мәскәүҙә үткән Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советы ултырышында ҡатнашты. РФ Президенты Дмитрий Медведев рәйеслегендә үткән ултырышта илдә йәштәр сәйәсәтен тормошҡа ашырыу мәсьәләләре ҡаралды. Мортаза Ғөбәйҙулла улы шулай уҡ көрсөк шарттарында Волга буйы федераль округы субъекттарының социаль-иҡтисади хәле мәсьәләләренә арналған кәңәшмәлә лә ҡатнашты. Ул Алабуғала үтте.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарары менән Эдуард Викторович Юлдашев БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы итеп тәғәйенләнде. Шулай уҡ "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында ла яңы етәксе - уның генераль директоры итеп Юнир Аҙнабаев тәғәйенләнде.

✓ РФ Төбәктәр үҫеше министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, көрсөк һөҙөмтәһендә 83 субъекттың 52-һендә граждандарҙың килеменең түбәнәйеүе, ваҡлап һатыуҙың һәм физик шәхестәр килеменә һалымдарҙың кәмеүе билдәләнә. Ә бына ил буйынса дөйөм алғанда 31 төбәктә аҡсалата килем артҡан. Ул иҫәпкә Башҡортостан да инә - үҫеш 6,6 процент тәшкил итә.

✓ Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы менән Яҙыусылар союзы иң яҡшы драма әҫәрҙәренә конкурс ойоштора. Ижади бәйгенең маҡсаты - талантлы сәхнә әҫәрҙәре тыуҙырыуға булышлыҡ итеү, йәштәрҙе драматургия өлкәһендәге профессиональ, ижади эшмәкәрлеккә йәлеп итеү. Ижади бәйгегә эштәр 1 октябргә тиклем ҡабул ителә. Иң яҡшы әҫәрҙәр "Ирекле темаға пьеса" һәм "Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн пьеса" номинацияларында билдәләнәсәк.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# ЯЛ ИТЕРГӘ... ЯРАМАЙ!

## Йәки ни өсөн Геннадий Онищенко сит ил курорттарын яратмай?

**Ғәжәп, йәмәғәт! Йәй уртаһы, ҡояш ҡыҙҙырыпмы ҡыҙҙыра. Ә ял итергә ярамай. Ни өсөн тиһегеҙме? Ҡушмайҙар, сөнки. Тыялар. Теләһә кем, тегеләй-былай үткенсе әҙәмдәр түгел, йәмәғәт, абруйлы ил ағаһы. Ваҡытында Корней Чуковскийҙы яҙған ине бит әле, "Йөрөмәгеҙ, балалар, Африкаға, бармағыҙ!" тип. Был юлы ла тап шулай. Тик Чуковский урынына беҙҙе Онищенко тигән ағайыбыҙ ҡурҡыта. Эйе, эйе. Рәсәйҙең баш санитар врачы. Роспотребнадзор тигән идаралыҡтың етәксеһе.**



Бөтөнләй үк ял итмәгеҙ, тимәй былай. Шулай ҙа ситкә йөрөргә тәҡдим итмәй. Тыя хатта. Ситкә тиеүем, "һулаҡай"ға түгел. Сит илдәргә. Рәсәй сигенән ары ятҡан дәүләттәргә, тимәк.

Ғөмүмән, ял тураһында, айырыуса рәсәйлеләрҙең йәйге ялы хаҡында, айырым әйтеп үтергә кәрәктер. Беҙҙең халыҡ ял итә белә ул. Юҡ, мин ҡыуаҡ аҫтында шешә имеп ял итеүҙе әйтмәйем. Путевка алып, алдан әҙерләнеп, сумаҙандар тултырып самолетҡа ултырып, зәңгәр диңгеҙ яры буйына осоу, алтындай һары ҡомда ҡыҙыныу, кистәрен дискотекала "ҡыҙҙырыу" - бына ул ысын ял билдәләре. Бигерәк тә, һуңғы ун-ун ике йыл эсендә буйтым ял итергә өйрәнеп барабыҙ. Төркиә курорттарымы, Египет пирамидаларымы, Гоа утрауымы, Таиланд һәм Хорватия, Испания һәм Греция, Италия, Черногория - Рәсәй халҡы бармаған, йөрөмәгән, ял итмәгән ерҙәр, һыу инмәгән диңгеҙ-океандар Ер шарында йылдан-йыл кәмей бара. Урыҫ телен хәҙер Төркиәнең Адриатик диңгеҙ яры буйында белмәгән кеше ҡалмаған, имеш. Йыл һайын яңынан-яңы курорттар асыла. Рәсәй халҡы өсөн яңынан-яңы тамашалар, күңел асыу урындары ойошторола ғына. Египет менән дә шул уҡ хәл. Кемдер берәү шундай үҙенсәлекле тикшереү үткәргән, йәнәһе, хәҙер өс рәсәйленең икеһендә фирғәүен пирамидалары фонында төшкән фото бар. Ысынмы был, әллә бушмы - әммә һуңғы йылдарҙа беҙҙең илдә, ысынлап та, ял итергә сит илдәргә сыҡмағандар һаны әҙәйгәндән-әҙәйә генә.

Үҙ илебеҙҙә ял итер урындар ҙа ҡалманымы икән әллә, тип һорарһығыҙ, йәмәғәт. Ә данлыҡлы Сочи, Ҡара диңгеҙ яры, көнө-төнө рекламаланған Краснодар крайы курорттары? Улар ҡайҙа булған икән? Әлбиттә, улар үҙ урынында. Әммә Рәсәй халҡының унда ял итергә бер ҙә теләге юҡ. Бында Советтар Союзы осоронда тиҫтәләгән йылдар буйына сит илдәргә сығыу мөмкинлегенән мәхрүм булған халыҡтың үҙенсәлекле менталитеты, тиҫтәләгән йылдар буйына "тимер шаршау" артында йәшәп арыған кешеләрҙең донъя күреү теләге, йәки урыҫ халҡының тәбиғәте менән сәйәхәтсе (ул һүҙҙең "мөстән", йәки "һәптән" тигән синонимдары ла бар) булыуы тураһында күп һүҙ сурытырға мөмкин булыр ине. Асылда иһә, Рәсәй халҡы сит илдәрҙәге сервисҡа ("һеҙҙең аҡсаға бөтәһе лә һеҙҙең өсөн" тип атала ул) һушы китә. Беҙҙең курорттарҙа ундайҙың еҫе лә, эҙе лә юҡ. Беҙҙә әле һаман булһа ла "совок" хөкөм һөрә. Һуңғы ун һигеҙ йыл эсендә хеҙмәтләндереү өлкәһендә эшләүселәр араһынан һатыусылар ғына ҡулланыусыға әҙерәк мөләйем ҡарарға, йылмайырға өйрәнде. Ә башҡалар - һаман юҡ.

Шуға ла Рәсәй халҡы Сочиға ҡарағанда Анталъяны яҡын күрә. Икенсе яҡтан, (нисек улай килеп сығалыр инде), диңгеҙ аръяғындағы Төркиәлә, йәки Египетта ял итеү беҙҙең курорттар менән сағыштырғанда арзанераҡ килеп сыға. Әллә беҙҙекеләр ҡомһоҙ, әллә тегеләр, оҫта капиталистар, аҡсаһыҙ Рәсәй халҡына хаҡтарҙы махсус рәүештә түбәнерәк ҡуя. Беҙҙә ымһындырыр өсөн. Рәсәй ял итеү даирәһен юҡҡа сығарыу өсөн. Конкуренттарҙы бөлдөрөү өсөн. Кем белә уларҙы...

Борсолорға ярамай, йәмәғәт. Был мәсьәләне, теләһә кем түгел, Геннадий Онищенко үҙ ҡулына алды. Тимәк, Рәсәй курорттарының киләсәге ышаныслы. Тиҙҙән, бик тиҙҙән, беҙҙең халыҡ сит илдәргә сығыуҙан баш тартасаҡ. Үҙе теләп. Ышанмайһығыҙмы? Тыңлағыҙ әле. Үткән аҙнала ғына илебеҙҙең баш санитар врачы рәсәйлеләрҙе сит ил курорттарында ял итмәҫкә саҡырҙы. Ғөмүмән, сығып йөрөмәгеҙ унда, тине ул. Баҡтиһәң, беҙҙең халыҡ өсөн сит илдәрҙә махсус вирустар "әҙерләп" ҡуйғандар, имеш. Беҙҙекеләр Испанияғамы шунда, йәки Төркиәгәме барһа, мотлаҡ рәүештә берәй сир эләктереп ҡайта ла ҡуя, имеш. Мәсәлән, "суска киҙеүе".

Әйткәндәй, беләһегеҙме әле, был сир хәҙер Рәсәйҙә лә бар икән. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса бөтәһе 9 кеше ауырый, шуларҙың дүртәүһе - Мәскәүҙән. Улар барыһы ла сит илдәрҙә ял итеүселәр. Шулай булғас, ни эшләргә кәрәк? Дөрөҫ. Заразаға кәртә ҡуйырға. Элегерәк, Совет заманында сик буйын йоҙаҡҡа ябырҙар ҙа ҡуйырҙар ине. Онищенконың быға көсө етмәй. Шуға ла ул Рәсәй халҡын иҫкәртеп (хатта ҡурҡытып) булһа ла ҡуйырға әҙер. Ғөмүмән, һуңғы арала Геннадий Онищенко үҙ урынын дөрөҫ биләмәй, тигән фекергә киләнә. Уға кәмендә сит илдәр министры булырға кәрәк ине. Ул бит сит илдәр менән мөнәсәбәттәрҙе... көйләүгә түгел, ә боҙоуға һиҙелерлек өлөш индергән етәксе. Грузия араларҙы боҙа башлағайны, Онищенко шунда уҡ грузин шараптарын һәм Кавказ минерал һыуҙарын бысраҡ һәм ағыулы, тип иғлан итте. Һәм уларҙы Рәсәйгә индереүҙән тыйып та ҡуйҙы. Һәм дөрөҫ эшләне. Грузиндарҙы әйтәм, быға тиклем етмеш йыл буйына миллионлаған совет кешеһен "Боржоми" һәм "Хванчкара" менән ағыулауҙары етмәгән, хәҙер ирекле Рәсәй халҡының һаулығын ҡаҡшатырға маташа. Молдова менән һүҙгә килешкәйнек, Онищенконың иғланы менән молдован шараптары эсергә, ә елек-емештәре ашарға яраҡһыҙ булып сыҡты. Ә Белоруссия һөтө? Улар бит һөт урынына беҙҙең стандарттарға бөтөнләй тап килмәгән шыйыҡса оҙатып торғандар. Ҡуйылығы артығыраҡ булғанмы шул, әллә, киреһенсә, ҡаймағы шыйығыраҡмы - уныһы аныҡ ҡына билдәле түгел. Әммә барыбер Белоруссия һыйырҙары нисектер мухлеват иткән ине. Онищенко әфәнде булмаһа, уны кем асыҡлай ҙа, кем белә, ә?

Аҙыҡ-түлек менән бөтәһе лә аңлашыла - Геннадий Онищенко бары тик Рәсәй халҡының һаулығын ҡайғыртҡан ғына булып сыға. Ысынлап та, бәлки ул шараптарҙа йәки ҡаймаҡтарҙа ниндәйҙер зарарлы матдәләр барҙыр? Улай тиһәң, бөгөн зарарлы матдәләрҙең булмаған урыны юҡ. Рәсәй территорияһында етештерелгән теләһә ниндәй ризыҡты алып, ҡабындағы йәки һауытындағы мәғлүмәттәрҙе йыбанмай ғына уҡып сыҡһағыҙ, Е-фәлән, Е-төгән тигән ҡушымталарҙы бихисап табырһығыҙ. Уларҙың ҡайһы берәһе кеше организмында туплана, яман шеш тыуҙыра, тип тә һөйләйҙәр. Икенселәре иһә Көнбайыш Европа дәүләттәрендә бөтөнләй тыйылған икән. Әммә Геннадий Онищенконы был артыҡ борсомай. Һәм был дөрөҫ. Ниндәйҙер кәнфит етештергән айырым предприятие менән көрәшеүе ҡыҙыҡ түгел дәһә. Ә бында тотош дәүләт. Уның үҙ армияһы, ҡоралы, гимны, гербы, флагы һәм президенты бар. Тик бер санитар врач ҡына ла уны бер генә һүҙ менән теҙләндерергә, иҡтисадын ҡаҡшатырға һәләтле.

Иҡтисад тигәндәй, Геннадий Онищенко асылда бик яҡшы эш эшләй. Уның сит ил курорттарында ял итергә ярамай, унда вирустар, төрлө ҡурҡыныс сирҙәр тигән һүҙен ысынға алғандар һәҙөмтәлә ял итергә тәғәйен аҡсаларын Рәсәйҙә ҡалдырасаҡ бит. Был иһә ахыр сиктә илебеҙҙең көс-ҡеүәтен арттырыуға, иҡтисадтың шәбәйеүенә килтерәсәк. Бөтә донъя иҡтисади көрсөк осоронда аҡсаның сит илдәргә сығыуы менән көрәшкән ваҡытта теләһә ниндәй ысулдар ҙа яҡшы, йәмәғәт. Бер ваҡыт бит шулайтып суд приставтары хеҙмәте алимент түләү буйынса бурыстары булғандарҙы ситкә сығармай башлағайны түгелме? Хәҙер иһә ял итеүселәр өсөн сиктәрҙе ябып ҡуйырға мөмкин. Бөтә ил бер төптән булып, көрсөк менән көрәшкәндә, сит илдәрҙә һәптәнләп йөрөүгә сик ҡуйырға кәрәк, тигән лозунгы менән дә сығыш яһарға мөмкин. Тик эште икенсе яҡтан башлап булмаҫ микән? Мәсәлән, Куршевелдә ял итеүсе олигархтар һәм юғары кимәлдәге чиновниктарҙан? Йәки, күптән инде бер нисә дәүләт гражданлығына эйә булып өлгөргәндәрҙе? Геннадий Онищенкоға, мәсәлән, Рәсәй халҡының милли ризығы булған билмәндәрҙе тикшерергә тәҡдим итер инем. Һис юғында, халыҡ өсөн файҙаһы күберәк булыр ине.

Таһир ИШКИНИН.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә 2010 йылға йыртма календарь донъя күрҙе. 25-се юбилей баҫмаһы ил кимәлендә билдәләнәсәк оло байрамға - Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына бағышлана.

✔Күгәрсен районында 3 йәштән 15 йәшкә тиклемге балалар араһында башҡорт бейеүен башҡарыусыларҙың "Байыҡ" республика телевизион конкурсы үтте. Башҡортостандың төрлө райондарынан, шулай уҡ Ырымбур өлкәһенән дә килгән 123 йәш бейеүсе БР Президенты бүләге өсөн көс һынашты. Бейеү байрамының Гала-концертында БР Премьер-министры Раил Сарбаев ҡатнашыуы байрамға мәртәбә өҫтәне. Конкурстың гран-прийын Күгәрсен районынан Азалия Ризуанова менән Баймаҡ районынан Рәфис Иҙрисов бүлеште.

✔РФ Президенты Дмитрий Медведевтың Мәскәүҙә мөфтөйҙәр менән осрашыуында дәүләт-дини мөнәсәбәттәре мәсьәләләре тикшерелде. Осрашыуҙа мосолман ойошмаһы етәкселәре - Рәсәй мөфтөйҙәр советы рәйесе Рауил Ғәйнетдин, Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе, юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдин һәм Төньяҡ Кавказ мосолмандарының координацион үҙәге рәйесе Исмаил Бердиев, БР мосолмандарының Диниә назараты етәксеһе мөфтөй Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин ҡатнашты.

✔Быйыл ярты йыллыҡта республикала 40026 енәйәт теркәлгән. Был был тырғы ошо осор менән сағыштырғанда 3,1 процентҡа аҙыраҡ. Енәйәттәрҙе фашлау буйынса ла ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелә - хоҡуҡ һаҡлау органдары тарафынан республикала алты айҙа 27,5 мең енәйәт асылған, шуларҙың ете меңдән ашыуы ауыр һәм үтә ауыр енәйәттәр иҫәбенә инә. Быйыл алты айҙа республика юлдарында 1956 юлтранспорт ваҡиғаһы теркәлгән. Уларҙа 216 кеше һәләк булған, 2393 кеше төрлө дәрәжәләге тән йәрәхәттәре алған.

✔Башҡортостанда быйыл йыл башынан халыҡтың тәбиғи кәмеүе өс тапҡырға тиерлек ҡыҫҡарған. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда үлеүселәр һаны 6,3 тапҡырға кәмегән, тыуыусылар һаны 0,8 процентҡа артҡан. Шулай уҡ йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, бәхетһеҙлек осраҡтары һәм тын алыу юлдары ауырыуҙары арҡаһында үлеүселәр ҙә кәмегән.

✓ Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылында социаль-мәҙәни үҙәк төҙөлә, унда 80 урынлыҡ мәктәп, 20 урынлыҡ балалар баҡсаһы, 100 урынлыҡ клуб, медпункт һәм почта бүлексәһе урынлашасаҡ.



БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫ...

## август кәңәшмәһенән юл ала

**2009 йылдың 7 августында Хәйбулла, Йылайыр һәм Баймаҡ районларында мәғариф буйынса республика кәңәшмәһе үтә.**

Быйылғы форум "Республиканың инновацион үҫешенең мөһим шарты булараҡ мәғариф системаһының яңы моделен булдырыу" девизы аҫтында үтәсәк. Унда БР Президенты Хакимиәтенән, Хөкүмәт аппаратынан вәкилдәр, министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәре, район һәм ҡала хакимиәте башлыҡтары, уларҙың урынбаҫарҙары, мәғариф идаралығы, һөнәри белем биреү учреждениелары етәкселәре, киң мәғлүмәт саралары журналистары ҡатнаша.

Әле август кәңәшмәһе үтәсәк районларҙа 6 мәғариф объекты сафҡа индерелә һәм реконструкциялана: Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылында социаль-мәҙәни үҙәк төҙөлә, унда 80 урынлыҡ мәктәп, 20 урынлыҡ балалар баҡсаһы, 100 урынлыҡ клуб, медпункт һәм почта бүлексәһе урынлашасаҡ; Урғаҙа ауылында Баймаҡ ауыл хужалығы техникумы реконструкциялана; Йылайыр районының Йомағужа ауылында мәктәп һәм балалар баҡсаһы; Ш.Бабич исемендәге Башҡорт гимназияһында 56 урынлыҡ интернат; Хәйбулла районының Бүребай ауылында 550 урынлыҡ урта мәктәп; Йәнтеш ауылында балалар баҡсаһы һәм мәктәп төҙөлә. Кәңәшмәнең тәүге өлөшөндә сарала ҡатнашыусылар ошо объекттар менән танышасаҡ. Педсоветтың икенсе өлөшө Баймаҡ районының Урғаҙа ауылында була. Унда мәғариф өлкәһенең актуаль мәсьәләләре буйынса һөйләшеү, үткән уҡыу йылына йомғаҡ яһау һәм яңы пландар билдәләү ҡаралған.

Яңы уҡыу йылында республиканың мәғариф системаһына ябай булмаған үтә мөһим мәсьәләләрҙе хәл итергә тура киләсәк. Улар яңы финанс-иҡтисади механизмдарын индереүҙе дауам итеү, белем биреү учреждениелары селтәрен оптималләштереү, уларҙың ҡайһы берҙәренең эшмәкәрлеген автономлы режимға күсереү менән бәйле. Август кәңәшмәһендә ошолар хаҡында, шулай уҡ "Беҙҙең яңы мәктәп" милли мәғариф инициативаһы проектын тормошҡа ашырыу перспективалары, яңы быуын дөйөм белем биреү федераль дәүләт стандарттары, милли мәғариф һәм тәрбиә мәсьәләләре, белем биреү кимәлен модернизациялау буйынса һөйләшеүҙәр күҙ уңында тотола.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ






# АНКАРА-ӨФӨ ДУҪЛЫҒЫ,

## йәки төрөк ерендәге осрашыуҙар тураһында

**Төрөк Республикаһының баш ҡалаһы Анкараның туғандаш ҡырҡ ҡалаһы араһында Өфө лә бар. Был дуҫлыҡ 1997 йылдан алып дауам итә, тап ошо ваҡытта Анкара һәм Өфө араһында сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник һәм мәҙәни эшмәкәрлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыла. Быйыл ике мегаполис араһындағы бәйләнеш үҫешенә яңы ыңғай импульс бирелде, йәғни июль айында Анкара ҡалаһының Икенсе Халыҡ-ара фестивалендә Өфө делегацияһы ла ҡатнашты. Ошо сәйәхәт тураһында делегация етәксеһе, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Биктимер улы БАЯЗИТОВ һөйләй:**

- Фестиваль бер аҙна буйы барҙы. Анкараның элекке ипподромы аренаһында Анкараның төрлө департаменттары, клубтары, ассоциациялары һәм ойошмаларының күргәҙмәләре һәм экспозициялары, сауҙа рәттәре, кафелар, бистролар һәм бер нисә сәхнә урынлаштырылғайны. Делегациялар өсөн айырым бүленгән тент-палаткала Сирия, Тажикстан, Украина, Куба һәм башҡа илдәр делегацияларының экспозициялары урын алды.

Өфөнөң күргәҙмәһе баш ҡала һәм республика күреҫтәре төшөрөлгән фотоларҙан, Башҡортостан халыҡтары телдәрендәге әҙәбиәттән, төрлө буклеттарҙан, проспекттарҙан, сувенир продукцияһынан һәм халыҡ кәсептәре өлгөләренән торҙо. Күргәҙмәләр фестиваль тамамланғансы дауам итте. Шуны билдәләп китергә кәрәк: Өфө экспозицияһы янынан кеше өҙөлмәне. Төрөк Республикаһы баш ҡалаһы мэры Мелих Гюкчек та беҙҙең күргәҙмә менән танышты. Ул Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаевтың хатын, беҙҙең иҫтәлекле бүләктәрҙе ҙур теләк менән ҡабул итте, башҡорт милли кейемен шунда уҡ кейеп тә ҡараны. Анкара башлығы менән әңгәмә ваҡытында ике ҡала араһында бәйләнеште киңәйтеү һәм 2010 йылдың мартында Анкарала - Өфө көндәре, ә 2011 йылда Өфөлә Анкара көндәре үткәреү тураһында тәҡдим булды. Гюкчек был идеяны хупланы һәм Өфө ҡала хакимиәте башлығы П. Качкаевты делегация етәксеһе итеп күрергә теләүен белдергән саҡырыу хаты ебәрҙе.

Өфө артистарының сығышы ла тамашасы күңеленә хуш килде. "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле бейеүселәре, йырсы Венера Юлгилдина һәм ҡурайсы Тимур Юлгилдин гала-концертта ла сығыш яһаны.

Рәсми делегацияның эш программаһы ла бай эстәлекле булды. Ул төрлө эшлекле осрашыуҙарҙан, Анкара ҡалаһының муниципаль органдары эше тәжрибәһе менән танышыуҙан торҙо. Тәжрибә уртаҡлашыу һәм мәғлүмәт алышыу маҡсатында Анкара провинцияһының Милли мәғариф департаменты етәксеһе менән дә осраштыҡ. Ул Башҡортостандың баш ҡалаһы менән яҡынданыраҡ танышыу өсөн Өфөгә килергә теләк белдерҙе. Осрашыуҙар барышында ТЮРКСОЙ директоры Дюсен Касейнов беҙҙең республика үҫешенә һәм уның етәкселәренең эшенә ыңғай баһа бирҙе, яңы берҙәм проекттар тураһында фекер алышыу булды. Делегация Мостафа Кемаль Ататөрк мавзолейы һәм музейын ҡараны, "Дикмен далаһы" ҡала проекты менән танышты. Был проект буйынса иҫке йорттарҙы һүтеп, ул урында яһалма күле булған эре парк төҙөләсәк, тимәк, ҡала кешеләренә ҡала эсендә генә ял итеү мөмкинлеге тыуасаҡ. Синджан районы етәксеһе менән осраштыҡ, был районды ял паркында булдыҡ. Бында ла яһалма күл булдырылған, мангалдары булған йөҙләгән беседкалар төҙөлгән. Һәр кис һәм ял көндәре һайын ҡала кешеләре был беседкаларҙы пикниктар үткәреү өсөн бушлай ҡуллана. Дүрт ҡатлы ял үҙәген дә күрҙек, унда ҡала халҡы аҡса түләмәй генә төрлө курстарҙа (инструменттарҙа уйнау, һүрәт төшөрөү, инглиз теле курсы), тренажер залдарында шөғөлләнә, мини-гольф, өҫтәл теннисы, бильярд уйнай ала.

Анкараның Гельбаши районы хакимиәте башлығы ла Өфөнөң берәй районы менән хеҙмәттәшлек итергә теләк белдерҙе, уларға партнер итеп Октябрь районы тәҡдим ителде. Кечиорен районы ла ыңғай тәьҫирҙәр тыуҙырҙы, бигерәк тә парктарҙағы яһалма шарлауыҡтар, Төркиә тарихы һәм мәҙәниәте музейы урынлашасаҡ ҡәлғә моделе оҡшаны.

**Шулай итеп...**

**Өфө һәм Анкара ҡалалары араһындағы хеҙмәттәшлек киңәйә һәм яңы кимәлгә сыға. Был фестивалдә ҡатнашыу артабан да Башҡортостан һәм Төрөк Республикаһы араһындағы ғына түгел, дөйөм алғанда, рәсәй-төрөк бәйләнештәре үҫешенә ыңғай йоғонто яһауына иманыбыҙ камил.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Мәскәү ЦСКА командаһы һаҡсыһы Максим Кондратьев хәҙер "Салауат Юлаев" хоккей командаһында уйнаясаҡ, ул ошо көндәрҙә команда менән ике йылға контракт төҙөнө.

✓1 августан пенсияны яңынан иҫәпләү ябайлаштырыласаҡ. РФ Президенты "РФ хеҙмәт пенсиялары тураһында"ғы Федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы законға ҡул ҡуйҙы. Уның буйынса, эшләп йөрөүсе кешеләрҙең пенсияларының страховка өлөшөн яңынан иҫәпләү хәҙер элекке кеүек пенсионерҙың ғаризаһы менән түгел, ә үҙаллы башҡарыласаҡ.

✓Өфөнөң халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәге үткәргән һуңғы йәрминкәлә ун туғыҙ эш биреүсе предприятие ҡатнашҡан, уларға эш һорап биш йөҙҙән ашыу кеше мөрәжәғәт иткән. "Виртуал" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте, "Ҡояшлы ҡом" дауалау-һауыҡтырыу комплексы, "МТС" компанияһы күпләп хеҙмәткәрҙәр йыйған.

✓Быйыл ауыл хужалығы йәрминкәләре Өфөлә 29 августа "Юбилейный" мәҙәниәт һарайы майҙанындағы бал йәрминкәһенән башланасаҡ. Бынан тыш, "Ауыл хужалығы йәрминкәһе", "Заречный", "Сипайловский" баҙарҙарында, Гагарин исемендәге сауҙа комплексында даими эшләүсе йәрминкәләрҙә лә ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәр һатыу итә ала.

✓Ҡала яны поездарында билетһыҙ йөрөүселәрҙе асыҡлау буйынса айлыҡ бара. Пассажирҙарҙың билеттарын тикшереүсе махсус бригадалар һаны арттырылды, был эш менән көн дә 100-ләп тикшереүсе шөғөлләнә. Хәҙер ҡайһы бер электричкаларға перронда уҡ кешеләрҙең билеттарын тикшереп ултырталар.

✓БР мосолмандары диниә назаратының Мәрйәм Солтанова исемендәге мәҙрәсәһе урта белеме булған малайҙарҙы уҡырға саҡыра. Дүрт йыллыҡ уҡыуҙарҙа студенттар мосолман фәндәренән башҡа информатиканы, башҡа гуманитар йүнәлештәге фәндәрҙе өйрәнәсәк. Документтар 30 августҡа ҡәҙәре ҡабул ителәсәк. Студенттар ятаҡ менән тәьмин ителә. Мәҙрәсәнең адресы: Өфө ҡалаһы, Мостай Кәрим урамы, 3. (3472) 72-1987, 72-38-58 телефондары буйынса белешмә алырға мөмкин.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

**Процентһыҙ кредит алыу мөмкинме? Шәриғәт ҡанундары буйынса эшләгән банкыларға мөрәжәғәт итһәң, әлбиттә, мөмкин. Әлегә бындай банкылар Рәсәйҙә юҡ, әммә Ислам банкылары яңы күренеш түгел. Башҡортостан Республикаһының Милли банк бүлгестәре журналистар менән ошо темаға ҡоролған ликбез үткәрҙе.**

# ШӘРИҒӘТ ҠАНУНЛЫ БАНКЫЛАР...

## Рәсәйҙә лә кәрәк

Шулай итеп, тәүге Ислам банкыһы 1975 йылда Берләштерелгән Ғәрәп Әмирлегенең баш ҡалаһы Дубайҙа хөкүмәттәр араһындағы кредит ойошмаһы сифатында барлыҡҡа килә. Бөгөн донъяла дөйөм капиталы 700 миллиард долларҙан ашҡан 300-ҙән ашыу ошондай банк иҫәпләнә. Уның ҡатнашыусылары күберәк Африка һәм Азия илдәре - барлығы 56 дәүләт. Бындай ҡоролошло банкының барлыҡҡа килеүенә нимә булышлыҡ итә һуң? Барыһынан да элек, мосолмандарҙың һәр нәмәлә лә Ислам ҡанундарын күҙәтергә тырышыуы, әлбиттә. Бөтә эш шунда: традицион банкыларҙың кредит биреү системаһы ашығыс башҡарыу, түләү һәм кире ҡайтарыу кеүек төп принциптарға ҡоролған - был шәриғәт ҡанунына ҡаршы килә. Ҡөрьән риба алыуҙы, йәғни процентҡа аҡса биреүҙе, шулай уҡ аҡса алып торған өсөн түләүҙе хәрәм ғәмәл булараҡ тыя. Кеше үҙе туплаған байлығының һәм тәбиғи ресурстарҙың хужаһы була алмай. Донъялағы бөтә нәмә лә бары тик Аллаһтыҡы, тип әйтә Ҡөрьән. Кеше был нигмәттәр менән идара итеүсе Аллаһтың ышаныслы ҡоло ғына булып тора һәм ул был байлыҡтарҙы файҙаға тотонорға, тәләфләмәҫкә, исрафламаҫҡа, емермәҫкә һәм уларҙы хазинаға әйләндермәҫкә тейеш.

Ғәҙәти кредит биреү моделенән айырмалы рәүештә, ссуда процентынан баш тартыу - Ислам банкыһының төп, әммә берҙән-бер айырмаһы түгел. Шулай уҡ мосолман банкыһында ҡомарлы уйын бизнесына, алкоголь эсемлектәр һәм тәмәке продукцияһы етештереүселәргә ярҙам күрһәтелмәй. Ауыл хужалығы (сусҡа итен етештереүҙән тыш), сәнәғәт, төҙөлөш, транспорт, социаль инфраструктура, фән - Ислам банкыһы өҫтөнлөк биргән эшмәкәрлек өлкәләре булып тора ла инде. Ислам банкыһына һаҡлыҡҡа аҡса һалыусылар аҡсаларының Ҡөрьән талаптарына ярашлы ҡулланылыуына тулыһынса ышана ала. Ссуда проценты алынмаһа, һәр килешеү инвестиция булараҡ төҙәлә һәм банк аҡса алып тороусы килем ала башлаһа ғына, унан үҙ өлөшөн ала. Шулай итеп, банкының һәм аҡса һалыусыларҙың килем аласағына башта гарантия бирелмәй, ул бизнестың һөҙөмтәле эшмәкәрлеге нигеҙендә барлыҡҡа килә.

Төрлө иҫәпләүҙәр буйынса, 25 миллион мосолман йәшәгән Рәсәйҙә Ислам банкыһы булырмы? Был һорау быйыл Мәскәүҙә сентябрь айында үтәсәк "Ислам конференцияһы" ойошмаһының барлыҡҡа килеүенә 40 йыл тулыуға арналған "Рәсәй һәм ислам донъяһы: хеҙмәттәшлек һәм перспективалар" халыҡ-ара конференцияһында бүтән һорауҙар менән бер рәттән ҡаралаcаҡ. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, Рәсәйҙә 15 йыл дауамында "Бадр-Форте" Ислам банкыһы эшләп килә, әммә 2006 йылдың декабрендә ҡайһы бер аңлайышһыҙ сәбәптәр арҡаһында уның лицензияһы тартып алына.

Рәсәйҙә Ислам банкыһының асылыуына, ысынлап та, ҡаршы тороусылар аҙ түгел. БР-ҙың Милли банкыһының бүлек начальнигы урынбаҫары Шәүкәт Даукаев һүҙҙәренсә, Ислам банкыһында рейдер алымы элементтары бар, тигән фекер йөрөй. Ҡайһы бер белгестәр әйтеүенсә, Ҡөрьәндә тыйылған ссуда проценты бындай банкыларҙа ысынында иһә бар, тик ул оҫта йәшерелгән. Шулай уҡ ғәҙәти банкыларға ҡарағанда Ислам финанс тауарҙары күпкә ҡатмарлы, сөнки бөтә операциялар ҙа дини ҡанундарға ярашлы булырға тейеш, етмәһә, традицион банкылар ҙур мөмкинлектәр бирә.

Шәриғәт буйынса кредит биреү яҡлылар иһә, бындай банк хәүефһеҙерәк, Ислам банкыһы эшмәкәрлеге ышаныслыраҡ, сөнки һәр килешеү артында матди әйбер - торлаҡ, завод һ.б. тора, тип раҫлай. Улар бындай банк хеҙмәте бүтән дин кешеләре тарафынан да ҙур һорау менән ҡулланыласаҡ, сөнки риба алыуға күп диндәрҙә кире ҡараш йәшәй, тигән ышаныс белдерә. Шуныһы ҡыҙыҡ, йәһүдтәрҙең изге китабы Тәүратта был турала яҙылған, ә йәһүдтәр араһында риба алыу киң таралыу алған. Улар араһында ломбард тотоусылар бик күп.

Шул уҡ ваҡытта яҡынса 16 миллион мосолман йәшәгән Франция, Германия, Великобритания, Евросоюз илдәрендә Ислам банкылары уңышлы эшләп килә. Лондонда 2004 йылда тәүге тапҡыр тулыһынса шәриғәт ҡанундары буйынса эшләгән Британияның Ислам банкыһы асылды. 2006 йылда бындай банк Швейцарияла асыла. БДБ илдәрендә - Ҡаҙағстанда, Әзербайжанда, Ҡырғыҙстанда шәриғәт буйынса эшләгән банкылар бар.

Әлфиә ШӘРӘФЕТДИНОВА.
"БАШвестЪ".




ӘЙТӘГҮР!

# ТАРИХҠА ЛА... МЕДИЦИНАҒА ЛА БИТАРАФ ТҮГЕЛДӘР

**Йәй миҙгеле кем өсөндөр ял итеү осоро булһа, мәктәпте тамамлаусыларға ул иң мәшәҡәтле эш ваҡыты. Әммә быйыл абитуриенттарға юғары уҡыу йортона инеү өсөн баш ҡалабыҙға килеп йөрөү ҙә кәрәкмәне тиерлек. Сөнки юғары уҡыу йорттарына уларҙы БДИ һөҙөмтәләре буйынса һайлап аласаҡтар. Хатта документтарҙы почта аша ебәреп, һөҙөмтәләрҙе өйҙә ятып ҡына көтөү мөмкинлеге лә бар хәҙер.**

Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Башҡорт дәүләт университеты абитуриенттарының тарих факультетын өҫтөн ҡуйыуы билдәле. Бында 363 кеше документ тапшырған. Шуларҙың 45-е генә бюджет нигеҙендә уҡыуын дауам итә аласаҡ. БДИ һөҙөмтәләре июль айы аҙағында ҡаралып, сағыштырылып, инеүселәр исемлеге билдәләнәсәк. Әлегә документтар ҡабул итеү бара. Ҡабул итеү комиссияһы ағзаһы Азалия Ҡотошова әйтеүенсә, ғаризалар былтырғыға ҡарағанда күберәк бирелгән һәм конкуренция ла көслөрәк буласаҡ.

Ә бына башҡорт филологияһы һәм журналистикаһы факультетына барлығы 211 ғариза бирелгән. Ҡабул итеү комиссияһы ағзаһы Альбина Ғәббәсова әйтеүенсә, уларҙың 30-ы документтарын журналистиканың башҡорт бүлегенә, 89-ы - рус бүлегенә, 6-һы татар бүлегенә тапшырған.

Башҡорт дәүләт медицина университеты, йылдағыса, абитуриенттарҙы үҙенә күпләп йыя. Ҡабул итеү комиссияһының яуаплы сәркәтибе урынбаҫары Урал Дәүләтшин биргән мәғлүмәттәр буйынса, бөгөнгө көндә өс факультетҡа иң күп ғариза бирелгән: дауалау факультетына - 1258 абитуриент (бюджет), түләүлегә - 101; педиатрия факультетына - 719 (бюджет), түләүлегә 46; стоматология факультетына - 396 (бюджет), түләүлегә 57 абитуриент документ тапшырған.

Абитуриенттарҙың үҙҙәренән дә күп нәмә тора хәҙер. Кемдәр юғары уҡыу йортона инергә алдан әҙерләнеп, маҡсаттар ҡуйып килгән, уларға еңелерәк. Быны һорауҙарыма яуап биргән ҡыҙҙар ҙа раҫланы:

**Миңзәлә АСҠАРОВА, Әбйәлил районы, БДУ абитуриенты:** Тарих факультетын һайлауымдың сәбәбе тарих менән ҡыҙыҡһыныуымда. Алдан уҡ БДИ тапшырып, документтарымды тулыһынса әҙерләп килдем. Тарих факультеты менән генә сикләнеп ҡалмай, тағы ла башҡорт филологияһы һәм журналистикаһы факультетына ла ғариза тапшырҙым. Унда БДИ һөҙөмтәләренән тыш, башҡорт теле буйынса инша яҙасаҡбыҙ. Ошо ике һөнәр ҙә оҡшай, киләсәгемде уларһыҙ күҙ алдыма килтерә алмайым. Быға тиклем гәзиттәргә яҙышып торҙом, "Йәншишмә" балалар һәм үҫмерҙәр гәзитенең йәш хәбәрсеһе, тарих, тел, мәҙәниәт буйынса олимпиадалар еңеүсеһе, инша һәм шиғыр конкурстары лауреаты булдым. 2005 йылда - район башлығы стипендиаты, ә 2007-2008 йылдарҙа Башҡортостан Президенты стипендиаты булыу бәхетенә ирештем. Яҡын киләсәктә лә уңыш йылмайыр, тырышлығым бушҡа китмәҫ, тип ышанам.

**Ләйсән ФАЗЛЫЕВА, Әлшәй районы, БДМУ абитуриенты:** Минең фармацевтика факультетына килеүемдә әсәйемдең дә, замандың да йоғонтоһо ҙур. Хәҙер һәр кем үҙ һаулығын үҙе ҡайғыртырға, һаулыҡты һаҡлау сараларын белеп һайларға бурыслы. Ә дарыуханаларҙағы дарыуҙар бихисап, уларҙың сифатлыларын һайлап алыу ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙыра. Ошоно уйлап, буласаҡ һөнәремде һайланым. Әгәр уҡырға инеп, уны тамамлай алһам, киләсәктә үҙ дарыуханамды асыр инем. Әлегә барыһы ла хыял, әммә уңышыма ышанысым ҙур.

Сәриә ҒАРИПОВА.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ҠЫРҠ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Ҡырҡ йәштән һуң тән күҙәнәктәренең һыу тотоу һәләте кәмей башлай һәм йыйырсыҡтар барлыҡҡа килә. Шуға гел йәш, матур булып ҡалыр өсөн шыйыҡсаны етерлек итеп (тәүлегенә тәндең һәр килограмына 35 грамм) эсегеҙ. Мәҫәлән, тәндең ауырлығы 65 килограмм булһа, көнөнә 2 литр 275 грамм, йәғни 13 стакан һыу эсергә кәрәк. Был шыйыҡса нормаһына төрлө аштарҙың һурпаһы, ҡара һәм башҡа төрлө сәйҙәр, компоттар, морстар, һөт эсемлектәре инә.

Һөйәктәр бирешмәһен өсөн төрлө үләндәр, кәбеҫтә, күберәк һөт аҙыҡтары, бигерәк тә эремсек ашарға кәрәк. Унда-ғы кальций яҡшы үҙләштерелһен өсөн саҡ ҡына йомортҡа һарыһы ашарға һәм саф һауала булырға кәрәк. Һәр иртә һоло бутҡаһы ашау файҙалы. Организмда йыйылып киткән артыҡ тоҙҙо ҡыуып торорға кәрәк. Бының өсөн айҙың ун көнө буйы йәки аҙнаһын өс көнө буйы тышынан таҙартылмаған һоло төнәтмәһен эсеп торорға кәңәш ителә. Быларҙан тыш, тиренең торошона ҡарап, бит, муйын тирәһенә аҙнаһына 2-3 тапҡыр төрлө битлектәр эшләп торорға кәрәк. Йәй көнө емеш-еләктең һутын биткә һөртөү яҡшы һөҙөмтә бирә.

**Тирене таҙарта торған битлек.**

100 грамм сейәне иҙеп, 1 ҡалаҡ эремсек, 2 ҡалаҡ кишер һуты ҡушып болғарға, биткә һылап, 15-20 минут тоторға һәм йылы һыу менән йыуырға. Бит тиреһе йәшәреп, тәбиғи төҫ алыр.

**Йыйырсыҡтарҙы бөтөрә торған битлек.**

1 ҡалаҡ дегә оно (ҡәһүә онтағыс аша үткәрергә), 1 ҡалаҡ ҡатыҡ, 1 ҡалаҡ кишер һуты, 1 ҡалаҡ лимон һутын ҡушып яһалған битлекте 20-30 минут тирәһе торорға һәм йыуырға.

**Бит тиреһе ҡоро булғанда.**

1 балғалаҡ ҡаймаҡ йә глицеринға 1 йомортҡа һарыһы, 1 ҡалаҡ бал ҡушылған битлекте битҡә 20-30 минут тоторға.

Баҡсала эшләгәндән һуң аяҡ тиреһе, табандар ярылып китһә, таҫҡа 3 литрҙай эҫе һыу һалып, 4-5 ҡалаҡ аш содаһы ҡушырға ла, аяҡтарҙы 15-20 минут тығып ултырырға. Шетка менән ҡарайған урындарҙы таҙартҡандан һуң, крем һөртөп ҡуйығыҙ. Ҡулдарҙың тиреһе матур һәм йомшаҡ булһын, тиһәгеҙ, 1-әр балғалаҡ алоэ һуты, бал, ҡаймаҡты ҡушып болғатып, ҡулдарға һөртөп, 15-20 минут тотҡас, йылымыс һыу менән йыуып, йомшаҡ сепрәккә һөртөп ҡуйырға. Белдектәр, бил һығылмалы көйө һаҡланһын, тиһәгеҙ, мускулдарҙы нығытыу өсөн гимнастика, үҙегеҙгә-үҙегеҙ массаж эшләгеҙ. Алкоголле эсемлектәрҙән, тәмәкенән йыраҡ торогоҙ, йоҡо туйғансы йоҡлап, гел күтәренке кәйеф менән йөрөгөҙ.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

*✓ Ата-бабаларыбыҙ Торатауҙы изге тау, изге урын итеп күргән. Шуға ла олатайҙарыбыҙ ошо изге тау эргәһенә насар уйҙарынан таҙарынмайынса, бурысын үтәмәйенсә яҡынламаған.*

*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

**Беҙҙең Ишембай районы Урман-Бишҡаҙаҡ ауылы мәктәбе бер нисә йыл рәттән яҡын-тирәләге тәбиғәт ҡомартҡыларын тикшереү менән шөғөлләнә. Шул ҡомартҡыларҙың иң һоҡландырғаны, ҡабатланмаç үҙенсәлеклеһе - ул Ер йөҙөндә 280 млн. йылдан ашыу йәшәгән мөһабәт Торатау тауы. Уны беҙ "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсына тәҡдим итәбеҙ.**

# ТОРАТАУЫМ- РУХИ ҠӘЛҒӘМ

Үҙебеҙҙең тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе булып "Торатау тауы һәм уның тирә-яғы" тигән фәнни конференция уҙғарҙыҡ. Уҡытыусы һәм уҡыусыларҙың конференцияла ҡатнашҡан эштәре, Торатау хаҡында ваҡытлы матбуғатта сыҡҡан төрлө материалдар тупланған альбом мәктәп музейында һаҡлана. Тырышлығыбыҙҙың емеше булып мәктәбебеҙҙең информатика уҡытыусыһы Абдрахман Әхмәтситдиҡ улы Вәлидов ярҙамында Интернетта сайт асылды. Шулай уҡ йыл да Ишембай ҡалаһының 2-се Башҡорт гимназия-интернаты менән берлектә мәктәп балалары өсөн район һәм ҡала күләмендә "Торатау йыйыны " ғилми-ғәмәли конференцияһын уҙғарыу үҙе бер йолаға әүерелеп китте.

Былтыр "Ете мөғжизә " конкурсы Рәсәй күләмендә уҙғарылғайны. Абдрахман Вәлидов ебәргән Торатау һәм бүтән шихандар төшөрөлгән фотолар бәйгенең жюри ағзаларын ҡыҙыҡһындырып, беҙгә шул акцияла ҡатнашыу бәхете тейгәйне. Бөтә мәктәп менән конкурс һығымталарын тулҡынланып көҙәттек, әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, еңеп сыға алманыҡ. Көйөп-янып йөрөгән балалар араһынан бер малайҙың: "Ни эшләп кешеләр күберәк үҙ ҡулдары менән яһаған әйберҙәргә тауыш биреүен аңлай алмайым. Уларҙы бит ватылған осраҡта кире тергеҙеп була, ә беҙҙең Торатауҙы - юҡ! Тәбиғәт тыуҙырған был мөғжизәне беҙгә һаҡларға ғына ҡала!" - тигән һүҙҙәре иҫтә ҡалған. Ысынлап та, Торатау тауы - ул Юрматы ерененең изге урыны һәм мөғжизәһе. Унда халҡыбыҙҙың тарихы, йолаһы, үҙаңы сағылыш тапҡан һәм күңелдәргә йыр, шиғыр, легенда-риүәйәттәр булып яҙылған.

Торатауҙың килеп сығышы хаҡында бихисап матур легендалар йәшәп килә. Уларҙың береһен Рим Әхмәдовтың "Йылғалар, күлдәр һәм үләндәр тураһында һүҙ" китабында табырға мөмкин. Тауҙың исеменең килеп сығышын аңлатып, ул башҡорттар элек мәжүси булғандар һәм ошо тауға менеп, Тор исемле аллаға табынғандар, тип иҫбатлай. Шулай уҡ Булат Рафиҡовтың "Ахырызаман көткәндә" китабында ла алыҫ тарафтарҙан килеп, Торатау итәгендә төйәкләнгән ҡәбиләләр хаҡында әйтелә. "Улар үҙҙәрен йүрмәле (юрматы) тип атай башлайҙар һәм борондан килгән йола буйынса, сит ерҙәрҙән килгән ҡунаҡтарҙан "аяғыңа ниндәй йүрмә эләкте", ниндәй яңылыҡтар алып килдең, нимәгә өйрәтә алаһың, тип һорар булғандар" .

Ата-бабаларыбыҙ Торатауҙы изге тау, изге урын итеп күргән. Шуға ла олатайҙарыбыҙ ошо изге тау эргәһенә насар уйҙарынан таҙарынмайынса, бурысын үтәмәйенсә яҡынламаған. Башҡортостан буйлап бик күп сәйәхәт итеп, башҡорттарҙың ырым-ышаныуҙары тураһында ла яҙып ҡалдырған урыҫ ғалимы Иван Лепехин 1770 йылдың 14 майында Стәрле пристанына, буласаҡ Стәрлетамаҡ ҡалаһына килә. Күпте белгән Исмаҡ ҡарттан ғалим пристандан 11 саҡрым алыҫлыҡта күренеп торған Торатау тураһында һораша. Ҡарт башҡорттарҙың был тауҙы изге тау тип иҫәпләүҙәре хаҡында әйтә. Шунан Лепехин, бик ҡыҙыҡһынып, тауға үҙе менеп ҡарамаҡсы була, әммә урындағы башҡорттар уның менән был изге тауға менеүҙән ҡырҡа баш тарта. Ғалим уларҙы нисек кенә өгөтләһә лә риза булмайҙар. "Тау алдында үтәргә тейешле бурыстарыбыҙ бар, әммә улар әле үтәлмәгән, ә шуларҙы үтәмәйенсә, тауға берәү ҙә менә алмай", - тиҙәр. Үҙҙәренең хаҡлыҡтарын иҫбатлау өсөн ошондай миҫал да килтерәләр. Бер икенсе милләт кешеһе, башҡорттарға үс итеп, уларҙың был изге урынын мыҫҡыл итер өсөн, тауға менеп, оло ярау иткән. Ләкин ошо гонаһы үҙенең һәм бөтә нәҫеленең башына етә. Үлем малайынан башлана. Үлер алдынан ул Торатауҙан төшөп килгән үҙен һәм ғаиләһе ағзаларын өҙгөләргә етешкән төрлө йыртҡыс кейектәрҙе күрә. Икенсе берәү, үҙенең тау алдындағы бурысын онотоп, төлкө ҡыуалап барып, тауға менеп китә һәм уны шунда айыу талай. Ошондай дәлилдәр килтерә башҡорттар. Ләкин Лепехин өгөтләүен дауам итә, тауға менгәндән уларға бер нәмә лә булмаясаҡ, тип ышандырырға тырыша. Бүләк таратып та, шарап эсереп тә ҡарай. Аптырағас, урындағы халыҡтың сәйәхәтселәргә мотлаҡ ярҙам итергә тейешлеге хаҡында губерна түрәләренең фарманын иҫтәренә төшөрә. "Шунан башҡорттар беҙҙе тауға оҙатып барырға риза булды, - тип яҙа ғалим. - Текә булғанлыҡтан, тау башына менеп еткәнсе бер ун биш мәртәбә туҡтап, хәл йыйып алырға тура килде. Тау башы - ҙур ғына тигеҙлек, унда йөҙләгән өй ултыртып булыр ине. Бына бер саҡ бер башҡорт, ҡулын болғай-болғай, беҙгә табан йүгерә. Килеп еткәс:" Ни өсөн артышты һындыраһығыҙ, - тине асыуланып. - Тауға көсләп артылдырыу етмәгән, хәҙер икенсе гонаһ эшләйһегеҙ. Был һеҙгә бушҡа китмәйәсәк".

Ошонан сығып та Торатау тауы бер ваҡытта ла ябай тау булмауын, үҙенсәлектәре бихисап икәнлеген аңларға мөмкин. Һәм ул быуаттар буйы башҡорт халҡының ярашыу, туғанлашыу, уртаҡ тел табыу урыны вазифаһын үтәгән. Һәр йыйын уның итәгендә уҙғарылған. Һуғышҡа китер алдынан ир-уҙамандар тау түбәһенә күтәрелер булғандар. Хатта Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ла был йола онотолмай, һалдаттар тыуған ерҙәре менән ошо тау түбәһенә менеп хушлашып китәләр.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуғыштан һуң, 1948 йылда, тау итәгендә тотҡондар колонияһы төҙөлөүе боронғо матур йолаға зыян килтерә - Торатауға барған бөтә юлдар тимерсыбыҡ менән уратып алына һәм унда йөрөү ҡәтғи тыйыла. Бер нисә быуын йәштәр үҙ йолаһын белмәй үҫә. Әммә Ишембай ҡалаһы һәм районының "Юрматы" йәмғиәт ойошмаһы тырышлығы һәм яҡташыбыҙ Рамазан Ҡотошевтың "Башҡортостан" гәзитендә баҫтырылған "Менәм әле Торатауға" (05.04.1992) сығышы ярҙамында быуаттар буйына килгән йола кире тергеҙелде. Беҙҙең мәктәбебеҙ ҙә йолаға ярашлы эшләргә тырыша, уҡыу йылы аҙағында тауға күтәрелеп, үткән йылға йомғаҡ яһап, спорт уйындары уҙғарып, матур ял итеп ҡайтабыҙ.

Шихандар тәбиғәттең иң үҙенсәлекле ҡомартҡыларының береһе. Бөтә ер йөҙөндә уларға оҡшаш географик биографиялы тауҙар юҡ. Гүйә, әкиәти алпамышалар кеүек, яңғыҙ ғына сал тауҙар донъя тыныслығын һаҡлап тора. Һәм уларҙы күргән һәр кеше, "Был тауҙарға нисә йәш икән?" тигән һорауҙы бирә. 270-240 млн. йылдар самаһы элек мәрйен утрауҙары һәм унда йәшәп үлгән төрлө ҡабырсаҡтар барлыҡҡа килтергән өйөмдәр ваҡыт уҙыу менән избизташ ҡатламы, балсыҡ, гипсҡа әйләнеп, мөһабәт тауҙар барлыҡҡа килтерә. Әммә Торатау геологик ҡына түгел, ә ботаника ҡомартҡыһы ла. Бында һирәк ерҙә генә үҫкән күп үләндәр йәйғорло балаҫ булып йәйелгән, төньяғы йүкә, саған, имән ағастарын һәм төрлө ҡыуаҡтарҙы һыйындырған. Үҫемлектәр донъяһы байлығынан хайуандар донъяһы ла ҡалышмай. Бында Башҡортостанда һирәк осраған һөҙһөт (удод), ҡанатһыҙ ҙур синерткә (зеленая дыбка), йөҙәрләгән төр күбәләктәрҙе осратырға мөмкин. Күптәре Ҡыҙыл китапҡа ингән был үҫемлек, хайуандарҙы Торатауҙа күреү үҙе бер ғорурлыҡ. Әммә бөгөн тауҙың һирәк осрай торған үҫемлектәре тапалып, юҡҡа сығып бөтөп бара икәнен дә онотorға тейеш түгелбеҙ. Йыл да тирә-яҡ ауылдарҙан, ҡалаларҙан йыйылған иҫерек йәштәр Торатауыбыҙҙың тулҡынланып ултырған ҡылғанына ут төртә. Уларҙы тыйған, яуапҡа тарттырған кеше юҡ. Тау итәгендәге иҫ киткес матур Туғарсалған күле буйы ҡырағай ял итеүселәр тарафынан тәләфләнә, бысратыла. Шуға ла беҙ тау алдындағы бурысыбыҙҙы онотorға тейеш түгелбеҙ. Изге тау икән, тәбиғәт ҡомартҡыһы икән, Торатауыбыҙҙы күҙ ҡараһылай һаҡларға бурыслыбыҙ.

**Зөһрә ИСКӘНДӘРОВА.**
**Ишембай районы**
**Урман-Бишҡаҙаҡ ауылы.**



✓ *Шулай ҙа башҡорт халҡы ассимиляцияға бирелмәҫкә ынтыла. Конгломерат сифатлы ҡалаларға ныҡ уҡ һырыҡмайынса, үҙ ерендә, үҙ ауылында ғүмер иткән халыҡ киләсәктә лә үҙ йөҙөн һаҡлап алып ҡаласаҡ.*



*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

# ХӨПБҮЛ ВАТАН МИН ӘЛ ИМАН,

## йәғни Уралыбыҙҙың мөғжизәләрен барлайым...

Рус-япон һуғышы батыры, Зәйнулла ишан Рәсүлевтың бер туған ағаһы Фәтҡулланың улы, халҡыбыҙға мәшһүр "Ғайса" йырын аманат иткән ерҙәшебеҙ Ғайса Рәсүлев былай тип йырлаған:

"Оят булмаҫ микән йыр йырлаһам,
Беҙҙең кеүек фәтхи (еңеүсе) ирҙәргә,
Йырлау ғына түгел, иларһың да
Ғәзиз башың йыраҡ илдәрҙә".

Эйе, был йырҙы Хөпбүл Ватан мин әл иманлыҡҡа тәрән инанған кеше генә йырлай ала. Юҡ, һис оят булмаҫ, йырлауы ла, яҙыуы ла башҡорт иле, башҡорт халҡы хаҡында. Башҡортостан мөғжизәләре рәтенә тәҡдим иткәндәремдең һуңғыһы - Башҡорт халҡы үҙе! Һәм бына ни өсөн.

Рәсәй империяһы эсендә бихисап төрки халҡы "үҙаллы" булып йәшәй. Әммә, Л. Н. Гумилев яҙғанса, күбеһенә пассионарлыҡ хас түгел. Яманлап, йәки ғәйеп итеп яҙмайым. Әммә минең яҙғанға берәү ҙә ҡаршы килә алмаҫ. Мәҫәлән, болғар сыуаштары. Милләттең төп һыҙаты булған теле төрки сығышлы булһа ла, сыуаш халҡында үҙ телен туған тел тип һанаусылар һаны бигүк юғары түгел. Исем-шәрифтәре лә урысҫа, христианлыҡ ҡабул итеп, урыҫ бутҡаһында бешеп, улар һанын тулыландырыусылары ла бихисап. Болғар-сыуаштар бөгөн үҙ тамырҙарынан ситләшеү, сит халыҡҡа яраҡлашыу юлында. Әлбиттә, быға ҡаршы тора алған көстәр ҙә, саралар ҙа бар. Ләкин... Тәне шул рус мөхите менән уратып алынып, ул еҫ эске ағзаларына һеңеп бөткәс, һауығырмы, ҡеүәте етерме боронғо болғарҙың үҙ тәбиғи майҙанына сығып, талтая баҫып торорға? Исем-шәрифтәре төркисә булып, тәғлимәттәре лә Ислам булһа, төрки донъяһы уға терәк булыр ине. Ошо турала тәрән уйланған шәхестәре бармы?

Йәнә, әле Рәсәйҙең Түбәнге Булыға, Тын, Ҡобан, Төньяҡ Ҡаф тауҙарында йәшәгән ноғайҙарҙы алып ҡарайыҡ. Диндәрен, телдәрен күптәнән инде юғалтып бөтөп, исем-шәрифтәрен дә славянлаштырып, тәғлимәтен дә христианлаштырған боронғо төрки халҡы - ноғай-казактар менән ни булды һуң? Йәки фин-уғыр төркөмөнә ингән, хәҙерге Ленинград, Псков, Вологда тирәләрендә йәшәгән боронғо халыҡтар: вепстар, ижорҙар, чудтар ҡайҙа? Улар ҙа Рәсәй сәйәсәте тарафынан күптән йотолған инде. Исмаһам, аратирә Рәсәй тарихында улар тураһында бер-ике һүҙ булһасы! Әйтерһең дә, улар донъяла булмаған. Телдәре лә, мәҙәниәте лә.

Урыҫ империяһы тарафынан бөтә төрки халыҡтарына йыйылма ҡушамат бирелеп, шул ҡушамат нигеҙендә (тата+ар) татар милләтенең барлыҡҡа килеүе хаҡында фекер йөрөтөп ҡарайыҡ. Урыҫ өсөн, бигерәк тә ҡәлғә эсендә бикләнеп ултырғандары өсөн, бар төрки телләләр татар булған. Ул халыҡтар Алтай-Саян көньяғындағы ҙур ҡәүем - Тату ҡәбиләһенекеме, түгелме, унда уларҙың эше юҡ. Ҡаҙан ханлығы кешеләре тата-ар түгел, улар болғар вариҫтары, Болғар ханлығын тергеҙеүселәр. Сыңғыҙхан ейәне Батыйхан Болғар ханлығын тата-арҙар көсө менән алған. Монголдар, үҙҙәре тарафынан еңелгән ҙур Тату ҡәбиләһен Уралдың көньяғынан Болғарға һуғышҡа ҡыуған. Юл ыңғайы Урал көнбайышында ар ҡәбиләләрен дә еңеп, тата халҡы менән үҙҙәренән алда барырға бойорғандар, ә арттан монголдың һайланма көсө кәртә булып килгән. Тата һәм арҙарға барыр урын юҡ. Тик алға ғына, алға бармаһаң, бөтәһененә дә баштары киҫеләсәк. Унлыҡтың береһе ҡасһа, уныһын да, ә йөҙлөктөң унаһы ҡаушаһа, бөтә йөҙлөктө лә һуйғандар. Шуның өсөн тата һәм арҙар үҙҙәре лә бик аяуһыҙ булған. Емерелгән, туҙҙырылған ер тураһында "Батый прошел" тигән әйтем урыҫ хәтерендә әлегә тиклем һаҡлана килә бит. Болғар ханлығын емереүҙә тата-арҙар айырыуса рәхимһеҙлек күрһәткән. Әгәр урыҫ кенәзлектәрендә монголдар яһаҡ өсөн ундың береһен талап итһә, ҡаршылыҡ күрһәткән Болғарҙа улар башҡа ҡағиҙә ҡулланған:

"Малы юҡтың балаһын алыр,
Балаһы юҡтың бисәһен алыр,
Бисәһе юҡтың башын алыр".

Бына шул рәүешле урыҫ йылъяҙмаларында монгол-татар яуы хаҡындағы мәғлүмәт төплө урын алып ҡалған.

Ә башҡорттарға килһәк, шәжәрәләрҙә бөтөнләй икенсе ваҡиғалар һүрәтләнә. Сыңғыҙхан һәм уның улы Жужый Уралды - Башҡорт илен 14 йыл үтә алмай. Башҡорттар урыҫ кенәзлектәрен дә, Болғар ханлығын да 14 йыл буйына ҡырылыуҙан һаҡлаған. Әлбиттә, махсус рәүештә түгел, ә үҙен, илен һаҡлау осоронда. Табын һәм Томан-Төмән ҡағанаты вариҫы Майҡы бей, Һыр-Даръяның Аҡ ҡолан (Әхмәтзәки Вәлиди сығанағында Ҡолан башы) тигән бейек ярында монголдар менән килешеү төҙөп, хандан айырым билдәләр ала: ораны - Салауат, ағасы - ҡарағас, ҡошо - ҡарағош, тамғаһы - һепертке. Сыңғыҙхандың ейәне Батыйға башҡорт иленә һөжүм итеү зарурлығы булмай. Шуға ла уға башҡорттарҙы көнбайыш яуына саҡырыуҙан башҡа сара ҡалмай.

Табын ҡағанатының ҡояшы һүрелеп, ҡәбиләләргә таралыр осоро була был. Сыңғыҙ хан менән килешеүҙә табын берекмәһе етәксеһе Майҡы бейгә иғтибар ҙур булһа ла, башҡорттоң башҡа ҡәбиләләренең дә етәкселәре Сыңғыҙхандың килешеү табынында була. Мәҫәлән, үҫәргәндәрҙән Мөйтән бей һәм башҡалар дөйөм ғәскәрҙә билдә алып, яуҙа ҡатнаша, бер мәнфәғәттә тормош кисерә.

Майҡы бейҙең ейәне Барындың ысын исеме Ҡара шәйех була. Минән оло ҡартатайыбыҙ Барын-Барунға - Ҡара Шәйехкә тиклем шәжәрә буйынса 25 быуын. Һәр быуынға 30 йәш бирһәк, 750 йыл. Ҡырым ханлығы кешеләре араһында ла барындар бар. "Урыҫтар Ҡырым татарҙары тип исем таҡҡан ҡырымлыларҙа барындарҙың утыҙлаған ауылы бар", - тигәйне миңә фән кандидаты, ҡырымлы Исмәт әфәнде Заатов. Ҡара шәйех, Батый хан менән Венгрияға, Австрияға барып етеп, еңеүсе сифатында "барон" дәрәжәһен үҙенә ҡушамат итеп алманымы икән, тигән фекерем бар. Урыҫ йылъяҙмаларындағы Башҡорт хан шул Ҡара шәйех түгелме икән, тигән фаразым да бар. Әлбиттә, быны асыҡлау өсөн айырым тикшеренеү алып барыу кәрәк.

Башҡорт тигән мөғжизәне беҙ Рәсәй империяһының төрки халыҡтары тарихы менән сағыштырып ҡына баһалай алабыҙ. Урыҫ милләтенә нимә яҡшы, сәйәсәт тә шулай борола. Дөйөм тәнде тәшкил иткән ағзаларының һаулығын, һаҡланыуын ул бер ваҡытта ла иҫәпкә алмай. Бөгөн дә шулай. Мәҫәлән, халыҡтарҙы үҙ теленән яҙҙырыу сәйәсәте бер ниндәй Конституцияға ла, тормош талабына ла һыймай. Үҙҙәре ҡайҙалыр Францияла йәки Американа етем ҡалған бер урыҫ балаһы өсөн дә лаф ороп маташа бит. Ә үҙ илендә миллионлаған төрки һәм башҡа халыҡ балаларының әсә телен йолҡоп алыу сәйәсәтен алып барыуҙы енәйәткә иҫәпләмәйҙәр.

Бына шулай йотола аждаһа тарафынан халыҡтар яйлап. Ҡырымлылар, Төмән төркиҙәре үҙҙәренең меңәр йыл туплаған эске көстәрен - пассионарлыҡтарын ҡулланып, милләт булып ойоша алманы, дөйөм ҡушамат буйынса Ҡырым татарҙары, Себер татарҙары булып көн итә.

Тарих өйрәнгәндәре, зиһенлеләре үҙ тамырҙарын яҡшы белә һәм үҙҙәренең ҡушаматлы тата-ар булыуҙарын инҡар итә. Тата-арҙың тағы ла бер айырсалы тармағы бар. Ул - керәшендәр. Боронғо тамырҙары тата-ар булһа ла, тәғлимәттәре христианлыҡ булғас, исем-шәрифтәре лә славянлашып, христиан ғөрөф-ғәҙәтен үҙ иткәс, улар ҙа тулы ассимиляция юлында.

Әлбиттә, һаны әҙ булған милләттәрҙең дә, күп һанлы милләттәрҙеке кеүек, бөйөк тарихы, үҙ мәҙәниәте, ауыҙ-тел ижады, ғөрөф-ғәҙәте бар. Әммә кесерткәндең болондағы барлыҡ үҫемлектәрҙе баҫып алыуы тәбиғи бизмәнүлсәмде үҙгәртә. Ул мең төрлө еҫле, төҫлө, шифалы үләндәрҙе үҙе ише итергә тырыша, тәрән, сатырман тамырҙарын ебәрә. Тәбиғи болонлоҡ кесерткән менән генә тулһа, гүзәл болон булмаясаҡ. Тәбиғәттең ҡануны шулай. Төҫө лә, хуш еҫе лә сыҡмаһа, болондоң майҙан булыуынан ни файҙа?

Ислам тәғлимәте, тата-арға болғарҙарҙан мираҫ булып ҡалып, киң таралыу тапһа ла, бөгөнгө тата-арҙар йотолоуға нығыраҡ бирелә. Радио, телевидение аша һөйләгән вәкилдәренең сығыштарында урыҫ һүҙҙәре бик күп ҡулланыла. Тимәк, ул һөйләш телендә лә өҫтөнлөк итә. Һүҙ юҡ, был күренеш бөгөнгө башҡорт йәштәре телендә лә нығ һиҙелерлек. Әммә ул башлыса ҡала йәштәре теленә хас. Шулай ҙа башҡорт халҡы ассимиляцияға бирелмәҫкә ынтыла. Конгломерат сифатлы ҡалаларға нығ уҡ һырыҡмайынса, үҙ ерендә, үҙ ауылында ғүмер иткән халыҡ киләсәктә лә үҙ йөҙөн һаҡлап алып ҡаласаҡ.

Дәүләт тәғлимәте пассионарлыҡҡа йоғонто яһаһа ла, милләт эске көс, эске рух, эске үҫеш юлы аша тарҡатыусы тәғлимәт йоғонтоһонан арына ала. Башҡорт шундай ҙур баҫым, ҡыҫым һөҙөмтәһендә лә Рәсәй эсендә ассимиляцияға бирешмәгән берҙән-бер төрки халыҡ! Суҡынған, илен һатҡан, үҙ иленә, халҡына ҡаршы эш ҡылған башҡортто табыуы еңел түгел!

Унан һуң... Башҡорттоҡо кеүек йырҙары, бейеүҙәре, бай, бик бай фольклоры булған башҡа халыҡтар донъяла күпме икән? "Урал батыр"ға тиң эпос бармы? Булһа, ҡайһы халыҡта? Гөлгәмеш - фарсыныҡы, Мәнәс - төрки-ҡырғыҙҙыҡы. Ә Урал батыр - башҡорт халҡыныҡы! Донъяла әле уларға тиң киң фәлсәфәле башҡа эпос юҡ.

Ата-бабаларыбыҙҙың киләсәк быуындар ҙа һоҡланырлыҡ тарихи ғәмәлдәре бар. Рәсәй барлыҡ һуғыштарында ла башҡорттан ғәскәр төҙөгән. Ниңә ул башҡа халыҡтарҙан айырым ғәскәр төҙөмәгән? Ә уларҙың батырлыҡтары? Наполеон фельдмаршалы Мюрат тиктә юҡҡа ғына башҡорттарҙың тәүәккәллеге, ҡылыс һуғышында бик оҫта булыуҙары хаҡында ғәжәпләнеп яҙып ҡалдырмаҫ ине, моғайын. Ә Кутузовтың "Любезные мои" тигән һүҙҙәрен һәр берегеҙ беләлер. Унан һуң, Хиуа, Аҡ мәсет һуғыштары, Ҡырым, Кавказ, Бохара походтары, үҙ азатлығы өсөн империя сәйәсәтенә ҡаршы 200 йылдан ашыу көрәшеүе ни хаҡта һөйләй һуң? Ә 1917-1920 йылдарҙа тағы ла үҙ ғәскәрен төҙөп, үҙ ере, үҙ азатлығы өсөн ҡан ҡойғос һуғыш алып барыуы? Ысынбарлыҡта, Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәтенең иҫ китмәле көрәше Рәсәй шовинистарын федератив дәүләт төҙөү юлына баҫтыра, һуңынан ул СССР-ға әүерелә. Был - ысынбарлыҡ. Быны йә тарихты белмәүселәр, йә тарихыбыҙға көнләшеп ҡараусылар ғына инҡар итеп маташасаҡ. "Беҙ аҡ та түгел, ҡыҙыл да түгел, беҙ - башҡорттар" тигән оран халҡыбыҙҙың милли асылына тап килә. Башҡорт ҡаһарманлығы мөғжизә түгелме ни? Бөйөк Ватан һуғышында әллә махсус рәүештә, әллә сараһыҙлыҡтан, башҡорт атлылары Дон далаһында фашистарҙың танк армияһына ҡаршы ҡуйыла. Советтар Союзы Геройы исеме алған ҡаһармандары һаны буйынса Башҡорт атлы дивизияһына тиңләшерлек башҡа бер хәрби часть тә юҡ! Мөғжизәме? Әлбиттә, бик ҙур мөғжизә! Был хаҡта хәрби тарихсылар ҙа, рәсми матбуғат та артыҡ яҙып бармай. Оят бит. 78 геройҙың бөтәһе лә башҡорт булмаған хәлдә лә, дивизиялағы һуғышсан рух, хәрби оҫталыҡ, маҡсатҡа тоғролоҡ, дөйөм тәүәкәллек, ватансылыҡ Башҡортостандыҡы, башҡорттоҡо!

**Шулай итеп, һөҙөмтә ҡылайыҡ:**

**1. Башҡорт Уралы - мөғжизә!**

**2. Алтын, йәшмә, мәғдән билғауы - мөғжизә!**

**3. Башы бер-береһенән 10-30 саҡырымда ғына булған, икеһе Төньяҡ Боҙло океанға, икеһе көньяҡ диңгеҙҙәренә ҡойған Башҡортостан йылғалары Ағиҙел, Яйыҡ, Әй, Уй, Мейәс - мөғжизә!**

**4. Тарихы һәм һыуының шифалығы менән дан алған Әүеш-Әүлиә тауы һәм шишмәһе - мөғжизә!**

**5. Башҡорт Уралының серле тауы Ирәмәл -мөғжизә!**

**6. Шул барлыҡ рухты бар иткән, һаҡлаған һәм һаҡланған ошо ерҙә йәшәгән Башҡорт халҡы - мөғжизә!**

**Бына, хөрмәтле уҡыусым, үҙем күҙаллаған мөғжизәләрҙең бер шәлкемен генә һеҙгә тәҡдим итәм. Уйланығыҙ, фекер туплағыҙ. Мөғжизәләр бер-береһенә бәйле була. Тормош, ғүмер ағымы кеүек үк! Урал - башҡортһоҙ, башҡорт Уралһыҙ йәшәмәгән! Улар икеһе лә мөғжизә! Алтынһыҙ, мәғдәнһеҙ Урал бөйөк, сал Урал да була алмаҫ ине. Урал армыттары араһынан баш алған йылғалар ҙур байлыҡты - Урал аҫтында ғәйәт ҙур һыу һаҡлағысы ятыуын дәлилләй. Әүлиә шишмәһе лә ошо изге һыуҙың мөғжизәле бер тамсыһылыр ул. Бына шул алты мөғжизәне яҡлап тауыш бир, хөрмәтле уҡыусым!**

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**Учалы районы.**

***✓ Дотация мәсьәләһен хәл иткәндә ауыл хужалығы үҙенән-үҙе күтәреләсәк. Ул дотацияны ерҙә эшләүсе кеше техника һәм яғыулыҡ-майлау материалдары итеп күрә.***



# БАТША БУЛЫРҒА

## Был вазифаны тыуған ҡырҙарымда

**Хәҙерге ауылда кемдәр йәшәй һуң? Әйтергә кәрәк, иң беренсе сиратта, әлбиттә, ҡарт-ҡоролар, бала саҡтары, йәшлектәре, хеҙмәт йылдары ауыл ерендә үтеүселәр, бер һүҙ менән әйткәндә, ғүмерҙәрен ауылда үткәргән пенсионерҙар. Күп булмаһа ла, ай һайын пенсия килеп тора, бер-ике баш мал тотоп, картуф, йәшелсә-емеш үҫтереп йәшәп була ауылда. Ауылда йәшәгән икенсе бер категория кешеләр - ауыл интеллигенцияһы ҡатламы: уҡытыусылар, тәрбиәселәр, хат ташыусы, шәфҡәт туташы, хакимиәт хеҙмәткәрҙәре, урман ҡараусы, һ.б. Уларҙың да ай һайын ала торған килеме бар. Өсөнсөнән, ауылда әле пенсия йәшенә етмәгән, әммә йәштәр кеүек ҡайҙалыр вахтала йә ялланып эшләр әмәл-дәрттәре ташып тормаған, ауылға нығынып өлгөргән элекке колхозсылар һәм совхоз эшселәре йәшәй. Уларҙың бик һирәктәре генә үҙенең эшен асҡан йә булмаһа башҡа төрлө осраҡлы юл менән аҡса эшләп көн итә. Барыһы ла мал тота, картуф үҫтерә, бер аҙҙары йәшелсә-емеш үҫтереү менән шөғөлләнә. Дүртенсенән, ауылда ошо юғарыла һанап үтелгән ҡатлам вәкилдәренең балалары, ейән-ейәнсәрҙәре балалар баҡсаһына йөрөй йә мәктәптә уҡый.**

**Ошо һанап киткәндәр араһында ҡайһы төркөмгә ауылда йәшәүе иң ауыры тип уйлайһығыҙ? Эйе, яңылышманығыҙ, өсөнсө төркөмгә ҡарағандарға. Улар теге яҡта ла түгел, был яҡта ла нығынып өлгөрмәгән. Беҙҙең бөгөн "Монолог" рубрикаһында сығыш яһаусы ҡунағыбыҙ өсөнсө төркөмгә ҡарай. Ул - Алмас ИЛЕМБӘТОВ, Хәйбулла районының Әбеш ауылында йәшәй, ун йылға яҡын фермерлыҡ менән шөғөлләнә. Ни өсөн фермерлыҡ ауыл хужалығының йөҙөн билдәләүсе көскә әүерелә алмай? Дәүләт ярҙамынан тыш ауыл хужалығы аяҡҡа баҫып китә алырмы? Рентабеллектең серҙәре нимәлә? Беҙгә ни өсөн ергә ныҡ итеп йәбешергә кәрәк? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап эҙләй йәш фермер.**

### Ике стандарт

Беҙ һаман да ике стандарт менән йәшәйбеҙ. Дөрөҫөрәге, шулай йәшәргә мәжбүр ителгәнбеҙ. Сөнки оло сәйәсәт шулай ҡуша. Был мәсьәлә һәр өлкәгә лә, шул иҫәптән йәшәйешебеҙ кимәленә лә ҡағыла. Ваҡытлы матбуғат сараларында илебеҙҙәге тормош кимәле күпертелеп күрһәтелә, уның мөһим яҡтарына бөтөнләй иғтибар бирелмәй. Ә бына беҙ, ауылда йәшәүселәр, ысын тормоштоң нисек икәнлеген бик яҡшы беләбеҙ һәм уның бар ауырлығын үҙ елкәбеҙҙә татыйбыҙ. Ауыл кешеһе тик Леонид Брежнев ил менән етәкселек иткән осорҙа ғына иркен һулыш менән, айлыҡ эш хаҡы алып йәшәп ҡалды. Тик шул осорҙа ғына илебеҙҙә ауыл халҡына ҡарата социаль ғәҙеллек принциптары һаҡланды. Ауыл эшсәндәре илебеҙҙең иң юғары органдарына депутат булып һайланды, социаль пакеттар менән файҙаланды. Һағынып ҡына иҫкә алырлыҡ ул замандарҙы.

"Ялҡауы килмәгән тырыш кешегә ҡайҙа ла эш бар, ауылда йәшәп, эш юҡ тип ултырыу дөрөҫ түгел...", тигән һүҙҙәрҙе хәҙер йыш ҡабатлайбыҙ һәм уларҙы лозунгҡа әүерелдерҙек. Күп кенә етәкселәр ул фекерҙе баштарынан себен осорор өсөн әйтә башланы, йәнәһе, улар бар эштәрҙе ойоштора, тик халыҡ ҡына ялҡау. Бер яҡтан уйлағанда, был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк бар кеүек, ысынлап та, тырыш, эҙләнгән кеше үҙенә эшен дә, ашын да таба ала хәҙерге ваҡытта. Әммә бында бер нәмә иҫәпкә алынмай, ул да булһа, бөтә кеше лә тәбиғәт һәм Аллаһы Тәғәлә биргән һәләте буйынса бындай сифаттарға эйә булмай бит. Һәр кем үҙаллы ерҙә эшләй, үҙ эшен аса, хеҙмәтен ойоштора алмай. Бындай сифаттарға кешелектең 8-10 проценты ғына эйә. Кемдер эште ойошторорға, кемдер уға ялланып йә килешеү нигеҙендә эшләргә тейеш. Һәйбәт хужа булған урында кешеләр насар йәшәмәйҙәрҙер, тип уйлайым. Шуға күрә, теге йәки был ауылда йәшәүселәрҙең тормош кимәле ул ерҙең хужаһының ниндәй икәнлеген билдәләүсе күрһәткес.

### Дәүләт ярҙамы

Мин туғандарым менән ун йылдан ашыу фермерлыҡ менән шөғөлләнәм. Был эште ташлайым, тип, бер нисә мәртәбә уҡталып, телевизорҙа күрһәтелгән яҡшы тормошто күреп, кире туҡталып ҡалам. Киләсәккә ҡарата өмөт тота мине. Ун йыллыҡ тәжрибәмдән сығып, шундай һығымтаға килдем: дәүләт ярҙамы булмаһа, фермер хужалығы бер ваҡытта ла мандып, аяҡҡа баҫып китә алмаясаҡ. Был хәл фермерлыҡҡа ғына түгел, тотош ауыл хужалығына ҡағыла. Беҙҙең илдә генә түгел, иҡтисады ныҡлы булған Европа илдәре, Канада фермерҙары быға күптән инанған. Дәүләт ярҙамын рәсми рәүештә нисек атарғалыр, дотациямы, бер тапҡыр бирелә торған ярҙаммы, процентһыҙ кредитмы, минеңсә, кеше өсөн иң кәрәкле булған ризыҡты - икмәкте үҫтергән өсөн фермер бындай ярҙамды алырға хоҡуҡлы. Әгәр ҙә ауыл хужалығында эшләүселәрҙең, йәғни икмәк үҫтереүселәрҙең, башҡа төрлө етештереүселәрҙең продукцияһының хаҡында уның үҙкиммәте иҫәпкә алынмай икән, уны һатыуҙан алып еткермәгән аҡсаны фермер йә башҡа ауыл хужалығы хеҙмәткәре хөкүмәттән дотация формаһында алырға тейеш. Ошо шарт үтәлгәндә генә ғәҙеллек тантана итеп, кешеләр ергә йәбешеп ятыр ине. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: икмәктең үҙкиммәтен ҡаплау маҡсатында уны етештереүсе бер буханканың хаҡын 100 һумға тиклем күтәрҙе икән, ти. Илебеҙҙең барлыҡ ҡалаларында йәшәүселәр митингҡа сығып, был хәл менән риза булмауын белдерәсәк. Икмәктең ысын хаҡы шулай торһа ла. Ә инде етештергән игене өсөн тиндәр генә алған ерҙә эшләүсе кеше ни эшләргә тейеш һуң улай булғас? Һуңғы ваҡытта ауыл хужалығын күтәреү буйынса милли проекттар яҙалар, шуның буйынса нимәлер эшләп маташалар, әммә алға китеш юҡ. Минеңсә, дотация мәсьәләһен хәл иткәндә, ауыл хужалығы үҙенән-үҙе күтәреләсәк. Ул дотацияны ерҙә эшләүсе кеше техника һәм яғыулыҡ-майлау материалдары итеп күрә. Әгәр ҙә йыл һайын ямғыр яуып торһа, игендәр уңһа, бирешмәҫкә була. Беҙҙең Хәйбулла яғында иген бер йыл уңһа, биш йыллап уңмай тора. Был осраҡта нишләргә һуң? Ауыл хужалығына ҡарата ил башлыҡтарының ҡарашы тамырынан үҙгәрергә тейеш. Һәр хәлдә, беҙ быға өмөт итәбеҙ.

Түҙгәнгә - түш, тигән кеүек, сәскә атҡан фермер хужалыҡтарын телевизорҙан ҡарап ята торғас, беҙҙең дәүләт тә фермерҙарға йөҙө менән борола башланы. Бына былтырҙан башлап яғыулыҡ-майлау материалдарына субсидия бирә башланылар. Был ярҙам беҙҙең өсөн һиҙелерлек. Льготалы лизингҡа "Беларусь" тракторы ала алманыҡ, уның ҡарауы, коммерция лизингына "Камаз" машинаһы алдыҡ. Аллаға шөкөр, уныһы өсөн дә айыныҡын айында түләп киләбеҙ.

### Беҙҙең хужалыҡ

Колхоз тарҡалғанға тиклем үк мин фермер булып эшләй инем инде. Бер ваҡытта ла яңғыҙ булманым. Миңә һәр саҡ Әмир, Илһам, Камил, Ғәлимйән, Вадим ағайҙарым, башҡа туғандарым ярҙамлашып торҙо. Әлеге ваҡытта ҡатыным Рәзилә - уң ҡулым. Сәсеү, урып-йыйыу ваҡыттарында, башҡа төрлө күмәк көс талап иткән эштәрҙә һәр ваҡыт бергәләшеп эшләйбеҙ. Рәзилә ундай саҡтарҙа алыштырғыһыҙ ашнаҡсы, ҡыҙҙарым Ғәзизә, Зөбәржәт күптән инде ҡул араһына инделәр, өс йәшлек Ильяс улым бар. Улым булғас, балтам ҡулымдан төштө, тип тә әйтә алам. Өс йәшлек кенә булһа ла, беҙҙең хужалыҡта комендант вазифаһын башҡара ул. Ҡыҫҡаһы, беҙ атай-әсәйебеҙҙең һигеҙ балаһы, төрлө мөнәсәбәттә булһа ла, ошо ергә бәйләнгәнбеҙ. Төрлө ҡағыҙ эштәрен Сибайҙа йәшәүсе Илһам ағайым алып бара. Ул килешеүҙәр төҙөй, отчеттар яҙа, ҡыҫҡаһы, ҡағыҙ эше - унда. Был яҡтан мин бәхетле. Сөнки күп кенә ауыл егеттәре ҡағыҙ мәшәҡәтенән ҡурҡып, үҙ эшен асырға тәүәккәллек итә алмай. Беҙҙең ауыл егеттәре Магнит ҡалаһына барып эшләп, айына 15-шәр мең һум аҡса алып ҡайта. Мин тракторсыларыма айына 6-7 мең генә түләй алам. Игенләтә лә түләргә тура килә.

Колхозыбыҙ тарҡалғанда, мин үҙ аллы эшләп йөрөгәнгә күрә, миңә техника тәтемәне, башҡалар әҙ-мәҙ генә булһа ла ярҙам алды был саҡта. Үҙемдең тегенән-бынан йыйып ҡоршаған алама техника менән тороп ҡалдыҡ. Әле кешенең пай ерҙәрен арендаға алып, 800 гектарға яҡын майҙанға бойҙай, һоло, арпа, үлән сәсәбеҙ, бал ҡорто тотҡас, ҡарабойҙай ҙа сәстем. Ярай әле, бал ҡорто тотам. Шунан килгән аҡса игенселек менән шөғөлләнергә ныҡ ярҙам итә. Ҡайһы ваҡыт яланда эшләүсе тракторҙарҙы туҡтатмаҫ өсөн балалар өсөн түләнгән пособиены, әсәйемдең пенсия аҡсаһын да тотонорға тура килә. Шундай һүҙҙәрҙе лә ишетергә тура килә: "Фермер Алмас тип һөйләйҙәр, уның ней, маҡтанырлыҡ бер нәмәһе лә юҡ, өйө емерелергә тора, еңел машинаһы ла юҡ...". Эйе, шулай, әммә минең тыуған еребеҙҙә эшләрлек оло теләгем, биләгән ерем, иҫке булһа ла техникам бар. Нисек кенә ауыр булмаһын, мин был юлымдан тайпылырға уйламайым һәм ҡасандыр бер ваҡыт ныҡлап аяғыма баҫасаҡмын. Көнө бөгөн түгел. Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙҙең тыуған еребеҙгә ҡарата ошондай ҡараштa булмаһаҡ, беҙҙең ерҙәрҙе ситтән килеп эшкәртәсәктәр һәм ул ерҙән беҙ ҡолаҡ ҡағасаҡбыҙ. Шуға күрә лә түҙәм барыһына ла.

Үҫтергән игенде, етештергән итте, балды Аҡъяр, Сибай баҙарҙарына сығарып һатабыҙ, йәрминкәләрҙә ҡатнашабыҙ. Элек элеваторҙар дәүләттеке булған саҡта игенеңде һаҡлау еңел ине. Хәҙер улар шәхси ҡулдарҙа һәм игенеңде һаҡлаған өсөн бик күп түләргә тура килә. Әгәр ҙә игенеңде элеваторҙа оҙайлы ваҡыт һаҡлайым тиһәң, түләү арта бара, һаҡлаған өсөн дә иген менән түләгәс, ундағы ашлығың да бүҫкәрә бара. Беҙҙең балды бар урында ла яратып алалар. Орск, Ҡыуандыҡ яғында бал арзан, арзан булһа ла, ҡиммәтерәк хаҡҡа беҙҙең балды алырға тырышалар. Беҙҙең балдың үҙенсәлеге Урал тәбиғәтенең хозурлығынан, унда бик күп төрлө үләндәрҙең һәм сәскәләрҙең үҫеүенән килә инде ул.

Ер эшенә бер тотонғас, туҡталып ҡалырға ярамай. Ер эше төҙөлөш кеүек түгел, аҡ-

> ***"Ялҡауы килмәгән тырыш кешегә ҡайҙа ла эш бар, ауылда йәшәп, эш юҡ тип ултырыу дөрөҫ түгел...", тигән һүҙҙәрҙе хәҙер йыш ҡабатлайбыҙ һәм уларҙы лозунгҡа әүерелдерҙек. Күп кенә етәкселәр ул фекерҙе баштарынан себен осорор өсөн әйтә башланы, йәнәһе, улар бар эштәрҙе ойоштора, тик халыҡ ҡына ялҡау. Бер яҡтан уйлағанда, был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк бар кеүек, ысынлап та, тырыш, эҙләнгән кеше үҙенә эшен дә, ашын да таба ала хәҙерге ваҡытта. Әммә бында бер нәмә иҫәпкә алынмай, ул да булһа, бөтә кеше лә тәбиғәт һәм Аллаһы Тәғәлә биргән һәләте буйынса бындай сифаттарға эйә булмай бит. Һәр кем үҙ аллы ерҙә эшләй, үҙ эшен аса, хеҙмәтен ойоштора алмай. Бындай сифаттарға кешелектең 8-10 проценты ғына эйә. Кемдер эште ойошторорға, уға ялланып йә килешеү нигеҙендә эшләргә тейеш. Һәйбәт хужа булған урында кешеләр насар йәшәмәйҙәрҙер, тип уйлайым. Шуға күрә, теге йәки был ауылда йәшәүселәрҙең тормош кимәле ул ерҙең хужаһының ниндәй икәнлеген билдәләүсе күрһәткес.***

✓ ***"Бай йәшәмәһәм дә, ас йәшәмәҫмен", тигәндәр хәҙер ауылына ҡайтып төпләнә башланы. Был йәһәттән көрсөктөң ауыл өсөн файҙаһы бар. Ни өсөн тигәндә, маҡсатлы кешеләре булған ауылдың киләсәге лә бар.***

# ТЕЛӘМӘЙЕМ...

## иген үҫтереүгә алыштырам

саң булмаһа, төҙөлә башлаған йортоң көтөп тә тора ала. Ә ер иһә бер эшкәртелә башлап, бер йыл ғына иғтибарҙан ситтә ҡалһа, уны ҡый үләндәре, билсән, алабута баҫып ала. Бына беҙ әле Йәнтеш ауылының уңдырышлы тупраҡлы 800 гектар ерен пайсыларҙан арендаға алдыҡ. Ул ер нисек кенә уңдырышлы булмаһын, ун йыллап һөрөлмәй-сәселмәй ятып, сиҙәм ергә әүерелгән. Теләйбеҙме-юҡмы, унда сиҙәм ҡалҡытырға тура килә. Ул ерҙе рәткә һалып алыр өсөн дә ике-өс йыл ваҡыт кәрәк буласаҡ.

Үҙебеҙҙең тирмәнебеҙ бар. Унда үҙебеҙҙең ауылдың кешеләре онон һалдыра, ҡырҙан килеүселәр ҙә бар. Тирмәнебеҙ бер туҡтауһыҙ эшләмәй, уны заказ булғанда ғына көйләйбеҙ.

### МТС-тар отошло, әммә...

МТС-тар дәүләттеке булып ҡалһа - ҡана һуң. Уларҙағы анауындай ҡеүәтле техника менән ерҙе эшкәртеү ауыл хужалығын йылдам үҫтереүгә, колхоздарҙан һәм совхоздарҙан һуң барлыҡҡа килгән бушлыҡты тултырырға ярҙам итер ине. Әле килеп ауыл халҡына йән башына пай ерҙәрен өләшеп, инде ысын мәғәнәһендә ер хужаһы булырға торғанда барлыҡҡа килгән ауыл хужалығы холдингтарына ҡарата миндә өс төрлө ҡараш йәшәй. Беренсенән, үҙ пай ерендә эшләй алырлыҡ кешеләр һәр ауылда бер ҡулдың бармаҡтары хәтлем дә түгел. Шулай булғас, пай ерҙәре тулайым килеш, бүлгеләнмәйенсә-телгеләнмәйенсә холдингҡа ҡарап, шундай ҡеүәтле техника менән эшкәртелһә, аренда өсөн пайсыға өләшө түләнеп торһа, МТС ауыл хужалығын көрсөктән сығарыусы бынамын тигән сара булыр ине. Әммә, икенсенән, холдингтар хосусилаштырыла ҡалһа, уның ҡарамағындағы ерҙәр ҙә төрлө шарттарҙа (әйтәйек, ниндәйҙер хеҙмәт йә кредит өсөн түләнмәгән осраҡта, ә ундай осраҡтар ауыл хужалығы өсөн хас күренеш) "аяҡланып" китеп, бөтөнләй ҡулыбыҙҙан ысҡынып китмәҫ тимә. Өсөнсөнән, ауыл кешеһенә үҙ ерендә ысын ер хужаһы булыу мөмкинлеге барлыҡҡа килгәс кенә ул мөмкинлектең ҡулдан ысҡыныуы күңелле күренеш түгел, минеңсә.

Былтыр мин урып-йыйыу осоронда МТС-ҡа мөрәжәғәт иттем. Сөнки әлегә үҙемдең комбайн алыр мөмкинлегем юҡ. Тәүҙә улар минең игенде йыйып биргән өсөн килешелгән хаҡ алып торҙолар ҙа, һуңынан бер яҡлы ғына килешеүҙе үҙгәртеп, хаҡты арттырҙылар. Беҙҙең менән яңынан һөйләшеп тә торманылар. Әгәр ҙә МТС тулыһынса дәүләттеке булһа, ул килешеүҙе үҙгәртмәҫ ине. Шуға күрә мин уларға ышанып бөтмәйем.

Беҙҙең фермерҙарға сит ил кешеһе һымаҡ ҡарайҙар. Ә МТС-ты үҙ итәләр кеүек. Урындағы хужалар кешеләр МТС-ҡа пайҙарын бирһен өсөн йүгереп йөрөй. Ысынлап та, улар, бәлки, ер айырым кешеләрҙең ҡулынан ситкә осмаһын өсөн эшләйҙер, әммә ауыл халҡының үҙ пайына битараф ҡарауы барыбер аптырата.

### Көрсөк ауылға ҡайтара

Хәйерле эштең ҡаршылыҡтары ла булып тора инде ул. Йыл һайын 5-8 баш малым юғалып тора. Быйыл янғын сығып, малым ҡазаланып ҡуйҙы. Янғын электр үткәргестән сыҡты. Ундағы сусҡалар, һыйырҙар янып үлде. Шунан һуң күп тә тормай, башмаҡтарым Һаҡмарға барып һыуға батты. Кем белә инде, бәлки минә, мосолман кешеһенә, сусҡа аҫырарға кәрәк булмағандыр. Әммә мин бер нисә тапҡыр, сусҡа үҫтермәҫмен, тип үҙ-үҙемә һүҙ бирһәм дә, 8 баш быуаҙ һыйырым юғалыу сәбәпле, тиҙ арала сусҡа һимертеп һатыу ниәте менән был эшкә тотонғайным, аҙағы ана нисек барып бөттө. Сусҡа үҫтереүҙең шуныһы уңайлы: ул көтөүҙә йөрөмәй, көтөүҙә йөрөмәгәс, юғалмай. Икенсенән, сусҡа тиҙ һимерә. Элек тә колхоздан ҡалған өр-яңы һарай булды. Биш йыл элек уны мин алырға йөрөй инем. Униһы ла янды.

Бар донъя буйынса иҡтисади көрсөк башланғас, оҙон аҡса эҙләп киткән күптәр ауылға ҡайта башланы. "Бай йәшәмәһәм дә, ас йәшәмәҫмен", тигәндәр хәҙер ауылына ҡайтып төпләнә башланы. Был йәһәттән көрсөктөң ауыл өсөн файҙаһы бар. Ни өсөн тигәндә, маҡсатлы кешеләре булған ауылдың киләсәге лә бар.

Бөтә кеше һатыу менән булыша алмай, кемдер берәү иген дә сәсергә тейеш. Бер әкиәт бар. Унда батша ил буйлап: "Кем дә кем батша булырға теләй, шулар һарайыма килһен", - тигән иғлан ебәрә. Кемдең батша булғыһы килмәһен, һарай янына барса халыҡ эркелә, тик бер генә кеше килмәй ҡала. Быға аптыраған батша теге игенсене һарайына алдыра ла: "Ни өсөн барыһы ла батша булғыһы килгәндә, һин бер үҙең ситтә тороп ҡалдың?" - тип һорай. "Мин дә батша булырға теләһәм, игенде кем сәсә һуң?" тип яуаплаған игенсе. "Әгәр ҙә мин һине көс менән батша итеп ҡуйырға теләһәм, ни эшләрһең?" тип ныҡыша теге батша. "Ул сағында илеңдең халҡы астан үләсәк бит", тип яуап бирә игенсе. Шул һүҙҙәр менән игенсе иген үҫтереүҙең батша булыуҙан да кәрәклерәк һәм мөһимерәк эш икәнен батшаға аңлата. Ошонан һуң батша игенсенең хеҙмәтен юғары баһалай һәм уға һалымды кәметә. Был әкиәттә илебеҙҙең закон сығарыусыларына, төрлө кимәлдәге етәкселәренә тәрән кинәйә ята. Игенсе икмәк үҫтергәне өсөн төрлө ташламаларға, дәүләт ярҙамына мохтаж кеше. Батша булырға теләүселәрҙең, карьера, аҡса, яҡшы йәшәү шарттары яратыусыларҙың ҡалаға ынтылыуын аңларға була, әммә кемдәрҙер ерҙә лә эшләргә тейеш бит. Әгәр ҙә ерҙә эшләгәндә байыйым, тигән маҡсат ҡуйһаң, энтузиазмың бик оҙаҡҡа бармауы ла бар. Сөнки был эш кешенән сыҙамлыҡ, сабырлыҡ һәм оло эшмәкәрлек талап итә. Мине иһә сәм йөрөтә. Ҡайһы ваҡыт ҡул һелтәрҙәй булған сағымда ла эске тауышым ҡапыл туҡтата ла, мине киренән ҡара тупраҡҡа баҫтыра. "Ана, Ниғмәтйәндең малайҙары ерҙә эшләп ҡараны ла, хәлдәренән килмәне...", тип әйтмәһендәр өсөн дә сәмләнергә тура килә ҡайһы саҡтарҙа.

### Өс йүнәлеш

Беҙҙең эшмәкәрлек өс йүнәлешле: игенселек, малсылыҡ һәм умартасылыҡ. Ҡайһы ваҡыт шулай ҙа уйлап ҡуям: әгәр ҙә мин ошо өс төрлө шөғөлдөң береһе менән генә ныҡлап шөғөлләнһәм, тиҙерәк аяҡҡа баҫа алам бит, тип. Әммә улай еңел генә килеп сыҡмай шул ауыл тормошонда. Беренсенән, беҙҙең яҡтың тәбиғәт шарттары шундай - ямғыр яумаһа, иген-бесән үҫмәүе бар. Иген-бесән үҫмәһә, тәүге ике тармаҡтан табыш килмәйәсәк. Был саҡта инде умартасылыҡ ҡотҡара. Икенсенән, иген сәсһәң, малға ем дә, бал ҡорттарына кәрәҙҙәрен тултырыр өсөн ҡарабойҙай ҙа үҫә. Шуға күрәлер ҙә, ауыл ерендә йәшәгәс, барлыҡ шөғөлдәр менән дә булышырға тура килә.

Тағы ла шулай була: бер йылда игендең хаҡы була, икенсе йылында - юҡ, ит, бал менән дә шулай. Сит илгә долларға һатыр өсөн балды беҙҙән дә күпләп алырға тырышалар. Әммә был хаҡ беҙҙәге баҙар хаҡынан күпкә түбән. Был эш менән шөғөлләнеүселәр беҙҙең балды бик осһоҙға алырға теләй. Шуға күрә балды күмәртәләп һатыу отошло түгел. Былтыр, мәҫәлән, балдың килоһы баҙарҙа 150 һум торған саҡта, күмәртәләп алыусылар уны 90 һумға тиклем төшөрҙө.

Быйыл ҡымыҙ яһарға тотонорға уйлайым. Йәнтеш ауылы тирәһе, ғөмүмән, беҙҙең Хәйбулланың "япраҡ яғы" киләсәктә республиканың санатор-курорт зонаһына әүерелергә тейеш. Әгәр ҙә етәкселәребеҙҙең был маҡсаты тормошҡа ашһа, беҙ етештергән продукцияны һатыу өсөн дә мөмкинлек асылыр, тип ышанам.

**Әйткәндәй...**

**Алмастың йорто янындағы баҡсала умарталар урынлашҡан. Ихата эсендә, йорт янында оло күстәй уҡмашып бал ҡорттары мыжғып тора. Хужаларҙың балалары ла шунда. Әммә шуныһы: бал ҡорттарының йорт хужаларында бөтөнләй эше юҡ. Мин үҙем бал ҡортонан бик күп тапҡырҙар сағылып, һыным ҡороған кеше булараҡ, был күренеште сытырайып күҙәттем, улар килеп сағып алмаһын өсөн тиҙерәк йорт эсенә инеп тайыу яғын ҡараным. Ни өсөн хужалар һәм уларҙың балалары бал ҡорттарынан ҡурҡмай икән, тигән һорауға яуапты ла шунда таптым. Баҡтиһәң, ишектәре шар асыҡ торған йортҡа ла бал ҡорттары инмәй икән. Хужалар - бал ҡорттарының, бал ҡорттары хужаларҙың эске донъяһына ҡыҫылмай. Бер йорт янында ике донъя шулай итеп бер-береһе менән һыйышып йәшәй. Был ике донъяның уртаҡ яҡтары ла бар: уларҙы берҙәмлек, тырышлыҡ һәм фиҙаҡәрлек берләштерә, дөйөм маҡсатлы итә. Беҙҙең яҡтарҙа Алмас кеүек егеттәрҙе ҡатынан да ҡаты ихтыярлы булғаны өсөн "ҡатағас" тип йөрөтәләр. Ошондай егеттәребеҙ күберәк булһын ине, тип теләргә генә ҡала.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

---

*ҮӘТ ӘЙ!*

## АҢЛАП ЙЫРЛАЙҺЫҢМЫ, АҢЛАМАЙ ЙЫРЛАЙҺЫҢМЫ?

Башҡорт эстрада йырсыларының компакт-дискын тыңлап ултырҙым да уйға баттым: йәштәребеҙ ҡалай төрлө беҙҙең, уларҙың донъяға ҡарашы ла, ихтыяжы-талаптары ла, мәҙәниәткә мөнәсәбәте лә төрлө һәм беҙҙең өлкән быуындарҙыҡынан ҡырҡа айырыла. Бына бит, йырҙары ла төрлөсә яңғырай уларҙың. Ҡайһы берҙәре фәһемле лә, дәртле лә, моңһоу ҙа йырҙар башҡара. Ҡайһы берәүҙәренең көйгә һалынған һүҙҙәре үтә мәғәнәһеҙ яңғырай. Текста башҡортсаға йә урыҫ һүҙҙәрен, йә инглиз һүҙҙәрен ҡушып йырлау ҙа өҫтөнлөк алып китә.

Ҡайһы бер йырҙарҙы тыңлап, өйҙәге өлкән быуын инәй-олатайҙарҙан әрләнеп тә ҡуябыҙ, "Нинә тыңлайһығыҙ ул мәғәнәһеҙ йырҙарҙы?!" тип һуҡрана улар. Шунан үҙҙәренең йәш саҡтарын һөйләп китәләр. Кистәрен гармунда уйнап, моңло йырҙар йырлап, шаян таҡмаҡтар таҡмаҡлап, дәртле бейеүҙәр менән үтте йәшлегебеҙ, тиҙәр. Уларҙы аңларға була. Сөнки бөгөнгө быуын ниндәй генә аҡыллы, камил булмаһын, барыбер ҙә элекке быуындарҙан, тамырҙарҙан, йолаларҙан ситкәрәк китә шул. Заманса камиллыҡҡа асылың йөкмәткеһен дә ҡушһаң, ҡана ла һуң...

Әлеге компакт-дискыға әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Унда "Өфө уттары"нда төшөрөлгән концерт бара. Сәхнәләге йырсылар башҡарған йыры менән генә түгел, ым-ишараһы, йыр араһында ҡыҫтырылған һүҙҙәре менән тамаша ҡылған йәштәрҙе дәртләндерә. Йәштәр ҙә көй ыңғайына йә бәүелә, йә ҡушылып йырлай, йә ҡысҡыра. "Бирмәнең", "Давай Башкирия", "Һине хочу", "Кабельное TV", "По блату" тигән йырҙарҙан ниндәй мәғәнә, рух табалар икән, тип аптырап ултырғанда, йырсыларҙың тышҡы ҡиәфәтенә күҙ төшә. Кемдер затлы костюмда, кемдәрҙер милли башҡорт кейемендә сығыш яһай, ә кемдеңдер ярты кәүҙәһе яланғас. Ә кемдәрелер мул балаҡлы салбарҙар, футболкалар, йә зауыҡһыҙ курткалар кейгән. Миңә ҡалһа, улар ҡайҙалыр урамда йөрөгәндән һуң, тура сәхнәгә менеп баҫҡан һымаҡ. Ҡыҙҙармы, егеттәрме икәнен дә айырыуы ҡыйын уларҙың. Реперҙар шулай кейенергә тейеш, тип кенә, сәхнә этикаһын боҙоу яраймы икән? Заман башҡа - заң башҡа, тиһәләр ҙә, кейем йәһәтенән сама белергә тейешбеҙҙер инде ул. Бына, мәҫәлән, ҡыҙҙар йөҙө менән генә түгел, ә тышҡы ҡиәфәте, кейеме менән дә һоҡландырырға тейеш, ә заманса йыр йырлаған ҡыҙҙарҙың кейеме лә йырына ярашлы була, бер ниндәй нәфислек, нәзәкәтлек күрмәҫһең...

Йәш башҡарыусылар араһында матур, фәһемле йырҙар менән сығыш яһаусылар ҙа бар. Мәҫәлән, МС Алаҡан, Илшат Йәмилев, Фидель Хәсәнов, Заһит Ҡунафиндарҙың йыры йөрәккә үтеп инә. Ә башҡаларҙың моңо ла, сығышының мәғәнәһе лә юҡ.

Моңһоҙ-нниһеҙ һүҙҙәр ҡысҡырыу беҙҙең халыҡтың әхлағына ла, мәҙәни талаптарына ла тап килмәй барыбер. Исламда йыр шайтан аҙанына тиңләнә. Юҡ, халҡыбыҙҙың оҙон көйҙәре, күренекле композиторҙарыбыҙ йырҙары тураһында бармай һүҙ. Моғайын да, әлеге компакт-дискылағы ҡайһы бер сығыштарҙы ошо шайтан аҙанына индерергә булыр ине ул. Ә бит шайтан аҙанын әйтеп, ҡысҡырып йөрөү гонаһ булыуын да онотмаһын, ошо хаҡта уйланһын ине ул йәш башҡарыусылар.

**Фәнзилә ЮЛҒОТЛИНА.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

**✓ Эҙләүҙәр, илке-һалҡы ғына булһа ла, өс көн дауам итте. Ошо изге эштә, әйтеүҙәренсә, йәмғеһе ике йөҙҙән ашыу кеше ҡатнашты. Әммә ләкин файҙаһы ла, һөҙөмтәһе лә булманы, ҡыҙыҡай һыуға төшкән таш ише юҡ булды ла ҡуйҙы.**



Юлдар, юлдар,
Инде нисә йылдар,
Айырыла алмам һеҙҙән мин.

Көйләй-көйләй ҡайтып барған Айбулат бая иртән Хәлил менән һөйләшеп торған урында йыйылып киткән милиция машиналары менән һәр төрлө автобустарҙың күплегенә хайран ҡалды. Ниндәйҙәре генә юҡ уларҙың. Бер нисә сыбар еңел машинаның маңлайындағы яҡтылыҡ сигналдары ялпылдап тора. Шундайҙарының сит ил маркалы сөм-ҡара иң дәүенән ҡыҙыл лампаслы генерал төштө. Генералдың генералы ошолай йөрөп яткас, эштәре йә хәтәр быларҙың, йә бөтөнләй хөрт икән. Сыбар-йәшел кейемле тәртип һаҡсыларының бәғзе берҙәре һалпы ҡойроҡло дәү эттәр етәкләһә, икенселәре муйындарына ҡыҫҡа көбәклә автоматтар аҫып алған. Ниндәйҙер ҡумталар күтәргәндәре лә күренеп ҡалғылай. Хәлил дә бында икән. Айбулат уны әллә ҡайҙан уҡ шәйләп алды. Юлдың өҫ яғында, Ирәндек битләсендәге ҙур аҡланда төрлө кейемдәге халыҡ төркөмө йыйылған. Күпселеге үҫмерҙәр ҙә, йәштәр. Уларҙың барыһының да донъяһы теүәл: юҡ-барҙан да ҡыҙыҡ табып көлөшөргә генә торалар. Уларҙың баҙыҡәсе тауышынан хатта Ирәндек тауы яңғырап китә.

Таныш "Нива"ны күреп ҡалған капитан Байсалов уға ҡаршы ыңғайланы һәм ваҡытында килеп өлгөрҙө. Ни өсөн тигәндә, күкрәгенә "ОМОН" тигән яҙыулы ҡара тукыма һыҙаты тегелгән лейтенант: "Машиналарға был урында туктарға ярамай", - тип Айбулатты ҡыҫымға алғайны.

-Был егет минең менән, лейтенант, - тине Хәлил килеп етер-етмәҫ, - ул беҙҙең районды охотоведы, ярҙамға килгән.

-Прошу прощения, - офицер рыя ғына честь бирҙе лә, өймәкләшеп мәж килгән иптәштәре араһына инеп юғалды.

-Шунан, эштәр нисек, эҙәрмән? - Айбулат дуҫын шаян йылмайып ҡаршы алды. - Бөтөн район йыйылған инде әллә?

-Бөтә район булмаһа ла, күрше яткан, башҡа яҡын-тирәләге ауыл халҡын күтәрергә тырыштыҡ. Мәктәптәрҙән өлкән синыф уҡыусылары сыҡты.

-Нимәгә?

-Урманды һөҙөп ҡарарға уйлайбыҙ.

-Кискә торомо? Тағы кемдәлер юғалтып ҡуйыуҙан ҡурҡмайһығыҙ икән...

-Ҡурҡыныс, әлбиттә, юҡ түгел, әммә ләкин, тәүәккәлләмәйенсә лә булмай - һуңға ҡалыуыбыҙ бар. Көндөң ниндәй икәнлеген күреп тораһың бит.

-Дә-ә, ауыртмаған башҡа тимер таяҡ инде һеҙҙең өсөн, ә...

Йыйылған бихисап кешене сылбырға теҙеп, ошо тирәне ҡараштырырға уйлағандар, ә ҡараңғы бына-бына төшөргә тора. Ай-һай, файҙаһы булырмы әлеге ашыҡ-бошоҡ ҡына ниәтләгән ҡабалан эштәренең?

Көслө ямғыр ҡамасауланымы, әллә икенсе сәбәбе булдымы, эттәр эҙ ала алманы. Бары ҡыҙыҡайҙың бысранып бөткән һыңар бейәләйен генә таптылар. Уныһы машиналар торған ерҙән артыҡ алыҫ та түгел ине. Шуның өсөн баланың ҡайһы яҡҡа китеү ихтималлыһын билдәләү ҙә, өҙөп кенә әйтеү мөмкинселеге лә юҡ кимәлендә. Дуҫтар эштең башынан аҙағынаса бер тирәлә булырға тырыштылар. Айбулаттың һиҙемләүе юш сыҡты: бушҡа ваҡыт сарыф иттеләр, эштәре уңманы һәм бала табылманы. Инде эңер төшөп, күҙ бәйләнә башлаған мәлдә, алдан һөйләшелгән буйынса, торба һыҙыртып, отбой һуғырға мәжбүр булдылар.

Көлләнө лә, йә үҙ машинаһына, йә оло автобустарға ултырып ҡуҙғалырға торғанда, Хәлил Айбулатты туктата һалды. Ишекте асмаҫтан ғына:

-Теге ҡыҙҙың атаһын ултыртып, ауыл советына алып бара алмаҫһыңмы икән? - тип үтенес белдерҙе. - Справкаһына мисәт һуктырырға кәрәк уға. Һиндә ҡунур ҙа, юл ыңғайы иртәгә алып килерһең. Килештекме?

Айбулат килешеү түгел, әлеге үтенескә эстән генә хатта ҡыуанып ҡуйҙы. Ҡыуанмай һуң, "эш" менән яҡынданыраҡ танышыу өсөн көтөлмәгән мөмкинселек тә баһаң был.

-Әйҙә, ултырһын, ҡайҙа ул?

Хәлил, арҡаһына оло ғына биштәр артмаҡлаған көйө, ҡаушаған төҫ менән мөжөрәйеп юл ситендә торған ҡып-ҡыҙыл йөҙлө әзмәүер янына барҙы ла, ҡулдарын болғай-болғай, уға оҙаҡ ҡына ниҙер аңлатҡандың һуңынан аҡ "Нива" яғына төртөп күрһәтте. Урынынан теләр-теләмәҫ һымаҡ ҡуҙғалған урыҫ кешеһе шыптлатып машина ишеген асты. Унан араҡы ҡатыш осһоҙло тәмәке еҫе аңҡып тора ине.

-Бына шундай эштәр, зёма, - тип ҡуйҙы ир алғы ултырғысҡа ауғас та, шунда уҡ "һин"гә күсеп, - иртәгә ҡайҙа барып абыныңды бөгөн белһәң икән ул...

-Нисек улай, үҙ баландан көпә-көндөҙ күҙ яҙлыҡтырмаҡ кәрәк, - тип ҡыҫыҡһынды Айбулат, - ул һинә бер бөжәк түгел дә?

-Кем уйлаған инде, өлөшөнә яҙған хата менән ҡазанан әҙәм һаҡлана ла, ҡасып ҡотола ла алмайҙыр ул.

-Бына быныһын дөрөҫ әйттең.

-Етәкләп кенә янымда йөрөтәһе булған да бит... - йыйы һүҙҙән күнеле тулышып киткән урыҫтың тауышы ҡалтыранып сыҡты.

-Шулай, яҡшы фекер һәр саҡ һуңлап килеүсән.

-Ә мин, иптәш, мисәт кенә һуктырам да, иртәгә таң менән ҡыҙымды тағы эҙләргә тотонам, - бәхетһеҙ атай һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа бора һалды, әммә шунда уҡ кире әйләнеп ҡайтты, - табылыр ул, табылмай ҡайҙа барыр тиһең...

-Һин минә шуны әйт әле - ни сәбәптән ошолай йәйәү көйөнөң? Ни эшләп машинаң менән йөрөмәйһең?

Айбулат ошо урында, күрәһең, юлдашы өсөн көтөлмәгән һорау бирҙе. Тегеһенең ҡапыл-ҡара күҙҙәре уйнап киткәндәй булды.

-Нисек? Машина, тинеңме? - ул ауыр көрһөндө, - Ә-ә, машина... Машина минеке түгел... Үҙем дә, дүрәк, ысынлап та баланы нимә тип ошо йәһәннәм төпкөлөнә алып йөрөргә инде, йә? Берәү, йәнәһе, тәбиғәт күрһәтә лә, һауа еҫкәтеп ҡайта. Бына күрһәттең, бына еҫкәттең...

Урыҫтың бәйләнешһеҙ һүҙҙәре Айбулатҡа үтә сәйер һәм асыҡтан-асыҡ сер йәшеренгән кеүек тойолдо: тауышында бының ниндәйҙер яһалмалыҡ һиҙелә лә баһаң. Ошонан кем үҙ машинаһын күрәләтә икенсе берәүгә тотторор ебәрһен? Етмәһә, араҡы менән дуҫ кешегә. Ай-һай, шикле әҙәм...

-Автобус менән генә килгән булһаҡ... - тегеһе, үкенес белдереп, һаман бөтөрөндө. Ләкин Айбулат хәҙер белә, уның һәр һүҙе ысынбарлыҡҡа тап килмәгән шикелле, бөтөрөнөүҙәре лә ихлас йөрәктән түгел. Тик, бына мәсьәлә, ошоно нисек, ниндәй юл менән иҫбат итергә?

-Ишегендә ныҡлап бикләгән булһаң да ҡамасау итмәҫ ине, - тине Айбулат бер талай өндәшмәй барғандан һуң.

-Әйтәм бит, былай килеп сығыр тип кем уйлаған, - юлдашы йәнә көрһөнөп ҡуйҙы. Инде ул, әкренләп, үҙ алдағына үҙе ышана барған кеүек. - Яңғыҙ ҡайын янында ҡалдырғайным мин уны. Ул мәлдә ямғыр әле башланмаған, бар әйберҙәр тыншта ине. Үҙем дә әллә ни алыҫ китмәгән һымаҡмын...

-Баланың юлға сығып китеү ихтималлығы юҡмы?

-Юл минә һәр ваҡыт күренеп торҙо. Хатта, бер ҡара "Волга"нан башҡа машина үтмәгәнлеген дә хәтерләйем.

-Ҡара "Волга" тиһең инде?

-Эйе, уны табып, хужаһынан һораштылар, бер ҡыҫылышы ла юҡ, буғай.

Һәр ҡайһыһы үҙ уйҙарына сумған икәү йәнә бергилке тын барҙы.

-Слушай, - Айбулат ҡапыл юлдашына ҡарай боролдо, - давай былай итәбеҙ: хәҙер уҡ советҡа барып, йомошондо йомошлайбыҙ ҙа, бөгөн һин беҙҙә ҡунаһың. Ә




иртәнге көн, таң менән, мин һине әлеге урынға алып киләм. Барыһын да урында күрһәтеп аңлатырһың, килештекме?

Урыҫ әүәл баҙап ҡалды, аҙаҡ ғәжәпләнә биреп:

-Нимәгә ул һиңә кеше ҡайғыһы? - тип әллә ҡыҙыҡһынды, әллә мөрхәтһенмәй баш тартырға уйланы.

-Кеше ҡайғыһы? - Айбулат көлөмһөрәп ҡуйҙы. - Йәгни, кеше ҡайғыһы төштән кире, тип әйтмәксеһеңме?

-Сама менән шулайыраҡ...

-Ә мин, мужик, һинең өсөн ҡайғырмайым, минә сабый йәл. Бәлки, берәй нисек ярҙам итеп булыр, тип өмөтләнәм. Эшем бит урман менән бәйле, - ошо урында Аҫылбаевтың көләс йөҙө кинәт етдиләнеп китте. - Мәгәр, кеше ҡайғыһына килгәндә, танауыңа киртеп ҡуй: беҙҙә улай ҡаралмаған. Беҙҙә тигәнем, ауыл ерендә йәшәп ятҡан башҡорттар араһында була инде.

Уға тәү күргәндәй һынап ҡараған "мужик" ҡулын һондо:

-Ул сағында таныш булайыҡ, мине Николай тиҙәр. Николай Страхов...

-Айбулат Аҫылбаев, - ҡул ҡыҫыштылар.

-Ә һин милиция кешеһенә һис тә оҡшамағанһың, әй, тупаҫ түгелһең, - Николай тәү тапҡыр ихлас йылмайҙы.

-Охотовед мин...

-Ана нисек...

Ғәҙәтенсә иртә менән уянған Айбулат яңы танышын да йәһәтләне. Йоморолай ғына йотоп тамаҡ ялғағандан һуң, һыңар көбәклә бишатар мылтығын алып, тәғәйен ергә ашыҡтылар. Барып еткәндәрендә таң шәфәғе саҡ беленә башлаған мәл ине. Айбулат, йылыраҡ урын һайлап, балсыҡы изелеп ятҡан шоссенан төштә лә, машинаһын тапанды сиҙәмгә туктатты. Урман ҡырындараҡ моңайып торған йыуан һәм сығыртмаҡ олонло яңғыҙ ҡайын янына килделәр.

- Бына ошонда инде, - Страхов рыя ғына әйәк атты, - плащ-палатканы бына был урынға йәйҙем, рюкзак һәм башҡа кәрәк-яраҡ уның өҫтөндә ине.

- Ситтә күпме ваҡыт булдың, хәтерләйһеңме?

- Ярты сәғәттән дә артыҡ түгелдер... Әйләнеп килгәнемдә, ҡыҙҙан башҡаһы, бөтә нәмә үҙ урынында... Уның һыңар бейәләйен генә таптым...

Ике ҡулын йылы куртка кеҫәһенә тыҡҡан Айбулат, тирә-яҡты байҡап, байтаҡ ваҡыт торҙо. "Ҡыҙыҡай ҡалған урындан егерме биш - утыҙ аҙым арауыҡта эрелеваҡлы ағаслыҡ башлана, ә уның араһы мал аяғы теймәгән оҙон үлән. Аҡылы бар бәндә бынауы еүештә тейер-теймәҫенә унда инергә тырышып тормаҫ булыр: күҙ аҫып йомған арала буҫҡәнә ҡәҙәр һыуланасаҡһың, - тип үҙ алдына фекер йөрөттө ул, - был яҡтарҙа һирәк булған ҡала кешеһе ҡоро көндә лә, урман эсенә генә түгел, ғүмүмән, унда емерелеп үҫкән кеше бейеклек һонтор үләнгә лә тығыла һалып бармай. Шомланамы ул, шикләнәме, әммә урап үтә. Ә был осраҡта биш йәше тулыр-тулмаҫ ҡыҙ бала..."

- Иң аяныслыһы шул - Ирочка үҙемдең ҡан түгел, үгәй ҡыҙым. - Николайҙың бошонҡо тауышы Аҫылбаевтың фекер сылбырын өҙҙө. - Әсәһе күҙенә нисек ҡаралыр инде хәҙер. Былай ҙа, бала минеке түгеллегенә баҫым яһап, аҙым һайын, унайы сыҡҡан һайын иҫкә төшөрә лә тора ине...

Ошо мәл, ныҡ көсәнеүҙән ҡабырғалағы торбаһынан ҡара төтөн бөркә-бөркә, бысраҡты ян-яҡҡа сәсрәтеп килгән дәү вездеход-автобус күренде. Шоссе ҡырлап барып туктауына, уның эсенән шау-шыулы төркөм тышҡа ағылды. Кемдер шарҡылдап көлһә, икенсеһе сәрелдәп һөрән һалды, өсөнсөһө инде хатта урман шаулатып йырлап ебәрергә лә тартынманы. Әллә бер сама һуҡмыштар ҙа инде. Тәүҙә ҡараштарында өмөт саткылары күренеп ҡалған Николайҙың ошонан һуң кикреге шиндә лә ҡуйҙы: быларҙа кеше ҡайғыһы юҡ та баһаң. Әйтерһең дә, ғәйеп булған сабыйҙы эҙләргә түгел, ә ниндәйҙер байрамға килгәндәр.

Эҙләүҙәр, илке-һалҡы ғына булһа ла, өс көн дауам итте. Ошо изге эштә, әйтеүҙәренсә, йәмғеһе ике йөҙҙән ашыу кеше ҡатнашты. Әммә ләкин файҙаһы ла, һөҙөмтәһе лә булманы, ҡыҙыҡай һыуға төшкән таш ише юҡ булды ла ҡуйҙы. Өмөтләндергәндәй эҙ-фәләне лә тойолманы. Күпмелер ваҡыт үтеүгә яҡын-тирәләге ауылдарҙа ҡупҡан шау-шыу баҫыла төшөп, милиция ла тынысланғандай булды: юғалғас, юғалды инде, ни хәл итәһең. Кемдер сабыйҙы йәлләһә, кемдер уның булдыҡһыҙ, бешмәгән атаһын әрләне. Тик, башҡа нимә тиһәң дә, шуныһы асыҡ ине: ошондай шыҡһыҙ һауа шарттарында кес кенә баланың өс тәүлек буйына иҫәнһау ҡала алыуы, ай-һай, икеле. Етмәһә, дүртенсе көн киткәндә һиҙелерлек һалҡынайтып ебәрҙе лә, артынса уҡ ҡар күҙе күренде. Таңға инде бар донъя ап-аҡ ине. Ер өҫтө, ҡойма баштары, өй ҡыйыҡтары, ағастарҙың яланғас ботаҡтары, һәммәһеһәммәһе епшек ҡар менән ҡапланған. Әлеге аҡлыҡтан хатта ҡүҙҙәр ҡамаша.

Ихатаға сығып, атлаған һайын табан аҫтында ғырт-ғырт килеп ятыр ҡырпаҡ ҡарға баҫҡан Айбулаттың йөрәге уйнаны ла китте - теге сабыйҙың эҙенә төшөү өсөн осраҡтың быныдайын башҡаса һорап та алып булмаҫ, мәлде ҡулдан ысҡындырырға ярамай. Ул шунда уҡ эш урынына шылтыратып, ярҙамсыһын иҫкәртте лә, үҙе урманға йыйынды. Үтә лә ентекләп, төпсөрләп әҙерләнде. Шулай булмай, ул бит бөгөн ябай һунарға сыҡмай, ә кеше һыныла кешене эҙләргә бара. Әлеге кешенең яҙмышы, бәлки, тулыһынса уның ҡулындалыр, кем белә...

**(Дауамы бар).**

ЙҮНСЕЛ ЙҮНЕН ТАБЫР



# ҮҘ ЙОРТОҢДО ТӨҘӨҮ...

## күпкә арзанға тура килә

**Билдәле менеджмент Питер Друкерҙың ошондай һүҙҙәре бар: "Бөтөнләй кәрәкмәгән әйбер менән булышыуҙан да файҙаһыҙыраҡ шөғөл юҡ". Әңгәмәсем "Бизнес-Софт" күп профилле компания" яуаплылығы сикләнгән ойошманың директоры Әнүәр ҒӘЛӘҮЕТДИНОВ та ошо фекер яҡлы. Ул үҙенең күңеленә яҡын булған һәм заманына күрә кәрәкле өлкә һаналған ерҙе файҙаланыу, ер документтарын әҙерләү буйынса үҙ эшен асып ебәргән. Ул үҙ сығышында ойошмаһы һәм ер мәсьәләләре хаҡында бәйән итә, уларға ҡарата фекерҙәрен белдерә, проблемалар күтәрә. Һүҙ - Әнүәр Таһир улына.**

### Мөлкәтеңде законлаштырырға кәрәкме?

Өфө дәүләт нефть техник университетының тамамлап, архитектор һөнәрен үҙләштергәс, Сибай ҡалаһына эшкә йүнәлтмә алдым. Унда биш йыл баш архитектор урынбаҫары, шунан ҡаланың ер комитеты рәйесе булып эшләнем. Тыуған ҡалам Өфөгә ҡайтҡас, бер аҙ "Газпром трансгаз Өфө" ойошмаһында эшләп алдым да, үҙемдең эшемдә асырға булдым.

Университетта уҡыу йылдарында ҡала төҙөү эшмәкәрлеге менән яҡындан таныштым. Ер өлкәһендәге инновациялар, компьютерлаштырыу, база төҙөү минең өсөн ҡыҙыҡлы эш булып күренде. Эш асыуым да ошо ҡыҙыҡһыныуыма бәйле. Беҙҙең компания, нигеҙҙә, ерҙе файҙаланыу, бынан тыш төҙөлөш өсөн документтар йыйыу, ер участкаһы өсөн хоҡуҡ алыу һәм ергә ҡағылышлы бөтә төр мәсьәләләр менән шөғөлләнә. Бөгөн үҙ ереңдең ысын хужаһы булыу өсөн әллә күпме ҡағыҙ талап ителә, ә уларҙы йыйыу анһат эш түгел. Шуға ла беҙ халыҡтың эшен еңеләйтеү маҡсатында ошондай хеҙмәт төрөн тәҡдим итәбеҙ. Ер өлкәһендә алдашыу, мутлашыу эштәре йыш ҡабатланып торғас, кешеләр ышаныслы ойошмаларға мөрәжәғәт итергә тырыша. Беҙ һәр ваҡыт ошо ышанысты аҡлау яғындабыҙ, шуға ла клиенттарҙан өҙөлгәнебеҙ юҡ. Унан һуң, беҙгә еңел генә һорау менән түгел, ғәҙәттә, үҙҙәре төрлө ерҙәргә мөрәжәғәт итеп, хәл итә алмаған ҡатмарлы мәсьәлә менән киләләр. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, көсөбөҙҙән килгәнсә ярҙам итергә тырышабыҙ.

Шуныһын да әйтеп үтергә кәрәк, ер - ул бик ҡатмарлы объект, ҡайһы саҡта беҙ башҡарып сығара алмаған осраҡтар ҙа була, эштең барып сығыу һөҙөмтәһе беҙҙән генә тормай, кеше ошоно ла аңларға тейеш. Беҙҙең ойошмаға халыҡ күпселек ер участкаһын һатҡанда йәки объект хужаһы үлеп китеү осрағында, был мөлкәтте вариҫ исеменән законлаштырыуға бәйле һорауҙар менән мөрәжәғәт итә. Бөгөн шулай уҡ баҡса участкаларын хосусилаштырыу әүҙем бара.

### Ҡаланыҡылар ер ҡәҙерен аңлай

Бөгөн фатир һатып алыуға ҡарағанда йорт төҙөп сығыу күпкә отошло. Шәхси йорт төҙөгән саҡта сығымдар, нигеҙҙә, төҙөлөш материалдарына, ер участкаһына һәм инженер селтәрҙәренә китә. Шуға ла, ҡабатлап әйтәм, үҙ йортоңдо төҙөү арзанға төшә. Беренсенән, үҙең өй һалғанда туғандарың ярҙам итә, арзан хаҡҡа ғына төҙөүсе бригадаларын да ялларға була. Икенсенән, үҙеңә төҙөгәс, тиҙерәк башҡарып сығыу яғын ҡарайһың, йәғни тиҙ срокта өйлө була алаһың. Шәхси хужалыҡ төҙөлөшө сығымдарын ҡалалағы өс бүлмәле фатир һәм гараждың һәр квадрат метры хаҡы менән иҫәпләп сағыштырып ҡараһаң, үҙ йортоң ун тапҡырға арзанырак килеп сыға. Шуға ла үҙ өйөңдә булдырыу еңелерәк. Унан һуң үҙ йортоң булыу тойғоһо ғына ни тора бит әле! Ошо йәһәттән әлеге көндә Башҡортостан Республикаһында старт алған "Үҙ йортом" тигән аҙ ҡатлы торлаҡ төҙөлөшө программаһын хупламайынса булмай. Мин быны башта сәйәси алдаштырыу, тип кенә уйлағайным. Әммә йәш ғаиләләрҙең торлаҡ фондында йорт һайлауҙарын үҙ күҙҙәрем менән күргәс, ышанмайынса булдыра алманым. Был, әлбиттә, хан һарайҙары түгел, әммә ябай халыҡ, йәш ғаиләләр өсөн бына тигән бүләк булып тора. Мин йәш ғаиләнең, йәшәр ере булмағанлыҡтан, тегендә, бында күсеп йөрөү ыҙаларын үҙемдән беләм. Хатта йорттоң эсе тулыһынса эшләнеп бөтөлмәгән хәлдә лә ҡыйыҡлы булыу - иҫ киткес бәхет ул. Һинең үҙ ихатаң, үҙ ереӊ буласаҡ. Ә был донъяла ерҙән дә ҡиммәтерәк әйбер юҡ. Тағы ла шул: бынан бер-ике йыл элек кешеләр ер участкаларын, һатып, аҡса эшләр өсөн алһа, бөгөн, нигеҙҙә, йорт төҙөү өсөн ала. Һәм ысынлап та күп ерҙә төҙөлөш бара ла инде.

### Ә ауыл кешеһендә ер тойғоһо юғалды

80-90-сы йылдарҙа башланған ер реформаһы колхоз ерҙәренә лә барып етте. Ер кодексы буйынса 2010 йылдың 1 ғинуарына тиклем пай ерҙәрен таратып бөтөү ҡаралған. Мин был күренеште улай уҡ дөрөҫ түгел, тип иҫәпләйем. Ер реформаһы бының менән генә туҡталып ҡалмаясаҡ, һаман дауам итәсәк әле ул. Бөгөн ер ауыл хужалығы продукцияһы етештереү объекты түгел, ә бары тик сауҙа әйбере, йәғни аҡса эшләү сараһы булып тора. Бына был барыһы ла ҡурҡкан һөҙөмтә ине һәм ул тормошҡа ашты ла. Ысынында иһә, беҙҙә ер ауыл хужалығын үстереү сығанағы булып торорға тейеш. Бөгөн ауыл кешеһе ерҙе шәхси мөлкәте, йәшәр урыны, тыуған ере, тип күрмәй. Шуға күрә лә бер йәлләүһеҙ һата, шуның менән үҙенең ерһеҙ ҡаласағын уйлап та бирмәй. Ғөмүмән, уның ергә ҡарата мөнәсәбәте бөтөнләй үҙгәрҙе. Ул аяҡ аҫтында ятҡан ер менән шөғөлләнеү урынына, ситкә китеп, башҡа өлкәлә эшләүҙе хуп күрә. Хәҙер ул, элекке кеүек, күпләп мал да тотмай, сабынлығын да тәрбиәләмәй. Тәбиғәт ҡосағына сығып, хатта вайымһыҙ рәүештә сүп-сарын ташлап китә. Ә ҡала халҡы, киреһенсә, ергә һаҡсыл ҡарай башланы, ер ҡәҙерен аңланы. Элек бер кемгә лә кәрәкмәгән баҡса участкалары бөгөн алтынға тиң ҡиммәткә әүерелде. Бөгөн ҡала янында урынлашҡан баҡса участкаларын ҡараһаң, уларҙың ни тиклем тәрбиәле булыуын күрәһең. Элек беҙ ауылдарға килеп, ошондай күренешкә һоҡлана инек...

***Бөгөн фатир һатып алыуға ҡарағанда йорт төҙөп сығыу күпкә отошло. Шәхси йорт төҙөгән саҡта сығымдар, нигеҙҙә, төҙөлөш материалдарына, ер участкаһына һәм инженер селтәрҙәренә китә. Шуға ла, ҡабатлап әйтәм, үҙ йортоңдо төҙөү арзанға төшә. Беренсенән, үҙең өй һалғанда туғандарың ярҙам итә, арзан хаҡҡа ғына төҙөүсе бригадаларын да ялларға була. Икенсенән, үҙеңә төҙөгәс, тиҙерәк башҡарып сығыу яғын ҡарайһың, йәғни тиҙ срокта өйлө була алаһың.***

### Йәштәрҙең дипломы бар, белеме юҡ

Бөгөн юғары уҡыу йорттары белгестәр әҙерләмәй, улар бары тик эшкә килеп нимәләр өйрәнергә хыялланған дипломлы егет һәм ҡыҙҙарҙы уҡытып сығара. Һүҙ юҡ, студенттар биш йыл буйы лекцияларға йөрөй, имтихандарын тапшыра, әммә былар ҙа һәм дипломдарындағы билдәләр ҙә әле уларҙың белем кимәле тураһында һөйләмәй, уларҙың алған белеме уҡыу йортон тамамлағас та производствола эшләп китә алыу һәләте менән генә баһалана. Хәҙерге быуын студенттары эшкә урынлашҡанда: "Миңә яраҡлы вакансия бармы һәм һеҙ миңә күпме эш хаҡы түләйәсәкһегеҙ?" - тигән ике һорауҙы бирергә ярата. "Һин нимә эшләй беләһең?" - тигән һорау уларҙы ныҡ аптырашта ҡалдыра. Улар быға: "Мин һеҙгә эшкә киләм дә, һеҙ миңә өйрәтәсәкһегеҙ", - тип яуаплай. Иң күңелдә ҡырғаны шул: бөгөнгө йәштәр "Бер нәмә лә эшләй белмәйем" тип әйтергә тартынмай. Бөгөн хатта шәхси предприятиелар ҙа ҡайҙалыр газ йәки нефть тармағында эшләп, тәжрибә туплаған белгестәрҙе алырға тырыша. Әммә ул урындарҙа ла бит урамдан килеп ингән кешене алмайҙар, һәр ерҙә лә кәмендә биш йыл эш тәжрибәһе булыуҙы талап итәләр. Яңы ғына уҡыу йортон тамамлаған дипломлы йәш белгес, тимәк, шәхси ойошмала эшләү өсөн ҡайҙалыр икенсе урында тәжрибә тупларға тейеш була.

Мин дә, шәхси предприятие етәксеһе буларак, әҙер булмаған белгестәрҙе эшкә алырға теләмәйем. Миҫал өсөн әйтеп үтәм. Беҙ бер уҡыу йортонан ҡыҙыл дипломға бөткән ике сығарылыш студентын һайлап алдыҡ. Мин уларға ер участкаһының сиктәрен билдәләп, документтар әҙерләргә ҡуштым. Бер ай эсендә улар миңә бер генә ҡағыҙ ҙа килтереп һала алманы. Мин үҙем һөнәрем буйынса архитектор һәм, нигеҙҙә, етәксе булып эшләгән кеше буларак, бындай документтарҙы бер ваҡытта ла эшләгәнем булмаһа ла, ултырҙым да, ҡырҡ минут эсендә әҙерләп тә ҡуйҙым. Юғары белем алған белгес ниндәй генә өлкәгә килһә лә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә эштең айышына төшөнөргә һәм үҙ алдына эшкә өйрәнергә тейеш. Үҙе белмәгәндәрҙе тәжрибәле белгестәр менән кәңәшләшеп, уларҙан һорашып үҙләштерергә тейеш. Бөгөн элекке совет ваҡытындағы кеүек, йәш белгесте кемгәләр беркетеп ҡуйыу кеүек әйбер юҡ. Һәр кем үҙе өсөн тырыша. Шулай итеп, бөгөнгө йәш белгес эшкә урынлаша алмай йөрөй ҙә инде. Миҫал өсөн яңыраҡ ҡына булған хәлде һөйләйем: әле генә диплом алған йәш егет эш һорап килгән. "Кейеменә ҡарап ҡаршы алалар" тигәндәй, ҡолағына плеер ҡолаҡсындары тығып, шорты кейеп алған был егеткә эш тәҡдим итеү түгел, эш биреүселәргә ҡарата шундай мөнәсәбәт күрһәткәне өсөн уның менән һөйләшеп тороуҙың да кәрәген тапманым.

### Йәштәрҙең төрлөһө бар…

Баланың киләсәктә кем булыуы, ҡайҙа эшләргә теләүе мәктәптән үк башланырға тейеш. Әгәр уҡыусы үҙенең буласаҡ һөнәрен күҙ алдына килтерһә, уның алдында ҡайһы уҡыу йортона барырға тигән һорау тормаясаҡ. Ә беҙҙә егеттәр әрмегә бармаҫ өсөн йәки ҡулына ниндәй ҙә булһа диплом алыу өсөн генә юғары уҡыу йортона инә. Һәм шулай уҡ ата-әсәһенең күҙ көйөгө булмаҫ өсөн генә эшкә урынлаша. Бөгөнгө йәштәр эштән ғаилә именлеген тәьмин итеүсе килем сығанағы булған төп эшмәкәрлек төрө икәнен аңламай. Улар эшкә бары тик көн үткәрер өсөн, әммә яҡшы эш хаҡы алыр өсөн йөрөй. Әлбиттә, бөтә йәштәрҙе лә вайымһыҙҙар, тип әйтеп булмай. Бөгөн башҡорт йәштәренең дингә килеүе ҡыуандыра. Улар өлкәндәргә ҡарап, эсеп, эшһеҙ ятырға теләмәй, хаҡ юлға баҫып, үҙҙәрен лайыҡлы шәхес итеп күрһәтеү яғындалар. Эшҡыуарлыҡ өлкәһендә лә мосолман ир-егеттәре күпләп күренә башланы. Элек совет заманында йәштәр мине партия БАМ-ға ебәрҙе һәм мин уларҙың ышанысын аҡларға теләйем, тип эшләһә, бөгөн Ислам динен килгән йәштәр Аллаһы Тәғәлә ризалығына өлгәшер өсөн уның рәхмәтенә шөкөр ҡылып, уның ҡушҡандарын теүәл үтәүҙе, намыҫлы тормош юлын үтеүҙе маҡсат итеп ҡуя.

**Шулай итеп…**

**Эшҡыуарлыҡ өлкәһенә ҡағылған һөйләшеүебеҙ, бүтәнсә юҫыҡ алып, күпкә мөһимерәк мәсьәләләр күтәреп, тәрәнгәрәк төшөп китте, ахыры. Был аңлашыла ла. Ер проблемаһы күптән өлгөрөп еткән тема булһа, ниндәй генә өлкәне алып ҡараһаҡ та, йәш белгестәрҙең белем һайлығы шулай уҡ беҙҙе борсоуға һалған мәсьәләләрҙең береһе. Ә нисек беҙгә был проблемаларҙы хәл итергә? Әлбиттә, иманға килеп. Шул саҡта беҙ рухи ҡиммәттәрҙең матди ҡиммәттәрҙән өҫтөн булыуын аңларбыҙ, тыуған ер ҡәҙерен тойорбоҙ, ғилем тупларға ынтылырбыҙ, аңлы, уйлы, рухлы халыҡ булыр өсөн. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

✓ *Никотин бик әҙ генә ваҡытҡа ҡан тамырҙарын киңәйтеп, мейе күҙәнәктәрен ҡан менән тәьмин итеүҙе көсәйтә. Артабан ҡан тамырҙары киҫкен ҡыҫыла, һөҙөмтәлә мейелә төрлө ауырыуҙар барлыҡҡа килә.*



*ИНТЕРНЕТТАН*

# ҺӘР ИКЕНСЕ РӘСӘЙЛЕ...

## сирле икән дә



● РФ Һаулыҡ һаҡлау министры Татьяна Голикова дауаханаларҙа ришүәт алыу туҡтаясаҡ, тип белдерә. Быға тиклем һаулыҡ һаҡлау системаһындағы 40 процентҡа тиклемге түләүҙәр законһыҙ алынған. Пациенттарҙан анализдар, УЗИ, рентгенография һәм башҡа тикшереүҙәр өсөн аҡса алыу ғәҙәткә ингән, ә уларҙың барыһы ла бушлай эшләнергә тейеш. Хәҙер закон боҙоуҙар күҙәтелгән осраҡта Росздравнадзорға ғариза ебәрелә, ундағы мәғлүмәттәр дөрөҫләнһә, эш хоҡуҡ һаҡлаусылар ҡулына күсәсәк.

● Росздравнадзор наркотик препараттар исемлеген тулыландырырға тәҡдим итә. Быға тиклем законһыҙ рәүештә наркотиктарҙы алыштырыусы сифатында ҡулланылған ҡайһы бер дарыуҙар был исемлеккә индереләсәк. Әлегә "ҡара исемлеккә" эләккән дарыуҙар билдәләнмәгән. Бында, моғайын да, составында наркомандар дезоморфин яһау өсөн ҡулланған кодеин булған дарыуҙар индереләр.

● Баҡтиһәң, эшләп йөрөүсе рәсәйлеләрҙең һәр икенсеһе ауырый, әммә был турала үҙе белмәй икән. 2006-2008 йылдарҙа үткән дөйөм диспансерлаштырыу һөҙөмтәләре шулай. Уның сиктәрендә 13,5 миллион граждан тикшерелгән. Иң киң таралған сирҙәр исемлегендә эндокрин системаһы ауырыуҙары һәм матдәләр әйләнеше боҙолоуы беренсе урында тора - улар менән 532 мең кеше ауырый. 422 мең эшселә йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙары, 329 мең кешелә бәүел ҡыуығы системаһы сирҙәре асыҡланған. Бынан тыш, насар шарттарҙа йәшәүсе һәм етем балалар араһында үткәрелгән медицина тикшереүҙәренең һөҙөмтәләре лә билдәләнде. Бындай балаларҙың һәр береһенә уртаса 2,8 ауырыу тура килә. Психик сирҙәр 19,2 процент балаларҙа асыҡланһа, һөйәк-мускул системаһы сирҙәре 13,1 процент, ә аш һеңдереү ағзалары сирҙәре 12,2 процент балала бар.

● Һуңғы йылдарҙа һыу сәсәге менән ауырыусы рәсәйлеләр һаны 1,8 тапҡырға артҡан. Йыл һайын илдә был ауырыуҙың 900 мең осрағы теркәлә. Был мәғлүмәттәр Мәскәүҙә үткән педиатрҙарҙың Европа конгресы ваҡытында белдерелгән. Табиптар әйтеүенсә, был алама сир менән зарарланыу ҡурҡынысы хәҙер күберәк, ә бала саҡта уны үткәреп ебәреүселәр аҙаҡтан тимерәү менән яфалана икән. Һыу сәсәге менән көрәшеүҙең иң ышаныслы юлы - балаларға вакцинация үткәреү.

● Рәсәй туристик индустрия союзы белдереүенсә, Рәсәй туристары өсөн иң хәүефле ил булып Мысыр (Египет) тора. 2006 йылдан тап ошо илдә рәсәйлеләр менән төрлө бәхетһеҙ осраҡтар күберәк теркәлгән. Был йылдар эсендә Мысырҙа 30 инцидент булған, унда 201 Рәсәй гражданины үлгән һәм яраланған. Рейтингтың икенсе баҫҡысын Украина биләй, унда 54 турист үлгән. Был исемлеккә шулай уҡ Таиланд, Һиндостан, Ҡытай, Польша, Болгария, Израиль, Вьетнам һәм Италия ингән.

*ЙӘН ӘРНЕҮЕ*

**Был ҡот осҡос ғәҙәттең - тәмәке тартыуҙың кешеләр араһында шул тиклем ныҡ таралғанын нисек аңларға? Уйлап ҡараһаң, был ғәҙәттең бер ниндәй файҙаһы ла, ҡыҙығы ла юҡ бит. Тәмәкесе күкрәгенә төтөн тултыра ла, шул төтөндө киренән сығара. Ошо хәлдән һуң кешелә һәм уның тирә-яғында һаҫы еҫ кенә ҡала... Хәҙер инде ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ошо кәсепте үҙ итте. Урамда тәмәкеһен бармаҡ араһына ҡыҫтырып, төтөн борхотоп китеп барған, йә мәктәптә йәшереп кенә усына йомарлап, тәмәке һурған ҡыҙҙарҙы күреп, шаҡ ҡатаһың. Дөйөм ятаҡта үҙебеҙ менән бергә йәшәгән ҡыҙҙарҙың тәмәке тарта-тарта киләсәк тураһында гәпләшеүе бигерәк тә йөрәккә шом һала. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың организмы нескә, уға никотин икеләтә күберәк зарар килтерә бит. Ошоно ҡыҙ бала белмәйме икән ни? Белһә лә, үҙенең һаулығына, киләсәгенә вайымһыҙ ҡараймы? Ошо һорауҙарымды мин XXI быуатта йәшәгән йәштәш ҡыҙҙарға төбәп, уларға хат яҙып ҡарарға булдым.**

# ТӘМӘКЕ ҠОЛО...

## XXI быуатта йәшәгән ҡыҙға асыҡ хат

**Тәмәке тартҡан ҡыҙ!** Һин XXI быуатта йәшәйһең. Тормош үҙгәрә, һин дә унан артта ҡалмаҫҡа, заманға яраҡлашырға тырышаһың. Тәмәке тартыу модала, тип иҫәпләп, бына һин дә тәмәкегә ылығып киттең. Әйҙә, бергәләп уйлайыҡ әле. Был ҡот осҡос ҡылыҡтың "модалы" булыуына һине кем ышандырҙы? Кем һине был упҡынға этәрҙе?

Был ғәҙәтең нисек башланғайны? Эйе, ваҡыттарын күңелле үткәрергә ятраҡан төркөмдәрҙә һыра һәм тәмәке менән мауығалар. Һин дә ваҡытыңды "күңелле" үткәреүселәрҙән, күрәһең. Ундай компанияла егеттәр тәмәке тартҡан ҡыҙҙар менән үҙҙәрен бәйһеҙ тотоусан. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡыҙҙар егеттәрҙең шундай мөнәсәбәтенә ҡарап, үҙҙәрен популяр тип иҫәпләй. Ысынында, улар егеттәр өсөн уйынсыҡ ҡына. Эйе, һин дә, тәмәке тартҡан ҡыҙ, егеттәр өсөн ваҡытлы уйынсыҡ ҡына. Һин үҙ-үҙеңде хөрмәт итмәйһең, үҙеңдең шәхесеңде кәмһетәһең. Һин заман балаһы түгелһең, ә еңел уйлаусы, бер ҡатлы ҡыҙһың.

Ә һин киләсәгеңде күҙ алдыңа килтерә алаһыңмы? Мин һиңә хат яҙыр алдынан табиптарҙың тәмәкенең зыяны тураһындағы китаптарын уҡыным һәм һинең киләсәгеңде һүрәтләй алам. Әгәр ҙә инде мин яҙғанға ышанмаһаң, тәмәке тартҡан олораҡ ҡатындарға күҙ һал.

Тәмәкенән һинең тауышың ҡарлығасаҡ, әкренләп тештәрең һарғайып, серей башлаясаҡ. Бит тиреһе ер төҫөн алыр. Еҫ һәм тәм һиҙеү рецепторҙары насарайыр. Моғайын, үҙең дә тәмәкеселәр ауыҙынан һәм кейеменән һаҫы еҫ килгәнен һиҙгәнең барҙыр. Ошо еҫ арҡаһында һине таныштарың урап уҙасаҡ. Төнө буйы йүткереп, башың ауыртып яфаланырһың. Тән тирең йыйырсыҡланыр, ҡороға әйләнер. Бына һинең тәмәке тартыуыңдың ысын хаҡы. Һин насар ғәҙәтеңдең бындай эҙемтәләре менән үҙеңә иғтибар йәлеп итеү түгел, ә, киреһенсә, егеттәрҙе ситкә генә этәрәсәкһең.

Күп тапҡыр сәйнәлгән миҫалдарҙы һиңә тағы бер тапҡыр иҫеңә төшөрөүҙең кәрәге бармы? Бер тамсы никотиндың хатта атты үлтергәнен бөтәһе лә белә. Ләкин һин ат түгелһең бит, ә кешеһең. Көнөнә 20 тәмәке тартһаң, ғүмереңде 8-12 йылға ҡыҫҡартаһың, тигән һүҙ. Англия табиптары әйтеүенсә, һәр тартылған тәмәке кешенең 15 минут ғүмерен "урлай". Америка кардиологтары йөрәк өйәнәгенән үлгән кешеләрҙең уртаса йәше - 67, ә тәмәке тартҡандарҙың - 47, ти. Әлбиттә, был һандар һине ҡурҡытмай. Һиңә әле 18, ә 47-гә тиклем ваҡыт күп әле. Ә шулай ҙа уйлан...

Никотин - ул наркотик. Тимәк, йылдан-йыл һиңә ҡыйыныраҡ була барасаҡ. Тәмәке ҡан тамырҙарын тарайта, ә йөрәгең баҫым менән эшләй башлаясаҡ. Һин тәмәкеңде тоҡандарҙың, артабан билдәле схема ҡабатлана: никотин бик әҙ генә ваҡытҡа ҡан тамырҙарын киңәйтеп, мейе күҙәнәктәрен ҡан менән тәьмин итеүҙе көсәйтә. Артабан ҡан тамырҙары киҫкен ҡыҫыла, һөҙөмтәлә мейелә төрлө ауырыуҙар барлыҡҡа килә. Никотин шулай уҡ һинең нервылар, тын алыу системаларыңды, аш һеңдереү ағзаларын, енес биҙҙәрен зарарлай. Һин тәмәке тартмаған әхирәттәреңдән 3-4 тапҡырға йышыраҡ ауырыясаҡһың.

Социологтар һорау алыу үткәргән. "Ниңә һин тәмәке тартаһың?" тигән һорауға ҡыҙҙарҙың 60 проценты "Тәмәке модала", тип яуапламаһа, 40 проценты - "Егеттәргә оҡшар өсөн" тип яҙған. Ярай, шулай ҙа булһын, ти. Егеттәргә оҡшарға теләмәгән ҡыҙ юҡтыр ул донъяла. Ә егеттәр был турала нимә уйлай икән? Бөтәһе 256 егеткә ошондай һорау бирелгән һәм өс яуап варианты тәҡдим ителгән.

1. Һинең компанияңда ҡыҙҙар тәмәке тартамы? Һин быға нисек ҡарайһың?

Егеттәрҙең 4 проценты - ыңғай, 54 проценты - вайымһыҙ, 42 проценты тәмәкегә ҡаршы булған.

2. Һин дуҫлашып йөрөгән ҡыҙ тартһа, быға риза булыр инеңме?

Егеттәрҙең 1 проценты - эйе , 15 проценты - миңә барыбер, 84 проценты - риза түгелмен, тип яуап биргән.

3. Ҡатыныңдың тәмәке тартыуын теләр инеңме?

Был һорауға иһә 256 егеттең икеһе генә вайымһыҙ ҡалған. Ә ҡалғандары ҡәтғи ҡаршы булған.

**Лиана ВӘЛИУЛЛИНА.**



### Ишеткән һәм күргәндәрҙән:

... Автобуста бер ҡыҙ икенсе ҡыҙға аҡыл өйрәтә: "Ҡыҙҙар кинолағы актрисалар кеүек, тәмәкене матур итеп тотоп, матур итеп һура белһә, бик заманса күренә".

... **Дөйөм ятаҡ. Беренсе курс студенты Роза:** "Минеңсә, тәмәке тартыу - ул аралашыу сараһы. Беҙҙең ятаҡта ҡыҙҙар йыш ҡына тартырға, һөйләшергә йыйылалар. Ә улар араһында тартмай, тик кенә ултырыу уңайһыҙ, үҙеңде ала ҡарға итеп тояһың".

**Ә бына 25 йәшлек ҡыҙ нимә һөйләй:**
"Мәктәптә үк тәмәке тарта башланым. Яратҡан уҡытыусыма оҡшарға теләгәйнем, уйындан уймаҡ сыҡты, тәмәкегә бәйлелек барлыҡҡа килде. Бер көн көҙгөгә килеп ҡараһам, унда ҡарт, йәмһеҙ ҡатынды күрҙем. Башҡаса тартмаҫҡа булдым. Ләкин ике сәғәттән һуң тағы тәмәкегә үрелдем. Нисек кенә тырышһам да тәмәкене ташлай алманым".

**Ә быныһы 20 йыл тартҡан ҡатындың һүҙҙәре:**
"Тәмәкене бер нисек тә ташлай алмайым. Хроник бронхит менән ауырыйым. Күптән түгел ҡыҙымдың сумкаһында тәмәке таптым. Ғүмерҙә шулай илағаным юҡ ине. Уны әрләргә хоҡуғым юҡ, сөнки үҙем насар өлгө күрһәттем".

**Тәмәке тартыусы ҡыҙ!**
Ә хәҙер мин һинең ни өсөн тартҡаныңды белгем килә. Тәмәке тартып, үҙеңде модалы итеп хис итәһеңдер, шулаймы? Әммә һин нимә эшләгәнеңде үҙе лә аңламаған кешеләрҙең береһе. Тәмәке тартыу үҙеңә ҡарата енәйәт ҡылыу, үҙ-үҙеңә ҡул һалыу. Һин киләсәктә был һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөнә инанырһың, ләкин һуң булыр.

**Уйлан, ҡыҙ бала! Һуң булмаҫ борон, дөрөҫ юлға баҫ. Тәмәке һалған тоҙаҡҡа эләгә күрмә. Никотин ҡоло булма.**

ТӘҮБӘ




# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

**Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...**

### 4-се һабаҡ: "Яңынан йәшәй башларға"

Тәүбәгә килгәнемдең өсөнсө көнөндә апайымдар мунса яҡты. Тән һәм йән сафландырыуҙың был ләззәтле ысулын яҡын күрәм һәм һәр саҡ мунсаның иң беренсе быуына барырға яратам. Был юлы ла шулай иттем. Ҡыҙған табалай эләүкәгә менеп ҡунаҡланым да, ташҡа сүмес менән һыу һиптем. Элек ҡоро эҫе пар тәнемә килеп һуғылыу менән тирләй башлай, тәндән һыу бөртөксәләре атылып сыға торғайны. Ни ғәжәптер, был юлы тәүҙә өшөгән кеүек булып, тәнем тартышып алды, аҙаҡ маңлайым еүешләнде, шунан һуң ғына тирләй башланым. Миндеккә лә үрелмәнем, тын быуылғансы ултырам да, солансаға сығып һыуынып алам, тағы ла эләүкәгә менәм. Тәнемдән тир сығып бөткәнсе тиерлек шулай иттем, һуңынан эләүкәгә тирем ағып төшкән урынды, ҡыҙыҡ өсөн типтер инде, есҡәп ҡараным. Унан дегет тиһәң, дегет түгел, кәрәсиндекенә лә оҡшамаған, машинаның двигателенә ҡойоп эшкәртелеү үткән әсе май еҫе килә. Артабан да ундай ҡара төҫтәге үтилләнгән "двигатель майы" йыл һуҙымында минең тәндән тир менән ҡуша сығасаҡ әле. Һуңынан наркологтарҙан һорашып белештем. Баҡтиһәң, араҡы составындағы эфир майы ашҡаҙанда эшкәртелмәйенсә, бөтөн тәнгә таралып, быуындарға, тире менән ит араларына, хатта елек һөйәгенең эсенә инеп тула икән.

Донъяла иң ҙур рәхәтлек кисереү тойғоһо нимә ул, тип һораһалар, мин, мунсанан сығыу, тип яуап бирер инем. Эҫеһенә түҙеү ауыр, ә сығыуы... Тап шул саҡта яңынан тыуғандай хис итәһең үҙеңде. Минең хәлдә бигерәк тә. Етмәһә, өс көн элек үлеп, яңынан тыуған кеше өсөн. Саҡ-саҡ ҡына йөрәктең өлпәлдәп тороуын иҫәпкә алмағанда, минән дә бәхетле кеше юҡ ине шикелле был донъяла. Һәр хәлдә, ҡотолғоһоҙ үлемдән ҡалған кеше, Хоҙай әмере менән тере ҡалһа, шулай уйлайҙыр. Мин ошоға тиклем кирегә бөткән атеист инем. Аллаһы Тәғәлә өс тапҡыр иҫкәртеү ебәреп, мине алып ҡалды, ул минә үҙе килде. Ололарҙан ишетеп кенә белгән доғаларҙы уҡып йөҡлап киттем.

Дүртенсе көндә шаулап торған ҡалаға кире ҡайттым. Аяҡтарым асфальтты тойоу менән күңелгә был донъяны ятһыныу тойғоһо инеп урынлашты. Ҡала миңә шул тиклем яҡын, таныш ине, хәҙер алыҫ һәм ят. Кешеләре лә әллә нисектәр, сәйерҙәр. Бер кемгә лә иғтибар итмәҫкә, күтәрелеп ҡарамаҫҡа тырышып өйгә ҡайттым. Мин йәнемдә ус эсенә алып, күтәрелеп сығып киткәндә буп-буш ҡалған фатирға йән ингән. Ауылға тип киткән улдарым әсәләре менән яңы ғына килеп төшөп, мәж килеләр. Улар менән иҫәнләшкәс, үҙемдең бүлмәгә үттем. Һәр саҡтағыса, бәләкәй улым йүгереп килеп инеп, миңә һырынды. Иң тәүҙә елкәмә менеп ултырҙы, аҙаҡ алдыма ятты. Уны үҙемсә яратып, иркәләнем, әммә күтәрелеп күҙҙәренә ҡарай алманым. Улым тегеләй итте, былай һырпаланды, ахыр, күңелем торошон аңлап булһа кәрәк, бүлмәмдән сығып китте.

Иртәгәһен эшкә барғас та, үҙемдең күптән өйрәнеп бөткән коллективым ят һымаҡ ине. Миңә ни булғандыр, берәүҙең дә күҙенә тура ҡарай алмайым, ҡарамағас, һөйләшергә һүҙ ҙә ялғанмай. Бер нисә дуҫыма, танышыма шылтыратырға уйланым да, кире һүрелдем. Хәйер, улар менән нимә тураһында һөйләшмәк кәрәк. Икенсенән, шылтыратыуым уларға сираттағы күңел асыуға сигнал ғына буласаҡ.

Күңелем буп-буш, дыңҡылдап торған мискә кеүек. Үҙем, гүйә, ярға ырғытылған балыҡ һымаҡмын. Балыҡ тигәндән, кире һыуға төшөүем - элеккесә күңел күтәрерлек йөҙ грамм инде. Тәүҙә йылғаның ситенә генә төшөп, сирҡаныс алаһың, аҙаҡ тубыҡтарға тиклем кисәһең, артабан бил тинелтем... Ә минең хәлем шулай: ярҙа оҙаҡ ятһам, кибеп тонсоғорға тейешмен, шул уҡ ваҡытта кире һыуға ла төшә алмайым. Ярҙа ла ҡалырға тейеш түгелмен.

Рюмкаға үрелеп, йәғни ярҙан торған килеш кенә һыу алып ҡорғаҡһыған күңелде яҙыу тураһында хәҙер инде уйлап та бирмәйем. Эштәгеләр ҙә, өйҙәгеләр ҙә миндәге сәйер үҙгәреште тойоп алды. Айныҡ йөрөгәнемде күреп аптырайҙар ине булһа кәрәк. Һәр саҡ күңелле, юҡ ерҙән мәҙәк табып һөйләп йөрөгән кешенең балтаһы һыуға төшөүе уларға аңлашылып та бөтмәйҙер. Күңелгә шундай уй ҙа килде: әгәр ҙә улар минән төнөлөп, күптән ҡул һелтәгән булһа? Был бит ҡот оскос минең өсөн.

Тимәк, миңә өр-яңынан йәшәй башларға, мөнәсәбәттәрҙе өр-яңынан ҡорорға, ҡалыптарҙы ватырға, ҡыҫҡаһы, тәпәй баҫҡан бала кеүек, бар нәмәгә яңынан өйрәнергә, һәр күренешкә айныҡ күҙ менән ҡарарға кәрәк. Башҡаса юл күрмәйем. Ярҙарға кибеп барған балыҡ кеүек, иртәнге ысыҡ төшкәнен көтәм.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

**Саф намыҫлы бул**

"Йәшәргәме, йәшәмәҫкәме - бына һорау нимәлә". Шулай ти Гамлет үҙенә ҡарата ышанмауһанлыҡ белдергән һәм үҙ-үҙе алдында аҡланыу сағылған билдәле монологында. Ысынлап та, ҡайһы саҡта беҙ ҙә Гамлет осраған тормош хәлдәре алдында ҡалабыҙ. "Ғәҙеллек - аҡыл китабының тәүге бүлеге", - тип яҙған Томас Джефферсон. Был йәшәйештең һәр дәүерендә, һәр ҡайҙа, һәр кем өсөн хәҡиҡәт булып торған. Эске йәки тышҡы хәҡиҡәтте күтәреү өсөн көрәш бер ваҡытта ла еңел бирелмәгән. Әгәр ҙә быны нисек эшләргә кәрәклеген белген килһә, бары эште башларға ғына кәрәк.

"Үҙеңде танып бел" - был һүҙҙәр Боронғо Грецияла Дельфий оракулы ҡорамының фронтонына яҙылған була. "Ғәҙеллек һәм ихласлыҡ һеҙҙең төп тормош ҡағиҙәһе булһын, - тип яҙған Конфуций. - Нимәне булһа ла танып белһәң, аңлағаныңды һаҡла, әгәр ҙә юҡ икән, танып белә алмауыңды таны - был ғилем булып тора ла инде". Ә Лао-цзы 2500 йыл ашыу элек былай тип яҙған: "Кем бүтәнде танып белә, ул аҡыллы кеше; кем үҙен танып белә, ул уҡымышлы кеше". Бөтә фәйләсүфтәр һәм аҡыл эйәләре лә, ғәҙел булырға кәрәк, шул саҡта барыһы ла үҙенән-үҙе килеп сығыр, тигән бер хәҡиҡәттән башлаған. Улар бөтә кешеләр ҙә бер үк уй-теләктә булыуын, йәғни һөйөүгә, азатлыҡҡа һәм ихтирамға мохтажлығын һәм тормош асылын аңларға теләүен белгән. Бүтән кешеләрҙең үҙ-үҙен тотошон аңлауға асҡыс эҙләп, эске донъяңа күҙ һала белергә кәрәк, шул саҡта үҙ йөрәгеңдең йәшерен төпкөлдәрен тикшереүгә лә батырсылығың етәсәк. Әммә кемебеҙ йөрәк төпкөлөнөң ҡайҙа урынлашыуын белә икән? Күпмебеҙ тойомлау аша ғына белгән әйбергә тотонмаҫҡа ғәҙәт иткән? Ә бит үҙ тойғоларыбыҙҙы танып белергә ынтылғанда был иң дөрөҫө һымаҡ тойола. Тышҡы донъяның ығы-зығыһы беҙҙе шул тиклем албырғата, беҙ, ҡағиҙә буларaҡ, һәр ваҡыт хәҡиҡәтте белгән эске тауышҡа ҡолаҡ һалырлыҡ хәлдә булмайбыҙ.

Эске тауышыңа ҡолаҡ һалмаһаң, был һәләтте юғалтып, үҙеңә лә, унан һуң бүтән кешеләргә лә ике йөҙлөлөк күрһәтә башлауың да бар. Әйтәйек, бөгөн иртән ҡатының һиңә: "Кәҙерлем, ни өсөн һин кисә киске ашҡа һуңланың?" - тип һораны, ти. Төрлө оҙайлы аңлатыуҙарҙан арыныр өсөн һин гонаһһыҙ ғына алдашыу һүҙе әйтәһең. Йәки начальнигың, киләһе йылдарҙа эшкә сыға алмаҫһыңмы, тип һорай, ти. Һин "Юҡ" тип әйтергә ҡурҡаһың, ә ризалашыу, тимәк, ҡыҙыңдың тыуған көнөндә була алмау, тигән һүҙ. Йәки дуҫың һинең саманан тыш күп эсеүеңә хафалана. Быны танырға оялып, һин шунда уҡ көлкө аша уның һүҙҙәрен кире ҡаға башлайһың - бына һиңә тағы ла бер гонаһһыҙ алдашыу, йәғни беҙҙең менән хәҡиҡәт араһында үсеп килгән стенаға тағы ла кирбес һалаһың.

Былдай хәлдәр һәр кем менән булып тора, шулаймы? Беҙ үҙебеҙҙе алдай башлаһаҡ, үҙебеҙҙең ысын тойғоларабыҙға ҡарата ла ҡаршылыҡ күрһәтә башлайбыҙ.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЯРАҒАН ҺӘМ ЯРАМАҒАН ҠАҒИҘӘЛӘР



**Күңел тыныслығы өсөн түбәндәге ун ҡағиҙәгә буйһоноу фарыздыр:**

- Тейешһеҙ һүҙ һөйләмә.
- Тәүбә ит.
- Аллаһҡа шөкөрана ҡыл.
- Көсһеҙҙәргә ярҙамсыл бул.
- Бар ғәмәлеңде "бисмиллаһ" менән башла.
- Йомарт бул.
- Таныш-белеш менән аралашып йәшә.
- Доғала бул, намаҙ уҡы.
- Хәләл ризыҡ менән йәшә.
- Булғанын әрәм-шәрәм итмә.

**Ошондай насар ғәҙәттәрҙән алыҫ бул:**

- Ялған һөйләү
- Һауаланыу, мин-минлек.
- Уғрылыҡ.
- Кемделер көйҙөрөү, борсоуға һалыу.
- Кемделер хәрәм юлға этәреү.
- Кешенән көнләшеү.
- Кеше менән бәхәсләшеү, ғәйбәт һөйләү.
- Һаранлыҡ.
- Эсеңдә асыу һаҡлау.
- Байлыҡҡа, юғары хакимлыҡҡа ынтылыу.
- Имандаштарыңа асыу тотоу.
- Кеше ҡайғыһына ҡыуаныу.
- Кеше байлығын үҙләштереү.
- Нәфсеңде тыймау.
- Һүҙеңдә тормау, күп ант итеү.
- Оятһыҙ һөйләшеү, кәрәкһеҙгә күп һөйләү.
- Аллаһтың язаһынан ҡурҡмау.

✓ *Ошо бер көнлөк кенә байрамды атҡарып сығыр өсөн ауыл тарихы, ер-һыу атамалары тураһында эҙләнеүҙәр, ауылдаштар тормошон яҡтыртҡан мәҡәләләр менән сығыш яһауҙар, башҡа әҙерлек эштәрен дә атҡарырға кәрәк.*



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ



# АУЫЛДАРҒА ЙЫШЫРАҠ ҠАЙТЫҒЫҘ,

## хәлдәрен белешегеҙ ауылдаштарҙың

**Ҡасандыр бер мәлдә һәр кем үҙенең ата-бабаларының үткән тормошо, тыуған төйәгенә ҡағылышлы теге йәки был хәл-ваҡиғалар, йыраҡ йәки яҡын туған-тыумасаларҙы барлау, ниһайәт, үҙ тамырҙары, ауыл шәжәрәһе, тарихы менән ҡыҙыҡһына башлайҙыр. Быңдай үтә ҡыҙыҡһынып эҙләнеүҙәр, шәжәрәләр төҙөү кеүек һәйбәт күренештәр үтеп киткән ҙур ваҡиға - Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуҙың 450 йыллығына арналған саралар осоронда айырыуса әүҙемләште. Инде хәҙер халыҡ араһында ярайһы уҡ танылыу ала барған "Ауылым шәжәрәһе", "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" осрашыуҙары республика сиктәрен артылып, башҡа төбәктәрҙә лә мәртәбәле сараларҙың иң ҡеүәтлеһенә әйләнә барыуы һөйөнөслө хәл.**

Ошо араларҙа ауылыбыҙ Кинйәкәйҙә шаулап-гөрләп "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" осрашыуын үткәреү күркәм сараларҙың тарала барыуына тағы бер дәлил. Тәүәкәлләгән - таш ярған, тигәндәй, имен-аман байрамды үткәреп, өҫтән оло йөк төшкәндәй хис итеп, көслө тәьҫораттар шауҡымына сорналып, әйтеп бөтөргөһөҙ бер кинәнес менән сараның маҡсатҡа ярашлығын, тәрбиәүи мөғәнәһенә тоғролоғон баһалап ҡарау ниәтендә ҡулға ҡәләм алдым әле.

Ҡайһы берәүҙәрҙең фекере буйынса, байрамды гөрләтеп үткәрер өсөн матди ярҙам етерлек икән, башҡа әллә ней көс талап ителмәй төҫлө. Әммә улай түгел шул. Ошо бер көнлөк кенә байрамды атҡарып сығыр өсөн төрлө матбуғат биттәренән ауыл тарихы, ер-һыу атамалары тураһында эҙләнеүҙәр, ауылдаштар тормошон яҡтыртҡан мәҡәләләр менән сығыш яһауҙар, башҡа мәшәҡәтле әҙерлек эштәрен дә атҡарырға кәрәк. Ошо юҫыҡтағы эштәр барышында тәү сиратта тыуған яҡтарыма, Әбйәлил тарафтарына ҡайтып, "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамында ҡатнаштым һәм ярайһы уҡ тәжрибә, фәһемле фекерҙәр туплап ҡайттым. Ҡыштың ыҙы-зығылы ғинуарының оҙайлы ялдары үтеү менән әхирәтем Гөлнара Зиннәт ҡыҙының шәжәрәһен төҙөүҙә ярҙамлашып, күренгән урынға олоғара белдереү элеп һәм ауылдаштарҙың тарихи әһәмиәткә эйә булған боронғо фотоларын йыйып, уларҙы яңыртып эшләтеү менән февраль айы ла үтеп китте. Ошо рәүешле мәж килеп йөрөүебеҙгә ҡарап, эшебеҙгә шик белдереүселәр ҙә булды. "Ҙур эш башланығыҙ, ай-һай, көрсөк заманалар килде, йырып сығыуы ауыр булмаҫмы?" ише һүҙҙәр, ырыялы ишаралауҙарға саялыҡ, һәре ныҡышмалыҡ менән яуаплап торғас, йәмле июнь айына ла аяҡ баҫтыҡ, шөкөр.

Әмәлгә ҡалғандай, байрам көнөнөң һалҡынса еләҫ тороуы ошоғаса эҫелә әлһерәп эшләп йөрөгән ауылдаштарға бер килке хәл керетте - дәрте тоҡанып киткән халыҡ дәррәү аҡланға ағылды. Аҡлан ауыҙына ингән ерҙәге Хөрриәт ҡапҡаһы аша үткәндә "Рәхим итегеҙ!", "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" тигән тәбрикләүҙәр, төрлө төҫтәге шарҙар һәм елберелбер килгән бәләкәй әләмдәр һәр ҡунаҡты сәләмләп ҡаршыланы. Сәхнә янын уратып, шау сәскәле яулыҡлы, йылт итеп торған калошлы инәйҙәр менән сигеүле түбәтәйҙә, орден-миҙалдарын сыңлатып дәртле атлаған бабайҙар һәм шат баласаға, йәштәр урынлашты. Дин юлында йөрөүсе Хәлитов Миҙхәт уҙаман йыйынға фатиха бирҙе.

Сәхнәгә бер-бер артлы Нурғәлиндар һәм Хисаметдиновтар тоҡомдары күтәрелеп, үҙ шәжәрәләрен бәйән итте. Нурғәлиндарҙың "Бәпес күреү йола"һын сәхнәләштереүен барыһы ла йотлоғоп ҡараны. Уларҙың йыр-бейеүгә ҡушып, бүләк тапшырыуҙары үҙе бер тамаша булһа, ихлас уйнауҙары менән нәҫел тамырының ныҡлығын, үҙ-ара татыулығын, берҙәмлеген күрһәтеп, бар халыҡты һоҡландырҙы. Артабан Хисаметдиновтарҙың шәжәрә ағаһы менән танышыу барышы йыр-бейеүгә, гармун, ҡурай моңдарына үрелеп алып барылды. Уларҙың нәҫел тамырҙарын барлағанда ауыл китапханаһы мөдире Ғафарова Рәзидә теге йәки был һорауҙар менән Өфө һәм Ишембай архивтарына мөрәжәғәт итеп, шәжәрә ағасын төҙөүҙә тарихи ерлектә, төүәл аныҡлыҡҡа өлгәшкәндәр - шул турала ла һөйләне Хисаметдиновтар.

Аш-һыу оҫталары әҙерләгән телде йоторлоҡ милли аштарҙан табындар һығылды, ә күҙҙең яуын алыр йәйғор төҫлө бәйләмдәр, мамыҡ шәлдәр, аҫалы балаҫ, сағыу ҡорамаларҙан, боронғо сигеүле таҫтар-таҫтамалдарҙан һәм өҫтәл селтәрҙәренән күҙҙәр ҡамашты. Ҡунаҡтар Нурғәлиндар тирмәһе менән айырыуса ҡыҙыҡһынды - бер-бер артлы боронғо еҙ тас, ҡомған, баҡырса, еҙ самауырҙар, өләсәй һандығы өҫтөнә өйөлгән балаҫ-кейеҙҙәр, биҙәкле ҡорама юрғандар ҡырында иҫтәлеккә фотоға төшөүселәр сиратҡа баҫты. Ә ҡайһы берәүҙәрҙе уҡалы елән, милли күлдәктәр, камзул, һаҡал һәм ҡашмауҙар ҡыҙыҡтырҙы. Дәрте ташып торған йәш-елкенсәк, бала-сағалар бағанаға үрмәләү, "тоҡ һуғышы", көйәнтәләп һыу ташыу, ҡалаҡҡа һалынған йомортҡаны ауыҙҙа тотоп йүгереү менән мәшғүл булған арала, ҙурҙар волейбол һуҡты, тоҡ кейеп йүгерештә һәм ҡыя ҡолғаға үрмәләп, үҙ көстәрен һынаны.

Ҡунаҡтарҙы ҡыҙыҡтырған, ә кинйәкәйҙәрҙә ярыш сәме уятҡан "Иң матур йорт", "Сәскәле баҡса", "Өлгөлө урам" стендтары янынан йәше-ҡарты өҙөлмәне. Был ярышта ҡатнашыусылар йорттарын, баҡса рәшәткәләрен, тәҙрә ҡапҡастарын яңыртып буяған, ихатаны, баҡсаларҙы тәртипкә килтергән. "Иң матур йорт" номинацияһында Хисаметдинов Илфаттың йорто еңеүсе булды, уға байрамдың бағыусыһы Радик Ғөбәйҙуллин саң һурҙыртҡыс бүләк итте. Байрамға килеүсе бер бала ла бүләкһеҙ ҡайтманы, улар өсөн бағыусыбыҙ Фәнүр Дәүләтбаев матур бүләктәр әҙерләгәйне.

Байрам һуңынан үҙүҙемә: "Маҡсатҡа ниндәй кимәлдә өлгәшелде һәм киләсәктә ҡайһы мәсьәләләргә өҫтөнлөк бирергә кәрәк булыр?"- тигән һорау ҡуйҙым һәм яуапты сарала ҡатнашыусы бер нисә ауылдашым фекере менән йөпләп ҡуйҙым: "Ғәҙәттә, төүгә ҡоймаҡ төйөрлө була, тигәндәй, бер аҙ китек ерҙәр күҙгә салынды. Әйтәйек, шәжәрәләре менән таныштырыусы ғаиләләргә бик аҙ ваҡыт бирелде, улар әҙерләгән шәжәрәләре хаҡында бик ҡыҫҡа ғына һүҙ тоторға мәжбүр булды. Ошо өлөштә ентекле итеп күрһәтеү ҡарап ултырған балаларға, йәштәргә тәрбиәүи йәһәттән отошло булыр ине,"- тип үкенес белдереүселәр булды. Киләсәктә был кәмселектәрҙе күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк булыр, тигән уйҙы хәтер янсығына төйнәп ҡуйҙым. Иң мөһиме, байрамда эсеп, тәртип боҙоп йөрөүселәр күренмәүе һөйөндөрҙө. Халыҡ, ошондай саралар йышыраҡ үткәрелеп торһа ине, тигән теләк менән таралышты.

**Райхана ЙӘҺҮҘИНА.**
**Ишембай районы**
**Кинйәкәй ауылы.**

МАТУР БУЛАЙЫМ...

# ҺОЛО КОСМЕТИКАҺЫ



**Һоло, һоло оно үҙенең тәбиғи көсө менән тиренең эсенә тәрән үтеп инеп, уны бысраҡтан һәм зарарлы матдәләрҙән таҙарта. Бынан тыш, һоло һәм унан әҙерләнгән ашамлыҡтар бит тиреһен шымарта, уны һығылмалы, йомшаҡ, бәрхәт кеүек итә. Шулай уҡ һоло яңы күҙәнәктәр барлыҡҡа килеү процесында ҡатнаша.**

Һолонан яһалған битлектең файҙаһы шунда уҡ һиҙелә. Ул битлектәр сит илдән индерелгән ҡиммәтле препараттарҙан отошлораҡ та. Ә уларҙы әҙерләү бик еңел:

**Биҙәнер алдынан ҡулланылған битлек**

2 ҡалаҡ ҡырылған алма йәки ҡыярға һөт һалырға һәм ҡайнар һыу һалынған һауытҡа ултыртып, бер аҙ ҡайнатып алырға кәрәк. Килеп сыҡҡан ҡатнашманы иҙелгән һоло ярмаһы менән ҡаймаҡ ҡуйылыҡына еткәнсе бутарға. Ҡатнашманы биткә һыларға һәм 15 минуттан емеш һуты ҡушылған һыуыҡ һыу менән йыуып төшөрөргә.

**Майлы биткә голливуд битлеге**

2 балғалаҡ һоло онон йомортҡа ағы менән күбекләнгәнсе туҡырға һәм 15-20 минутҡа биткә һыларға. Был битлек тирене һығылмалы итә һәм уның ялтырауын бөтөрә.

**Һытҡыға ҡаршы битлек**

1 йомортҡа ағы, 1 балғалаҡ лимон һуты һалынған ҡатнашманы яҡшылап болғатырға һәм иҙелгән һоло ярмаһын ҡушырға. Был битлекте 15-20 минутҡа биткә һаларға һәм аҙаҡтан йылы һыу менән йыуып төшөрөргә.

**Өс баҫҡыстан торған, майлы биткә тәҡдим ителгән битлек**

Иҙелгән һоло ярмаһын көнбағыш йәки зәйтүн майы менән - бер һауытта, 1 ҡалаҡ бал менән 2 ҡалаҡ алма йәки әфлисун һутын - икенсеһендә, 1 ҡалаҡ ҡатыҡ һәм 1/2 балғалаҡ лимон һутын өсөнсөһөнә һалып болғатырға.

Иң башта өс минут буйы һоло ярмаһы һәм май булған ҡатышманы бармаҡтың остары менән биткә һыларға. Унан һуң 5 минут буйы бал менән һут ҡатышмаһын һыларға. Ә иң аҙаҡ ҡатыҡты һыларға. Битлек кипкәс, уны йылы һыу менән сайығыҙ.

**Ҡоро тире өсөн битлек**

2 балғалаҡ балға 1 балғалаҡ ҡаты сөй, 2 балғалаҡ һоло ярмаһы, 0,5 ҡалаҡ зәйтүн майы ҡушып болғатырға һәм биткә һаларға. 15 минуттан йылымыс һыу менән йыуып төшөрөргә.

**Төрлө тирегә яраҡлы битлек**

1 ҡалаҡ һоло ярмаһы менән 1 ҡалаҡ алма һуты, 2 ҡалаҡ һөттө бергә яҡшылап бутарға. Килеп сыҡҡан ҡатнашманы аҙ генә йылытырға һәм таҙартылған бит тиреһенә, муйынға һөртөргә. Битлекте 20 минуттан бүлмә температураһындағы һыу менән йыуырға.

**Ошо күп төрлө битлектәр араһынан үҙегеҙгә ярағанын һайлап алығыҙ. Һоло битҡаһын ашау ҙа бик файҙалы. Ул тирегә, сәстәргә һәм бөтә организмға ыңғай йоғонто яһай.**

**Лиана ВӘЛИУЛЛИНА әҙерләне.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

# САЛАУАТ РАЙОНЫ ӘЛКӘ АУЫЛЫ КЕШЕЛӘРЕ ТОРМОШОНАН

## Йүкә менән ҡайыш

Беҙҙең ауылда һәр бер кешегә ҡушамат тағалар. Мәҫәлән, Хәким ҡартты "кәшил" (йүкәнән үреп эшләнгән һауыт), ә Ғилмитдин ҡартты "типи" (тауыҡ) тигәндәр.

Бер көн Хәким ҡарт, көлмәксе булып, Ғилмитдингә: "Ана, кире типкес килә", - тигән, ә Ғилмитдин килеп еткәс: "Һаумы, йүкә менән ҡайыш, ҡалғанын сам понимаешь", - тип әйткән, ти. Хәким ҡарт телһеҙ ҡалған. Хәҙер тапҡыр телле кешеләргә "Йүкә менән ҡайыш" тиҙәр.

## Ҡар есть һыу

Ҡыш көнө Ғариф ҡарттың аҙбары янып киткән. Ауыл кешеләре йыйылышып, янғын һүндерергә килгәндәр. Ауыл советы рәйесе Заһир ағай бейеккә баҫып алған да: "Ҡар һибегеҙ, йәмәғәт, ҡар есть һыу", - тип ҡысҡыра икән.

## Основной бүрек

Был хәл яҙ көнө, һыу ташҡан ваҡытта була. Ауыл клубы утрауҙа урынлашҡан булған, етмәһә, күпере лә булмаған. Йәштәр арҡыры һалынған бүрәнә аша ғына сығып йөрөгән. Иштимер менән Фәрғәт төндә күҙгә төртһәң күренмәҫлек ҡараңғыла шул бүрәнә аша сығып барғандар. Ни ғилләә менәндер, Иштимерҙең башынан ҡуян бүреге төшөп, һыуға ағып киткән. Уны-быны ҡарап тормай, Иштимер ҙә "Основной бүрек", тип ҡысҡырып, һыуға һикергән. Хәҙер уйламай, ашығып эшләгән кешегә "Основной бүрек" тип әйтәләр.

## Янып йәшәргә кәрәк!

Беҙҙең ауылда мал табибы Бәҙретдин бабай йәшәгән. Ул ат егеп, ауылдан-ауылға ферма малдарын дауалап йөрөгән. Үҙе тәмәке тартмаған. Бер көн юлда уға тәмәке тартыусы кеше ултырып килеп, ауыл осонда төшөп ҡалған. Тәмәке осҡоно төшөп, арбаға түшәлгән бесән яна башлаған. Бәҙретдин ағай бер ни һиҙмәй, ҡырын ятып килә икән. Бер кеше осрап: "Ағай, янып киләһең бит!"- тигән. Бәҙретдин ағай : "Йәшәгәс, шулай янып йәшәргә кәрәк!" - тип яуап биргән ти.

## Притом кәләш менән

Яҙ көнө колхоз келәте янып китә. Ауыл советы рәйесе Заһир ағай йүгереп килеп: "Фәтҡулла, тиҙ генә тракторыңды ҡабыҙ, келәт яна, бүрәнәләрҙе тарттырып торорһоң", - ти икән. Фәтҡулла бик фырт кейенеп алған, ҡатыны ла янында, ти. "Что һин, Заһир ағай, ҡәйнәм ҡунаҡҡа саҡырған, притом кәләш менән", - тип әйтеп һалған. Хәҙер, һеҙҙең ҡайғы юҡ, тип, әйтергә теләгәндә, "притом кәләш менән" тиҙәр беҙҙә.

## Сын башкирского народа

Беҙҙең ауылда оҫта телле Низамов Сабирйән ағай йәшәгән. Гел генә кешеләрҙе көлдөрөп, шаян һүҙ һөйләп йөрөгән. Етмәһә, ҡайһы саҡта һүҙҙәрҙе рифмаға һалып та һөйләп ебәргән. Ул Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир булараҡ, Сталиндан рәхмәт хаттары алған булған. Ҡайтҡас ауылдаштарына: "Был ҡағыҙҙы командир ҡулынан алдым. Строй алдына сығарып, ҡулымды ҡыҫҡас, аптырап торманым, "Сын башкирского народа, Салаватского порода", тип яуап бирҙем", - тип һөйләгән.

## Эшләһәң, ашата икән

Шул уҡ Сабирйән ағайҙың мәҙәктәренән. Элек колхоз бесән сабырға өмә ойоштора торған булған. Өмәгә һимеҙ һарыҡ һуйғандар. Эш яғына самалыраҡ булған ағайыбыҙ ҡаҙан тирәһендә урала икән. Бер нисә туҫтаҡ итле-майлы ашты ашағас: "Эшләһәң, ашата икән!"- тип ҡуйған. Төштән һуң да ҡаҙан эргәһендә йөрөп, "Ашаһаң, һыуһата икән",- ти икән.

## Наша лошадь не курит

Сафура апайҙың ҡыҙы урыҫҡа кейәүгә сыҡҡан. Ат егеп, ҡоҙалары менән яланға сыҡҡан былар. Аты ҡалҡыуҙы менә алмайынса туҡтап ҡалғас, Сафура апай:

- Наша лошадь не курит,- тип ысҡындырған, ти.

## Золотобогатеевич

Алтынбай ағайҙың улы хәрби комиссариатҡа ҡаралырға барғас, унан исем-фамилияһын һорағандар. Ул оҙаҡ уйлап тормай:

- Урал Золотобогатеевич! - тигән.

## Ярты ҡолаҡ Абдулхаҡ

Бер ваҡыт төнгө сменала Фәтҡулла менән Абдулхаҡ ер һөрәләр икән. Абдулхаҡ һөрөп бөткән дә, ергә ятып йоҡлаған. Ә Фәтҡулла эшен дауам иткән. Бына бер саҡ Абдулхаҡ ауыртыуҙан уянып, ҡолағын тотоп ҡараһа, уның яртыһы юҡ, ти. Баҡһаң, Фәтҡулла ерҙә кеше ятҡанын күрмәй, трактор төрәне менән бергә Абдулхаҡтың ярты ҡолағын тапап киткән. "Ярай әле, баш эләкмәгән!" тип шатланған Абдулхаҡ.

## Ниңә ҡысҡырманың?

Ҡарлуғас апай һатыусы булып эшләгәндә буш шешәләр күбәйеп киткән. Ҡарлуғас апай менән Абдулхаҡ ағай йәшниктәрҙе тракторға тейәгәндәр ҙә, Кропачева станцияһына алып киткәндәр. Һатыусы апай тракторҙың арбаһына ултырған. Тик алыҫ та китмәгәндәр, арба тракторҙан ысҡынып, туҡтаған. Һатыусы ҡысҡырып та, артынан йүгереп тә ҡараған, тик тракторсы әйләнеп тә ҡарамаған. Ике сәғәтләп ваҡыт үткәс, трактор кире килгән. "Станцияға килеп етеп, артыма боролоп ҡарағайным, арба ла, һин дә юҡ. Ниңә ҡысҡырманың?" - ти икән тракторсы.

## Рядовой Садыков, Мөҡәдәсә ни хәлдә?

Һуғыштан ҡайтҡас, Зинуан ағай һуғышта күргәндәрен һөйләй, ти: "Жуковты күрҙем, һин дә мин һөйләшеп ултырҙыҡ. Һаумы, Садыҡов, Мөҡәдәсә ни хәлдә, тип килеп күреште",- ти икән. Мөҡәдәсә тигәне ҡатыны була инде.

Хәҙер ҙә, кеше ышанмаҫлыҡ хәбәр һөйләһәң, "Һаумы, Садыков, Мөҡәдәсә ни хәлдә?"- тип әйтәләр.

**Лиана ВӘЛИУЛЛИНА.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# АЛСАЙЫП НИ...

Беҙҙең Хәйбулла яҡтарында һөйләштә **"алсайып"** тигән һүҙ ҡулланалар. Мәҫәлән, бер апайҙың биш ҡыҙы бар, бишенсеһен кейәүгә биргән сағында: "Әй, Аллам, ҡыҙҙы кейәүгә биргән һайын урамда алсайып ятаһың бит,"- тигәне хәтерҙә. Алсайып ятаһың, йәғни ал байраҡ кеүек әллә ҡайҙан иғтибарҙы йәлеп итәһең. Ауылдағы кеше тикшерергә яратыусыларҙың булған-булмаған ҡылыҡ, ҡырын-мырын эштәр, ҡыҙҙарындың холоҡ-тәртиптәре тураһында тел сарлауына ҡарата әйтелгәндер инде. Йә булмаһа, "Кит, анау нәмә бөтә ауылға алсайып иҫереп йөрөй" тиҙәр, йәғни "Әллә ҡайҙан күҙгә ташланып тора" тигән мәғәнәлә лә әйтелә был һүҙ. Кеше күҙенән йәшеренкерәп тота торған әйбергә лә: "Нишләп был нәмәнде алсайтып ҡуйҙың?"- тиҙәр.

Әсәйем, инәйемдәр хужалыҡ сумкаһын **"ҡуржын"** тиҙәр ине. "Апай, миңә лә шундай матур, үҙеңдеке ише ҡуржын алырһың", тип һөйләшәләр ине.

Беҙҙең яҡта сабыйҙар аяғына баҫып тора башлаһа "айтас баҫа", "айтас тора" тиҙәр. "Хәҙер атларға самалай, айтас тора", - тип һөйөнәләр. Ә Мәләүез яғында "айтас" һүҙе икенсе мәғәнәгә эйә. Әйткән һүҙендә тормаған, аҡылы тотороҡһоҙ, килделе-киттеле кешене шулай атайҙар.

Тағы ла **"тәкәнтәй"** тигән һүҙ бар. Ул ҡатын-ҡыҙ холоҡло, ваҡсыл, күп һөйләүсе ир-атҡа ҡарата әйтелә. Килеп сыҡҡан тамыры ла билдәле: тәкә + кәнтәй.

Йылайыр районында **"бәтлек"** тигән һүҙҙе хужабикә апай йыш әйтә ине. Мәғәнәһе "үтә этлеклегә" тап килә. "Бейем торғаны бәтлек. Урап үт," - тиер ине ул апай. "Бә" (икеләтә тигәнде аңлата) һәм "этлек" һүҙҙәренән яһалған.

Ә бына был һүҙҙе ағайымдан ишеттем. Бер ваҡыт: "Ҡартатайым бик пуфтар кеше ине," - тип һөйләне. Һорашҡас, **"пуфтар"** һүҙе теүәл, конкрет, бөхтә тигән мәғәнә йөрөтөүен белдем.

Уйлай китһәң, бик матур мәғәнәле һүҙҙәр икән былар. Ҡыҙғаныс, был һүҙҙәр хәҙер һөйләштә бик ҡулланылмай.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУРҠЫУМЫ?

## Ул кешене ҡыйыуыраҡ итә

Яу килә, тип, аҙығыңды бөтөрмә, ил күсә, тип, утыңды һүндермә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәшлекте белдекле булғаны өсөн тиргәйҙәр, йәнәһе, донъя унан башланған. Ләкин ҡартлыҡ та донъя уның менән бергә бөтә, тип уйлай бит.

**(Кристиан Геббель).**

Йәшлек белгән булһа икән! Ҡартлыҡ булдыра алған булһа икән!

**(Анри Эстьен).**

Үҙенең өнһөҙлөгө менән минең фекерләүҙәремде бүлдергән әңгәмәселәрҙе йәнем һөймәй.

**(Лешек Кумор).**

Ахмаҡ та өнһөҙ саҡта аҡыллы булып күренә ала.

**(Халыҡ мәҡәле).**

Өнһөҙ кеше бик һирәк яңылыша, унда ла өндәшкән саҡта.

**(Владислав Гжещик).**

Ҡурҡыу кешене ҡыйыуыраҡ итә.

**(Латин халыҡ мәҡәле).**

Бөтә ирҙәр ҙә бер төрлө, тик... эш хаҡтары ғына төрлөсә.

**(М. Аршевский).**

Уйыңды тота алмаһаң да, һүҙеңде тот.

**(Славомир Троцкий).**

Белемле кеше генә өйрәнергә ынтыла, ә белемһеҙ өйрәтеүҙе өҫтөн күрә.

**(Эдуар Ле Беркье).**

Бөтөн донъя алданғанды ярата, шулай булғас, алдаһындар, әйҙә.

**(Карло Караффа).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Аллаһы Тәғәлә кешене барлыҡҡа килтергәндән һуң, уны яһаған материал - балсыҡ артып ҡала.**

**- Ошо артып ҡалған балсыҡтан тағы нимә яһарға һуң һиңә? - тип һорай Аллаһ кешенән.**

**- Бәхет, бәхет яһап бир! - тип шатланып ҡысҡырған кеше.**

**Аллаһ бер ни ҙә өндәшмәйенсә генә ҡалған балсыҡты кешенең үҙенең ҡулына тотторол киткән... "**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5481
Заказ 3144